ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

10-16 сентябрь (нарысай) 2022

№36 (1026)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Ауылға еректерер тәҡдим**



2-3

**Үҙ эшеңде башлағанда...**

**ҡурҡыу хисенә бирелмәҫкә!**



8

**Өйтөбәктәрҙең дә өйтөбәге мин...**



10

**Ағинәйҙәрҙең аҡ нурында**



12

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! Сентябрҙән 2023 йылдың беренсе яртыһы өсөн ПР905 индексլы "Киске Өфө" гәзитенә яҙылыу хаҡы 798 һум 60 тин. Өфө халҡы "Өфөматбуғат" киоскыларында - 600 һумға, коллектив менән редакцияның үҙендә (кәмендә 5 дана) 372-шәр һумға яҙыла ала. Гәзитебеҙҙә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер бүләккә бик шәп китаптар аласағы тураһында ла онотмағыҙ. Бергә булайыҡ!***

***МӨХӘРРИРИӘТ.***

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### ? Бөгөнгө йәштәр үҙенең төп һөнәренән тыш, тағы ниндәй шөғөлдәргә эйә? Әллә хеҙмәттән ситләшеү уларҙы, мәҫәлән, ата-бабалар шөғөлдәрен дә һанламауға килтерҙеме?

***Гөлсөм КӘРИМОВА, Дәүләкән ҡалаһы, уҡытыусы:*** Минең төп хеҙмәт урыным - мәктәп, балаларға рус теле һәм әҙәбиәтенән дәрестәр бирәм. Йәш белгес программаһында ҡатнашып, үҙемдең тыуған яғым Ғафури районынан ошо ҡалаға килгәйнем.

Элек нисек булғандыр, әммә хәҙер уҡытыусыларҙың ҡағыҙ эше бик күп. Унын араһында дәфтәр тикшереп өлгөрөргә лә кәрәк. Ярай, һүҙ был турала түгел. Нимә әйткем килә, шәхсән уҡытыусыларҙың төрлө шөғөл менән булырға ваҡыттары ла ҡалмай тиерлек. Мин үҙем, мәҫәлән, бәйләргә, тегергә яратам. Һуңғы ваҡытта ҡашмау, селтәр, түшелдерек һәм башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының башҡа биҙәүестәрен эшләй башланым. Был шөғөлдәр менән булырға күңел тартылып ҡына тора.

Тағы ла мин төрлө ептәрҙән сумкалар эшләйем. Был шөғөлөм миңә рухи кинәнес кенә бирмәй, ә өҫтәмә килем дә килтерә. Тимәк, төп профессиянан тыш, тағы ла ниндәйҙер шөғөлгә эйә булыу финанс йәһәттән дә яҡшы икәнен үҙемдән беләм.

Тыуған йортомда атайым бейәләр үрсетә. Йәйгеһен ҡымыҙ, ә ҡышын ҡаҙылыҡ эшләп, тирә-яҡ ауылдарға һатабыҙ, шуға күрә мин бәләкәйҙән ҡымыҙ эшләү серҙәрен беләм. Был эште хәҙер еңеләйтеп, ҡайһы бер ҡымыҙ эшләүселәр ҡул көсөн әлләни файҙаланмай. Ә беҙ иһә әле булһа тик ағас көбөләрҙә, хас та элекке кеүек ҡул менән бешеп, ҡымыҙ етештерәбеҙ. Ҡул көсө һалынған эсемлек тәмлерәк була, ти атайым. Унан ҡалһа, беҙҙең эшмәкәрлек көбө һәм башҡа ошондай кәрәк-яраҡ эшләүсе оҫталарға ла ярҙам, сөнки даими рәүештә уларҙың тауарын һатып алабыҙ. Ошо рәүешле ата-бабаларҙан күсә килгән ҡул шөғөлдәрен һаҡлап ҡалыуға һәм киләһе быуындарға еткереүгә үҙ көсөбөҙҙө һалабыҙ.

Бер туған ағайым полиция хеҙмәткәре. Һирәк кенә ялына ҡайтҡанда ла ауылдағы бөтә эштәрҙе лә емертеп эшләп китә. Ат дағаларға, сыбыртҡы үрергә, тимерлектә булышырға айырыуса ярата. Шуға күрә йәштәрҙе ата-бабалар шөғөлөнән ситләшкән, тип әйтергә телем әйләнмәй, теләге булғандар элекке кәсептәрҙе онотмай һәм онотмаясаҡ та.

## "КИСКЕ ӨФӨ"ГӘ - 20 ЙЫЛ

# ҠАРАҢҒЫЛЫҠҠА...

## ЯҠТЫЛЫҠ ӨҪТӘЙ

**Бөгөнгө йәмғиәт өсөн сифатлы һәм ваҡытында еткерелгән мәғлүмәт төп ҡиммәттәрҙең береһе булып тора. Ләкин мәғлүмәтте әҙерләү һәм уны таратыу ғына әҙ, уның тулы, дөрөҫ, ышаныслы булыуы мөһим. Күп һанлы мәғлүмәти сығанаҡтар араһында баҫма гәзит һәм журналдарҙың айырым тотҡан урындары бар. Эйе, бәлки улар интернет менән сағыштырғанда тиҙлек йәһәтенән ҡалышалыр, әммә быуындан-быуынға тапшырыла килгән иң мөһим мәғлүмәттәрҙе нәҡ яҙма баҫмалар һаҡлап килә. Ғөмүмән, баҫма матбуғат оҙаҡ йылдар йәшәгән һәм йәшәйәсәк классика.**




Бөгөнгө һүҙем нәҡ ошондай мәртәбәле, бай мәғлүмәтле, күптәрҙең яратып уҡыған һәм күтәп алған гәзите - "Киске Өфө" тураһында. Оҙаҡ йылдар дауамында баҫманы яҙҙырып уҡып барам. Һәм ошо ваҡыт эсендә "Киске Өфө" үҙенең төрлө йәштәге уҡыусылары өсөн ышаныслы дуҫ, бай мәғлүмәти хазина донъяһы булып ҡала килә. Унын битендә баҫылған һәр бер мәҡәлә төплөлөгө менән айырылып тора, тормоштоң күп төрлөлөгөн яратып ҡабул итергә өйрәтә, позитивҡа көйләй. Гәзиттә донъя күргән мәҡәләләр кешегә рухи үҫеш биреүе, матурлыҡты күрергә булышлыҡ итеүе менән абруйлы.

Үҙем ауылда тыуып үҫкән һәм әлеге мәлдә лә ауылда йәшәгән кеше булараҡ, мине айырыуса ошо өлкәгә ҡағылышлы мәҡәләләр ҡыҙыҡһындыра. Колхоз-совхоздар тарҡалып бөткәс, ауыл хужалығын уңған фермерҙар үҙ ҡулдарына алды. Нәҡ шундай уңғандар, үҙ ере өсөн янып-көйгәндәр тураһында мәҡәләләрҙе йышыраҡ күрге килә гәзиттә. Ауыл хужалығы тотош илдең тотҡаһы, шуға күрә йәштәребеҙҙең ошо йүнәлештә эшләүен әүҙемләштерергә кәрәк, һәм уларға ҡарата төрлө яҡлап, шул иҫәптән гәзит-журналдар тарафынан да иғтибар уларҙың күңелен үҫтереп, ҡанатландырып ебәрер ине, тип уйлайым.

"Киске Өфө"нөң тағы ла күңелемә яҡын яғы - мәҡәлә геройҙарының күңелен аса, һәр геройҙың холоҡ-фиғелен, уларҙың әйтергә теләгән һәр фекерен матур, йөкмәткеле һәм аңлайышлы итеп гәзит уҡыусыһына еткерә белеүендә. Кешенең күңеленә инеп, унын тел асҡыстарын аса белеү үҙе бер оҫталыҡ һәм "Киске Өфө"гә был йәһәттән һүҙ тейҙергеһеҙ.

Телевизор һәм интернет күпселек күңелһеҙ хәлдәр, ниндәйҙер ҡурҡыныс ваҡиғалар тураһында ғына һөйләй һәм күрһәтә. Ә гәзит, айырыуса "Киске Өфө", ошо ҡараңғылыҡҡа яҡтылыҡ өҫтәй, сөнки яҡшы кешеләр тураһында яҙа, улар башҡарған эштәр хаҡында бәйән итә, йәғни гәзиттең төп урынын кеше алып тора. Был бик хуп күренеш, сөнки уларҙың тормошо һәм хеҙмәте кемгәлер үрнәк булһа, икенсе кеше өсөн ниндәйҙер эшкә тотонорға ынтылыш бирә.

**Сәкинә ТҮЛӘБАЕВА.**
**Архангел районы.**

12+

ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ БАР!

# АУЫЛҒА ЕРЕКТЕРЕР ТӘҠДИМ

**Ауыл ерендә халыҡ һаны кәмемәһен, йәшәү шарттары яҡшырһын өсөн ниҙәр эшләргә була? Был турала күп уйланғаным бар һәм бер нисә тәҡдим-фекерем менән бүлешергә булдым.**



Дәүләт тарафынан ауыл хужалыҡтарына бүленгән бик күп субсидиялар, гранттар менән башҡорт халҡы файҙаланмай тиерлек. Ни өсөн? Тәү сиратта, тәжрибә һәм юридик белем юҡлыҡтан, ҡайҙан һәм нисек тотоп башларға белмәгәнлектән киләләр был. Әммә бушаған ауыл ерҙәрендә үҙ эшен асыусылар, ер аҫты байлыҡтарын соҡорға әҙерҙәр табыла тора, һағалап ҡына торалар һымаҡ хатта. Бәлки, Себер яҡтарында һаулыҡтарын бөтөрөп эшләп йөрөгән йәштәрҙең елкәләренән тотоп алып ҡайтырға, эшләтергә кә-рәктер ул? Ошо мәсьәләне нисегерәк хәл итеү тураһында ла уйланһын ине ул беҙҙең етәкселәр.

Интернет селтәрҙәрендә милләттәштәрҙе берләштергән төрлө төркөмдәрҙә лә ошо турала яҙып ҡарағаным булды. Ләкин минең менән фекер алышыусы, комментарий яҙыусы кешеләр табылманы. Тәҡдимем шундай: бер нисә ауылға бер бәләкәй завод төҙөргә була. Мәҫәлән, һөт эшкәртеүсе завод төҙөтөп, унда ҡымыҙ, ҡаймаҡ, май, эремсек һ.б. етештереүҙе ойошторорға мөмкин. Шулай уҡ ит ризыҡтары етештереүсе, төрлө кәрәк-яраҡ өсөн тире һәм йөн эшкәртеүсе бәләкәй предприятиелар асырға булыр ине. Хайуандарға һәм ҡоштарға ашатыу йәки һабын эшләү маҡсатында һөйәктәрҙе эшкәртеү, яҫтыҡ һәм башҡа төрлө кәрәк-яраҡ өсөн тотонолған ҡанаттар менән эш итеүсе, банкаларға тултырып һатылған әҙер йәшелсә ризыҡтарын етештереүсе завод төҙөп ҡуйһаң да тик яҡшыға ғына булыр ине бит. Бындай заводтар булһа, кеше малды һәм ҡош-ҡортто күпләп аҫрар ине, моғайын. Югиһә, ҙур предприятиеларға сеймал күп кәрәккәнлектән, файҙаһыҙға әйләнеп, пальма майы, соя ҡушып етештерә башлайҙар. Хәләл көсө менән тапҡанын һатып, аҡса эшләй алмаған ауыл халҡы өсөн дә был бәләкәй заводтар ҡулай ғына булыр, минеңсә. Тырыштар һәм йүнселдәрҙән күреп, быға тиклем илке-һалҡы йөрөгән һәм эскелеккә һалышҡандар ҙа насар ғәҙәттәренән арынып китер ине. Был бәләкәй заводтар юл сығымдарын да күпләп кәметер, тим. Сөнки 200 литр һөттө 100 км алыҫлыҡҡа ташығансы, уны күрше ауылдағы һөт эшкәртеү заводына алып барып тапшырыу ике яҡ өсөн дә файҙалыраҡ бит.

Был предприятиелар менән идара итеүселәр ауыл хужалығы белгесе булып, был өлкәләгә һәм хоҡуҡ буйынса ла белемдәрен үҙ мәнфәғәтендә генә түгел, ә төрлө грант аҡсалары алыу, ауылдың

БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР...

## НИ СӘСҺӘҢ, ШУНЫ УРЫРҺЫҢ

Билдәле ки, бойҙай сәсеп, арпа урып булмай. Әкиәттәге айыуҙы ғына бойҙай һабағының тамырын, шалҡандың һабағын ашатып алдап була. Матди тормошта ни сәсһәң, шуны урырын бала аҡылы ла аңлай. Күҙгә күренмәгән рухи тормошта ни сәсеп, ни урырын беләме Әҙәм балаһы? Яҙмыш маңлайға яҙылған, тибеҙ, уны үҙгәртә алмаған хәлдә лә матурайтырға, йә, киреһенсә, Аллам һаҡлаһын, ҡара төҫкә буярға мөмкинлеген аңлайбыҙмы? Холҡобоҙ ниндәй, яҙмышыбыҙ шундайлығын, йәғни холоҡ сәсеп, яҙмыш урырыбыҙҙы беләбеҙме?

Уй йөрөтә кешене, фекер тәрәнлеге тормошона мәғәнәүи төҫ бирә. Фекерҙәребеҙҙе һүҙҙәр менән әйтеп, эргәбеҙҙәге ысынбарлыҡты аңлайбыҙ, аңлатабыҙ, эске торошобоҙҙо ла, тышҡы ҡиәфәтебеҙҙе лә шулай сағылдырабыҙ, нимә эшләребеҙҙе һүҙҙәр ярҙамында нығытабыҙ, шулай йәшәйбеҙ, бер туҡтауһыҙ оҙаҡ ҡабатланғаны ғәҙәткә әйләнә.

Иғтибар иткәнегеҙ бармы, холҡобоҙҙоң башҡаларға күренеп торғаны нәҡ ана шул ғәҙәттәргә бәйле - биллаһи, холоҡ сәсһәң, яҙмыш урырһың. Тимәк, уй-фекер тәғәйен яҙмышыбыҙҙың орлоғо, ул шытымлы булғанда ғына яҙмышыбыҙ уңдырышлы буласаҡ. Ҡолаҙы белеп һалам түшәгәндәй, яҙмышыбыҙҙы ҡурсалай, матурайта алыу үҙебеҙҙән тора, тимәк.

Уй-фекерҙәребеҙҙе таҙа, саф килеш һаҡлаһаҡ, ниәттәребеҙ изге булһа, ошо холҡобоҙ ғәҙәткә әйләнһә, ҡурсалаулы булыр инек. Диндарҙар (Аллаһтан ҡурҡҡандар) өсөн намаҙ ана шул ҡурсалаусы булып тора ла инде. Ниәтебеҙ, шытымлы орлоҡ һымаҡ, саф булғанда башта әйткән уй-фекерҙәребеҙ күңел аша нығына, таҙарына. Донъяға, эргә-тирәбеҙгә ҡарашыбыҙ үҙгәргәндә генә үҙебеҙ ҙә үҙгәрә алабыҙ. Тос орлоҡтар сәсәйек!

**Исмәғзәм ИСМӘҒИЛЕВ.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

***Бөгөнгө йәштәр үҙенең төп һөнәренән тыш, тағы ниндәй шөғөлдәргә эйә? Әллә хеҙмәттән ситләшеү уларҙы, мәҫәлән, ата-бабалар шөғөлдәрен дә һанламауға килтерҙеме?***

***Салауат ХАФИЗОВ, "7 егет" телевизион конкурсының беренсе миҙгел еңеүсеһе, производство-техник бүлек етәксеһе:*** Ысынлап та, бөгөн, бәлки, хеҙмәттән ситләшә барабыҙҙыр. Миҫал өсөн бесән әҙерләүҙе алайыҡ. Ауыл был ваҡытта айырыуса йәнләнә. Элегерәк бигерәк күңелле була торған ине бесән әҙерләүҙәр, сөнки тотош ғаилә менән бергә ҡырға атҡа тейәлеп бараһың, салғы менән бесән сабаһың, тырма менән йыяһың, һәнәк менән күбәләйһең. Ҡул араһына ингән малайҙар күбә тарттыра, кәбән ҡойоуҙа ҡатнашып, ҙурҙаренең кәрәкле булыуын тойоп үҫте. Бөтә эш ҡул көсө менән башҡарылды, шуға күрә һәр ауыл малайы салғы тота белде, тырманың теше төшһә, "һә" тигәнсә эшләп ҡуйҙы, һәнәк һапланы. Хәҙер бесән эшләү ҙә техникаға "тапшырылып" бөтөп бара, ҡамасау булып йөрөмәһендәр, тигән уй менән малайҙар бесәнгә алып йөрөтөлмәй, тимәк, улар эш барышын белмәй үҫә. Бесән эшләү миҫалында ғына ла бөгөнге көндә хеҙмәткә булған һөйөүҙең һүрелә барыуына, хеҙмәткә ҡарата булған хөрмәттең юғалыуына шаһитбыҙ.

Үҙем ҡатнашҡан "7 егет" проектының иң мөһим үҙенсәлеге - тапшырыуҙы эшләүселәр егеттәргә төрлө һөнәр менән танышырға, үҙҙәрен бер нисә өлкәлә һынап ҡарарға мөмкинлек биреүе. Шулай уҡ төрлө өлкәлә эшләүсе оҫталарҙың хеҙмәтен күреү егеттәргә үҙҙәренең тормошона яңы һулыш индерергә, яңы хеҙмәт офоҡтары асырға мөмкинлектәр ҙә биреүе менән мәртәбәле.

Күпселек кешенең төп эшенән тыш, яратҡан шөғөлө лә була. Башҡорт егеттәренең ошондай шөғөл, хобби итеп халҡыбыҙға хас булған, быуындан-быуынға күсә килгән кәсептәрҙе үҙ итеүҙәре айырыуса хуплауға лайыҡ булыр ине, тип уйлайым. Был кәсептәр менән булышыу, теләк булғанда, беҙгә ауырлыҡ тыуҙырмаясаҡ, сөнки улар ҡандан, атай-олатайҙарыбыҙҙан килә. Халҡыбыҙҙың һәр шөғөлөндә беҙҙең тарих ята, бер кәсеп тә буш урында барлыҡҡа килмәгән, уларҙың һәр береһе төплө уйланылған, тормош көтөүҙе еңеләйтеү өсөн ҡалыплаштырылған, шуға күрә беҙгә уларҙы оноторға ярамай.

Мин ҡатнашҡан миҙгелдә проектта төрлө оҫталыҡ дәрестәре үткәрҙеләр. Уларҙың һәр береһе үҙенсәлекле булды, оҫталарҙың үҙ эштәрен яратып, урын ерен дә еткерең башҡарыуы һәм беҙҙән дә ошоно талап итеүе беҙгә, ҡатнашыусыларға, оло тормош дәресе булды. Шулай уҡ проект барышында оҫрашҡан оҫта ағайҙар үҙҙәренең эштәре менән генә түгел, ә аҡыллы һүҙҙәре менән дә күңелде үҫтереп, киләсәккә ышаныс биреп, ҡанатландырып ебәрҙе. Уларҙың өйрәткән һәр шөғөлө, кәсебе шәхсән минең өсөн файҙалы булды, улар пазл кеүек үҙ урындарына тороп, тормошомдо тулыландырҙы һәм бөтәйтте. Ағайҙар күрһәткән һәр кәсеп: батман эшләү, ағастан айыу һыны юныу, күн эшкәртеү һәм уны дөрөҫ ҡулланыу, талдан ситәүкәләр үреү, шул уҡ бесән сабыу - киләсәктә миңә мотлаҡ кәрәге тейәсәк икәнлеген беләм.

Һөнәрмәндәр, ҡулы эш белгәндәр һәр заманда ла юғалып ҡалмаған һәм ҡалмаясаҡ. "Егет кешегә етмеш төрлө һөнәр ҙә аҙ", тигән мәҡәлә бик тапҡыр һәм дөрөҫ әйтелгән. Ғөмүмән, кешенең шөғөлдәре күберәк булған һайын, улар уға рухи йәһәттән дә, физик яҡтан да үҫешергә булышлыҡ итә.

## Н И М Ә ?  Ҡ А Й Ҙ А ?  Ҡ А С А Н ?

✔ Башҡортостан Һаулыҡ һаҡлау министрлығының 12 сентябргә мәғлүмәттәре буйынса, тәүлек эсендә 482 кеше коронавирус йоҡторған. Ошо уҡ осорҙа 319 кеше һауыҡҡан, 2 үлем осрағы теркәлгән. Башҡортостанда коронавирусҡа ҡаршы прививка эшләтеү дауам итә. Бөгөнгә 3 237 101 кеше - вакцинаның беренсе, 2 970 972 кеше икенсе компонентын яһатҡан.

✔ Башҡортостан менән Луганск Халыҡ Республикаһы араһында парламентара хеҙмәттәшлек тураһында килешеү төҙөлә, тип хәбәр итте Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев. "Үҙ ваҡытында беҙ Ҡырым парламентына ярҙам күрһәткәйнек. Хәҙер тарих ҡабатлана, ошо ыңғай тәжрибәне йәнә ҡулланырға ваҡыт", - тип билдәләне ул. Уның һүҙҙәренсә, тиҙҙән Луганск Халыҡ Республикаһы етәкселеге Башҡортостан Башлығы Радий Хәбировтың саҡырыуы буйынса республикаға килә.

✔ Рәсәй Президенты Владимир Путин Башҡортостандың күренекле дәүләт эшмәкәре, Рәсәйҙең отставкалағы 2-се класлы ғәҙәттән тыш һәм тулы хоҡуҡлы вәкиле, сәйәсәт фәндәре докторы, профессор Илдус Илешевты Почет грамотаһы менән бүләкләне. Илдус Илешев илдең тышҡы сәйәси курсын тормошҡа ашырыуға ҙур өлөш индергән шәхес. Ул төрлө йылдарҙа Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте премьер-министры урынбаҫары - мәҙәниәт һәм милли сәйәсәт министры, Ислам хеҙмәттәшлеген ойоштороғанда Рәсәйҙең даими вәкиле вазифаларын биләне.

✔ Башҡортостанда дәүләт колледждарының һәләтле студенттарына матди ярҙам итеү өсөн республика Башлығы стипендияһы күләме 2300 һумдан 4900-гә тиклем арттырылды. Был хаҡта Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә мәғариф һәм фән министры Айбулат Хажин билдәрҙе. Уның билдәләүенсә, стипендиялар һаны ла арткан. 2021 йылда улар 107 булһа, 2022 йылда иһә - 150. "Улар 1 сентябрҙән түләнә башлай. Хәҙер 2022-2023 уҡыу йылында стипендияға дәғүә итеүселәрҙең асыҡ конкурсы уҙғарыла", - тип өҫтәне министр.

✔ Рәсәй Хөкүмәте 2023 йылға байрам көндәрен билдәләне. Яңы йыл байрамдары 2022 йылдың 31 декабрендә башлана һәм 2023 йылдың 8 ғинуарына тиклем дауам итә. 1 һәм 8 ғинуар йәкшәмбегә тура килә, уларҙы 24 февралгә (йома) һәм 8 майға (дүшәмбе) күсерергә хәл ителәр. Бынан тыш, 23 февралдән 26 февралгә тиклем; 8 март; 29 апрелдән 1 майға ҡәҙәр; 6-9 май; 10-12 июнь; 4-6 ноябрь байрам көндәре тип иҫәпләнә.

инициативалы кешеләренә лә ошо юҫыҡта ярҙам итеү йәһәтенән дә эшләй ала. Кәрәкле кешеләр менән таныштыра, ҡала һәм ауыл халҡы араһында күпер һала...

Ваҡыт үтеү менән шулай урындағы халыҡ мәнфәғәте өсөн етештерелә башлаған продукция төрлө тармаҡ конкурстарында ҡатнаштырып, реклама яһап һәм башҡа юлдар менән таратылып, билдәлелек яулай һәм баҙарҙа үҙ урынын таба аласаҡ. Был рәүешле эшләһәк, ҡытайҙар беҙҙән үҙҙәре сығып ҡасасаҡ! Сөнки улар етештергән нәмәләрҙе һатып алыусы ла булмаясаҡ, халыҡ барыбер үҙебеҙҙең сифатлы аҙыҡ-түлеккә, кейем-һалымға һәм башҡа әйберғә өҫтөнлөк бирер ине. Унан да бигерәк, ауылдаштар ҡалала 10 мең һум аҡсаға урам һепереүсе булып, йәки Себерҙә ишеккә әйләнеп эшләп йөрөмәҫ ине. Унда ла хәҙер бөрөү ҙә тоҡлап аҡса әҙерләп көтөп тормай. Ә иң мөһиме, әле бер ҡайҙа ла үҙ продукцияһын тәҡдим итә алмаған ауыл халҡының тормошон яҡшыртыу ине был.

Әлбиттә, бындай бәләкәй заводты ябай кеше төҙөй алмай, уларға кемдер инвестиция һалырға тейеш. Хәлленәр араһынан шундай кешеләрҙе эҙләргә кәрәк, ә эшселәрҙе ауылдарҙан да табып булыр. Бына беҙҙең ауылда Әхәт һәм Ғәлимйән Искәндәровтар ғүмер буйы фермала эшләне. Әхәт ағайҙың ауылда Мират Иманғәлин һәм Фидан Ҡунаҡбаев атлы типһә, тимер өҙөрҙәй ике кейәүе бар. Шулай уҡ төрлө иҫәп-хисапта уларға ярҙам итерлек Хисаметдин ағай Искәндәров йәшәй. Кемдең мейеһен, кемдең беләген эшкә егергә мөмкин.

Башҡорт ауылдарындағы бәләкәй заводтарҙың эске документацияһын башҡорт телендә алып барырға һәм шулай туған телебеҙҙе һаҡлауға өлөш индерергә мөмкин. Кемгә кәрәк, шул аңлай. Әле лә ҡайһы бер ауылдарҙа өйөр-өйөр йылҡы аҫраусыларыбыҙ бар, улар өсөн ҡымыҙ етештереү нөктәһе асырға булыр. Шул ваҡытта халыҡ тупланыр, ҡалаға һаҫыҡ һауа һуларға ынтылмаҫ. Ошо эштәр башланһа, аграр университет та гөрләп торор, кеше эшһеҙлектән дә йонсомаҫ, хатта ауылда буйҙаҡтар кәмер ине. Эш булған ауылға йәштәр ағыласаҡ, ғаиләләр барлыҡҡа киләсәк, балалар тыуасаҡ. Шунда теләйҙәрме, юҡмы, барыбер мәктәп, клуб төҙәп ултыртасаҡтар, сөнки был халыҡ өсөн кәрәк.

Бөгөн бөтә донъяла экологик яҡтан таҙа, сәләмәтлек өсөн файҙалы тәбиғи ризыҡҡа, кейемгә һәм башҡаһына ҙур иғтибар бүленгән заманда беҙҙең бындай бәләкәй заводтарыбыҙ реклама өсөн күп аҡса сарыф итмәйенсә, интерент аша ла билдәлелек яулап, киң таралып китә алыр ине. Ә башҡорт кешеһенә ата-бабалары ерендә ерегеп, тормошон яйға һалып йәшәп китеү өсөн ошонан да ҡулайы юҡ.

**Фирҙәүсә ҒӘЗИЗОВА.**

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

***Бөгөнгө йәштәр үҙенең төп һөнәренән тыш, тағы ниндәй шөғөлдәргә эйә? Әллә хеҙмәттән ситләшеү уларҙы, мәҫәлән, ата-бабалар шөғөлдәрен дә һанламауға килтерҙеме?***

***Зариф ӘБСӘЛӘМОВ, Миәкә районы, ауыл хужалығы белгесе:*** Һәр заманда ла йәштәрҙең шөғөлө төрлө өлкәгә ҡарай. Әгәр ҙә элек ҡул эшенә бәйле шөғөл һәм кәсептәр күпселекте тәшкил итһә, 90-сы йылдарҙа йәштәрҙең күбеһе төп эше итеп тә, шөғөл булараҡ та сауҙа өлкәһен һайланы, хәҙер иһә IT, программалау, компьютерға өҫтөнлөк бирәләр.

Атай-олатайҙарҙың кәсебе, шөғөлө элек тә күберәген ауылдарҙа йәшәп килде. Ҡала балаларына ситән үреү йәки ат дағалау кеүек кәсептәр ул ваҡытта ла әллә ни фарыз түгел ине, хәҙерге көндә лә әллә ни кәрәге юҡтыр, тием. Ҡалала тыуып үҫкәндәрҙең бик һирәктәре генә тормош көтөргә ауыл ерен һайлай, шуға күрә элекке шөғөлдәрҙе, халҡыбыҙҙың кәсептәрен һаҡлап ҡалыу, үҫтереү, киләсәк быуынға тапшырыу нәҡ ауылда тыуған һәм шунда йәшәгәндәр иңенә төшә. Һәм был дөрөҫтәр ҙә, сөнки улар атайҙарының, ағайҙарының хеҙмәтен күреп үҫә, үҙҙәре әүҙем шөғөлләнмәһә лә, һәр төрлө эштең айышын белә.

Шулай ҙа нәҡ бөгөнгө заман йәштәре генә хеҙмәттән ситләшкән, тип әйтмәҫ инем. Һәр ваҡытта ла яңы һөнәр үҙләштерергә әҙер торған, ҡул хеҙмәтен өҫтөн ҡуйған һәм тормошонон айырылғыһыҙ өлөшө итеп күргән кешеләр булған һәм бар. Үҙҙәренә өҫтәмә шөғөл табырға ынтылмаған, ниндәйҙер кәсеп менән булырға теләмәгәндәр ҙә һәр заманда ла булған. Бөтә кеше бер йүнәлештә генә йәшәй алмай, һәм был дөрөҫтөр ҙә.

Мәҫәлән, минең атайҙың йәштәштәре араһында эскелекте өҫтөн күреп, үҙе лә хеҙмәтте үҙ итмәгән, балаларына ла матур өлгө күрһәтә алмаған ағайҙар бихисап. Шул уҡ ваҡытта минең йәштәштәремдең күбеһе дәүләт эшендә лә эшләйҙәр, төрлө шөғөл менән дә булырға ваҡыт табалар. Шәхсән мине күн эше ҡыҙыҡһындыра. Интернет селтәрендә ошо өлкәлә уңышлы эшләгән кешеләрҙе күҙәтеп барам, форсат сыҡҡанда уларға барып өйрәнергә лә уй бар.

Дуҫтарым араһында ағастан юнып, төрлө һындар, сувенирҙар эшләүселәр бар. Кәләшем шәл оҫталары менән дан тотҡан Ейәнсура ҡыҙы. Ғаилә дуҫтарыбыҙҙың кәләштәре лә шәл бәйләргә өйрәнеү теләге белдерҙе, хәҙер аҙна һайын йыйылып, ошо боронғо шөғөлдең серҙәренә төшөнәләр. Күрше егет, уға 25 йәш, вахта эсулы менән Себер тарафтарында эшләй һәм өҫтәмә шөғөлө итеп бал ҡорттары тота. Уның был шөғөлөн бар күңелен һалып башҡарыуына шаһитмын, тимәк, ошондай йүнселдәр булғанда башҡорт балына бөтөү ҡурҡынысы янамай. Йәштәр араһында бындай миҫалдар күп.

Халҡыбыҙҙың быуаттар буйына формалашҡан, быуындан-быуынға күсеп килгән кәсеп-шөғөлдәре бихисап. Эйе, йәштәрҙең һәр береһе улар менән булышмай, ләкин был әлеге кәсептәр онотолған, тигән һүҙ түгел. Әгәр ҙә ниндәйҙер сәбәптәр арҡаһында боронғо кәсептәр менән шөғөлләнеүгә мохтажлыҡ тыуһа, оҫталар етерлек буласаҡ. Бөгөнгө көндә ата-бабаларҙың шөғөлө, кәсебе онотола төшкән икән, был уларҙы һанламауҙы аңлатмай, ә әлеге көндә икенсе ҡиммәттәрҙең өҫтөнөрәк булыуына, башҡа шөғөлдәрҙең кәрәклерәк икәненә генә ишаралай.

**Гөлназ САФУАНОВА**
**яҙып алды.**

## ӨС ДӘЛИЛ: АБВ

# ИЛҺӨЙӘРЛЕК ЙЫЛҒА БУЛҺА...

## туған телең - йылға һыуы



**Һуңғы ваҡытта мәктәптәрҙә балаларға илһөйәрлек (патриотик) тәрбиәһе биреү тураһында күп һөйләнелә. Беҙ илһөйәрлек тәрбиәләүҙең дөйөм тәрбиәнең айырылғыһыҙ бер өлөшө икәнен күптән беләбеҙ, быға мең ҡат инанғанбыҙ. Шуға күрә мәсьәләгә өс күҙлектән сығып ҡарарға йөрьәт иттем:**

**А**Әгәр ҙә мәктәптә балаға илһөйәрлек тойғоһо һалынмай икән, бында, ғөмүмән, тәрбиәнең булмауы хаҡында әйтергә кәрәктер. Берҙәм дәүләт имтиханы системаһы иһә, ғөмүмән, тәрбиәне онотторҙо. Мәктәптәрҙә ата-әсәләр, балалар, уҡытыусылар коллективы - барыһы бергә БДИ һөҙөмтәһе өсөн көнө-төнө мәж килә, үлә яҙып тырыша. Был айырым һөйләшеүҙе талап иткән мөһим мәсьәлә.

Илһөйәрлек тойғоһо иң беренсе нәүбәттә тыуған иленде, ватаныңды яратыуҙан, ә инде тыуған илеңде яратыу халҡыңды, туған телеңде яратыуҙан, халҡыңдың йола-традицияларын ихтирам итеүҙән башлана. Тыуған илеңде яратыу, илһөйәрлек тойғоһон әгәр ҙә йылға ағышы тип ҡабул итһәк, халҡыңды, туған телеңде яратыу шул йылғаның һыуы кеүек. Һыуһыҙ йылға булмағандай, туған телһеҙ, халыҡһыҙ ил дә, уға ҡарата һөйөү хисе лә юҡ. Юҡҡа ғына халҡыбыҙ шағиры Рәми Ғарипов шулай тимәгән:

Халҡым теле минә - хаҡлыҡ теле,
Унан башҡа минең илем юҡ;
Илен һөймәҫ кенә телен һөймәҫ,
Иле юҡтың ғына теле юҡ!

Шуға күрә лә, әгәр ҙә мәктәптәрҙә илһөйәрлек тойғоһо (патриотлыҡ) тәрбиәләгәндә баланың туған теленә, халҡына, йола-традицияларына һөйөү тәрбиәләү беренсе планға ҡуйылмаһа, был тәрбиә эсулы һыуы ҡороған йылға үҙәне буйлап тишек кәмәгә ултырып йөҙөп барыуға тиң ғәмәл һаналыр ине. Был дежур һүҙҙәр түгел.

**Б**Сит ил киноларын ҡарағанда уларҙың тәртип һаҡсыларын күреп һоҡланаһың, улар менән дуҫлашҡы килә. Беҙҙә иһә үткән быуаттың 90-сы йылдарынан башлап фильмдарҙа шәхси мәнфәғәте менән генә йәшәгән "погонлы әүермәндәр" - һатлыҡйән менттар, башҡа кешеләр иҫәбенә сереп байыған йылғырҙар өҫтөнлөк итә. Әлбиттә, тәртип һаҡсыларының барыһы ла шулай һатлыҡйән тип әйтергә лә йыйынмайым. Шуға күрә бөгөн килеп яңы тормош юлына аяҡ баҫҡан үсмер сит илдә белем алыуҙы, сит илдә йәшәүҙе маҡсат итеп ҡуя икән, бында уйланырға урын бар. Улар үҙ илдәрендә тәртип һаҡлаусыларҙан яҡлау табыуына өмөт итә алмай, шуға күрә нәфис фильмдар аша үҙҙәре күреп һоҡланған океан арьяғы копҭарынан ярҙам эҙләргә мәжбүр.

Ыңғай герой, позитив персонаж, өлгө алырлыҡ шәхес проблемаһы беҙҙең илдә һәр заманда ла актуаль булып ҡала килә, бөгөн бигерәк тә. Баланың сабый сағында күңеленә ниндәй орлоҡтар һалаһың, үҫеп еткәс, шулар шытым бирә. Илһөйәр, патриот кеше шул орлоҡтар йөҙөндә ниндәй образдар рәүешендә күҙаллана, быны шунһы мөһим.

**В**Кешене тыуған илен көслөк менән яраттырып булмайҙыр. Сөнки "Көслөк менән ил булмай" тиелә халыҡ мәҡәлендә. Был тойғоно балала тәрбиәләп кенә булалыр. Балаға "Һин тыуған илеңде яратырға тейешһең, яратмаҫҡа тейеш түгелһең" тип әйтеү, өйрәтеү күп осраҡта кире һөҙөмтә лә бирә: сөнки ул һәр ваҡыт өлкәндәр әйткәндең киреһен эшләй. Бала тәбиғәте үҙе шундай.

Хатта баланы үҙ-үҙен яратырға, ихтирам итергә өйрәтеү ҙә илһөйәрлек тойғоһо тәрбиәләүгә булышлыҡ итеүе бәхәсһеҙ. Сөнки үҙ-үҙен яратмаған кешене башҡалар ҙа, ул үҙе лә башҡаларҙы, шул иҫәптән халҡын, туған телен, тыуған илен яратыуы икеле.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостанда "Мир" системаһы картаһы менән түләнгән юлламалар өсөн туристик кешбэк программаһының көҙгө этабы тамамлана. Ғаризалар 10 сентябргә тиклем мирпутешествий.рф сайтында ҡабул ителде. Кешбэк программаһында республиканың 12 туроператоры һәм шифаханаһы, шулай уҡ 31 отеле ҡатнаша. Уның шарттарына ярашлы, турҙың хаҡынан 20 процентҡа тиклемен кире ҡайтарырға мөмкин, әммә сумма 20 мең һумдан ашмаҫҡа тейеш. Хәбәр ителеүенсә, сәйәхәткә - 1 октябрҙән 25 декабргәсә сығырға мөмкин.

✓Башҡортостандың Торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министрлығы хеҙмәткәре Кристина Дикова капиталь ремонт өсөн иғәнәләр буйынса льготалар хаҡында аңлатты. Әгәр фатир хужаһы 80 йәштән өлкән йәки уның йорто авария хәлендә тип танылһа, хеҙмәттәр өсөн түләргә кәрәкмәй. 70 йәште уҙғандар, шулай уҡ I-II төркөм инвалидтары өсөн льготалар күләме 50 процент тәшкил итә. Күп фатирлы йорттарҙа капиталь ремонт үткәреү сираты бинаны сафҡа индереү йылына, һуңғы тапҡыр "яңыртыу эштәре" датаһына һәм техник торошон баһалауға бәйле, тине Кристина Дикова.

✓Башҡортостанда "Йәштәр йыйыны"нда ҡатнашыусыларҙы теркәү бара, тип һөйләне Республикаға идара итеү үҙәге хеҙмәткәре Радик Гәрәев. Белгестең Башҡортостан Республикаһының Йәштәр сәйәсәте буйынса дәүләт комитеты мәғлүмәтенә һылтанып билдәләүенсә, өсөнсө форум Өфөлә 12-14 сентябрҙә үткәрелә. Сараға Волга буйы федераль округы төбәктәренән 18-35 йәшлектәр саҡырыла. Йыйында Башҡортостанда тәүге тапҡыр йәштәр эштәре буйынса федераль агентлыҡ проекттарының бөтә Рәсәй конкурсы ойоштороласы.

✓Сибайҙа Мәжит Ғафури исемендәге паркты ("Терра Урал арьяғы" эко-паркы) комплекслы төҙөкләндереү эштәре тамамлана. Унда йәйәүлеләр өсөн юлдар төҙөкләндерелгән, эттәрҙе йөрөтөү өсөн майҙансыҡ эшләнгән, тышҡы яҡтыртыу, видеокүҙәтеү ойошторолған, бәләкәй архитектура формалары ҡуйылған. Таш композицияларҙан үҙәк аллея булдырылған, архитектура яҡтыртҡыстары ҡулланылған, парк экологик материалдарҙан эшләнгән эскәмйәләр, диван-бәүелсәктәр менән йыһазландырылған.

✓ **"Евразия күсмә цивилизациялар музейын төҙөү ғәйәт ҙур эште күҙ уңында тота. Йәйләп ошо проектты тормошҡа ашырасаҡбыҙ. Тарих үҙе беҙгә ошо урынды күрһәтте", - тине республика етәксеһе.**



ҠЫҪҠАСА

# УҢЫШҠА БАЙ ЙЫЛ

**Башҡортостанда иген культураларын йыйыу һәм мал аҙығы әҙерләү тамамлана.** Республика Хөкүмәтенең оператив кәңәшмәһендә вице-премьер - ауыл хужалығы министры Илшат Фәзрахманов хәбәр итеүенсә, иген культуралары майҙандарының 82 проценты сабылған, тулайым йыйым 4,078 миллион тонна тәшкил иткән. Ужымды йыйыу 268 мең гектарҙа тамамланған, йәғни был сәсеүлектәрҙең 99 проценты. 850 мең тонна ашлыҡ һуғылған, ужым культураларының уңышы гектарынан 32,3 центнер тәшкил иткән. 3,24 миллион тонна яҙғы культуралар һуғылған, гектарынан уңыш - 28,4 центнер. Шулай уҡ май бирә торған культураларҙың, башлыса көнбағыштың 10 проценты йәки 54 мең тоннаһы һуғылған, борсаҡ йыйыу тамамланған, арпа, һоло һәм ҡарабойҙай йыйыу дауам итә. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров һүҙҙәренсә, республика аграрийҙары 4 миллион тонна менән генә туҡталып ҡалырға тейеш түгел, кәмендә 5 миллион, ә иң яҡшыһы 6 миллион тонна йыйырға кәрәк, бындай һөҙөмтәләргә өлгәшергә мөмкин. Әйткәндәй, 1986 йылда Башҡортостанда 5,94 миллион тонна иген йыйып алынған.

✓ **Өфөлә Украина биләмәһендәге махсус хәрби операция ваҡытында һәләк булған хәрбиҙәрҙең туғандарына Рәсәй Федерацияһының дәүләт наградаларын тапшырыу тантанаһы уҙҙы.** Ил Президенты указы менән хәрби бурысын үтәгәндә күрһәткән батырлығы өсөн өлкән лейтенант Игорь Насибуллинға үлгәндән һуң Рәсәй Федерацияһы Геройы исеме бирелде. И. Насибуллин 1995 йылдың 14 июлендә Курск өлкәһе Дмитриев ҡалаһында хәрби ғаиләһендә тыуған. 2002 йылда (атаһы запасҡа сыҡҡандан һуң) ғаилә Башҡортостанға, тыуған төйәгенә - Яңауыл районы Иҫке Вәрәш ауылына йәшәргә ҡайтҡан. Офицерҙың ата-әсәһенә Рәсәй Геройы йондоҙон Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев тапшырҙы. Шулай уҡ Рәсәй Федерацияһы Президенты Указы менән хәрби бурысын үтәгәндә күрһәткән ҡаһарманлығы өсөн Белорет егете, өлкән лейтенант Вадим Гавриков, Дүртөйлө ҡалаһынан өлкән сержант Марат Мостафин, Өфөнән ефрейтор Данил Фәттәхов, Учалы районы Миндәк ҡасабаһынан старшина Тимур Хәйруллин үлгәндән һуң Батырлыҡ ордены менән бүләкләнде. Наградалар геройҙарҙың туғандарына һәм яҡындарына тапшырылды.

✓ **Башҡортостанда 1 сентябрҙән "Трактор" операцияһы бара. Үҙйөрөшлө машиналарҙы һәм уларҙы тағылмаларын файҙаланыуға ҡағыҙа бөҙөуҙарҙы иҫкәртеү айлығы 30 сентябргә тиклем дауам итә.** Тикшереү барышында машиналарҙың төҙөк хәлдә булыуына, номер билдәләренең теркәлгән мәғлүмәткә тап килеүенә, шулай уҡ водителдәргә махсус техника йөрөтөүгә рөхсәт биреү тәртибенә төп иғтибар бүленә. Үҙйөрөшлө машиналарҙы ғына түгел, уларҙың тағылмаларын хәүефһеҙ файҙаланыуға ла етди иғтибар бирелә. "Трактор" операцияһын Башҡортостан буйынса Эске эштәр министрлығының юл хәрәкәте хәүефһеҙлеге дәүләт инспекцияһы идаралығы үткәрә.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ТУРАХАН КӘШӘНӘҺЕНДӘ



**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә Евразия күсмә цивилизациялар музейын булдырыу буйынса эшсе төркөмдөң күсмә кәңәшмәһенә йомғаҡ яһаны. Сара 30 августа Шишмә районында Турахан кәшәнәһе алдында уҙҙы.**

Республика етәксеһе ошондай боронғо кәшәнәләрҙең бик аҙ булыуына иғтибар итте. "Был бик матур, - тине Радий Хәбиров, Евразия күсмә цивилизациялар музейы өсөн урында төшөрөлгән видеоматериалдарҙы күрһәтеп. - Бына, күрәһегеҙме, һул яҡта ҡаҙыу эштәре бара. Беҙ был эште яңыраҡ ҡына башланыҡ һәм шунда уҡ 15-се быуат ҡәберлектәрен таптыҡ. Яҡшы һаҡланған һөлдәләр буйынса шул замандарҙа йәшәгән кешеләрҙең образдарын, уларҙың типтарын тергеҙергә һөйләштек. Был бик ҡыҙыҡлы, иң мөһиме - ғалимдарға Турахан кәшәнәһенең серҙәрен аңларға мөмкинлек бирә".

Евразия күсмә цивилизациялар музейын төҙөү ғәйәт ҙур эште күҙ уңында тота, тип билдәләне Башҡортостан Башлығы. Унда ғилми үҙәк, мәҙәни-тарихи үҙәк, үҙенең ипподромы менән күңел асыу үҙәге, һөнәрселәр ауылы, шулай уҡ туристик үҙәк ойошторола. "Йәйләп ошо проектты тормошҡа ашырасаҡбыҙ. Тарих үҙе беҙгә ошо урынды күрһәтте", - тине республика етәксеһе.

# БЫЛ ТАУАРҘАР ҘА КӘРӘКЛЕ

**Өфөлә "Фабрик косметик" предприятиеһында көнкүреш химияһы производствоһы сафҡа индерелде. Уны асыу тантанаһында Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров та ҡатнашты.**

"Фабрик Косметик" компанияһы 2015 йылдың августынан алып эшләй. 2019 йылда предприятие сәс өсөн шыйыҡ шампундәр һәм бальзамдар, йыуыныу өсөн гель, шыйыҡ һабын һәм башҡа продукция етештерә башлаған. Компанияның продукцияһы Рәсәйҙең 91 ҡалаһында һәм донъяның өс илендә һатыла. "Яңы производствоның асылыуы - һәр ваҡыт ҡыуаныслы ваҡиға, сөнки был - яңы эш урындары, бюджетҡа һалымдар. Әлеге эш бәләкәй генә предприятиенан башланған, хәҙер иһә был республикала косметика сығарған ҙур компания. Компания продукцияны етештергәндә илебеҙ сеймалын, Стәрлетамаҡ содаһын һәм Илек тоҙон файҙалана", - тине Радий Хәбиров.

Республика етәксеһе предприятиеның етештереү цехтарын ҡараны, продукция менән танышты. 2020 йылда коронавирус пандемияһы осоронда компания етештереү ҡеүәттәренен күпселек өлөшөн бактерияға ҡаршы һәм антисептик продукция сығарыуға йүнәлткән. Шул рәүешле республиканың үҙендә дезинфекция продукцияһын етештереү күләмен арттырырға ярҙам иткән. Ошо маҡсатҡа Башҡортостандың Сәнәғәтте үҫтереү фондынан 20 миллион һум займ алынған. "Фабрик косметик" директоры Юлия Волошановская һүҙҙәренсә, 2022 йылдың икенсе кварталы аҙағында компанияла 57 профессиональ һәм юғары квалификациялы хеҙмәткәр иҫәпләнгән. Быйыл компанияның табышы - 116 миллион, ә саф табыш 22 миллион һум тәшкил иткән.

# РУХИ ОСТАЗДАР

**Шайморатов һәм Доставалов исемендәге башҡорт батальондарының рухи остаздары барлыҡҡа килде. Протоиерей Виктор Иванов һәм имам Хәмзә хәҙрәт махсус операцияға юлланыусы яҡташтарыбыҙға ҡушылды. Дин әһелдәре өйҙәренә батальондар менән бергә генә ҡайта. Ике конфессия вәкиле лә ҡулдарына ҡорал тотмай, был ҡанун менән тыйыла.**

Протоиерей Виктор десантсы булған. Өфөлә уны ҡул һуғышы буйынса тренер тип беләләр. "Башинформ" журналисы менән әңгәмәләшкәндә ул махсус хәрби операцияға барырға тәҡдим иткәс, уйлап та тормайынса ризалашыуы хаҡында һөйләне. Сөнки, уның фекеренсә, Ватанды һаҡлау - һәр ир-егеттең бурысы. Билдәле бер бурысты үтәргә саҡыралар икән, тимәк, уның ваҡыты еткән. "Миссия рухи яҡтан көс биреүгә ҡайтып ҡала. Ниндәй генә осраҡ булмаһын, кешегә доға, Хоҙай кәрәк, ә һуғышта бигерәк тә. Шуға күрә руханиҙар һәр ваҡыт үҙҙәренең һалдаттары янында булған. "Ни өсөн спорт менән шөғөлләнәһегеҙ, йүгерәһегеҙ?" тип йыш һорайҙар. Бына хәҙер барыһына ла асыҡлыҡ индерелде. Ир-ат теләһә ҡайһы ваҡытта Тыуған ил ҡуйған бурысты үтәргә әҙер булырға тейеш", - ти Виктор Иванов.

Имам Хәмзә хәҙрәттең дә башҡорт батальондарының рухи остазына әүерелеүе осраҡлы түгел. 2017 йылда ул гуманитар миссия менән Донбасста, шул иҫәптән Луганск Халыҡ Республикаһында, генерал Шайморатов һәләк булған урында булған. Украинаның тыныс халыҡ менән һуғышыуын үҙ күҙҙәре менән күргән. Шуға күрә шунда уҡ батальондарға ҡушылырға ризалығын белдергән. "Дин әһелдәре элек тә хәрби хеҙмәттә ҡатнашҡан. Тарихи факт: Миңлегәли Шайморатов дивизияһында ла полк муллаһы булған. Хәҙер ошо тәжрибәне ҡуллана башлайбыҙ. Яугирҙар беҙҙең улар менән бергә барыуыбыҙҙы белгәс, ныҡ шатланды. Сөнки һуғыш яланында улар һәр минут, секунд һайын үлем менән осраша", - ти Хәмзә хәҙрәт.

# ӨМӘЛӘ ҠАТНАШЫРҒА!

**Башҡортостан "Йәшел Рәсәй" өмәһендә ҡатнашырға әүҙем әҙерләнә. Акция әле башланып, 1 октябргә тиклем ойоштороласаҡ, тип хәбәр иттеләр республика Торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министрлығының матбуғат хеҙмәтенән.**

Бөтә Рәсәй өмәһе ике этапта уҙғарыла. Беренсе этапта, 3 сентябрҙән 17-нә ҡәҙәр, ҡала-ауылдар сүп-сарҙан таҙартыла. Һәр шәмбе, йәки 3, 10 һәм 17 сентябрҙә, муниципалитеттарҙа, беркетелгән биләмәләрҙә өмәләр үткәрелә, юлдар, парктар, скверҙар һәм ихаталар тәртипкә килтерелә. 24 сентябрҙән 8 октябргәсә "Йәшел Башҡортостан" акцияһы ойоштороласаҡ. 24 сентябрь - Ерҙәм көн. Акция 8 октябргә тиклем дауам итә. Яҡынса мәғлүмәттәр буйынса, көҙгө эко-акцияла 8,5 меңдән ашыу махсуслаштырылған ойошманың һәм 2,5 меңдән күберәк берәмек техниканың ҡатнашыуы, 47 меңдән ашыу ағас һәм ҡыуаҡ, шул иҫәптән 14 мең бейек ағас ултыртыу планлаштырыла. Торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министрлығында билдәләүҙәренсә, "Йәшел Башҡортостан - Өфө" сайтында баш ҡала халҡы йәшелләндереү эштәренә ҡушылырға мөмкин. Атап әйткәндә, ағас ултыртыу урындары тураһында тәҡдимдәр индерергә була. Бынан алда ултыртылған ағастар тураһында мәғлүмәт интерактив картала бар. Бындай сайттар бөтә муниципалитеттарҙа ла булырға тейеш.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓VIII Өфө халыҡ-ара марафонында "Өфө хосписы", "Мәрхәмәт", "Каршылыҡтарҙы емереп", "Юғалтыуҙар.Юк" һәм "Үҙенсәлекле балалар" хәйриә фондтарына ярҙам өсөн 852 мең һумдан ашыу аҡса йыйылған. Аҡса йыйыу "Йүгерәм, ярҙам итәм" акцияһы барышында "Эшлә!" фандрайзинг платформаһында ойошторолған. Бынан алда "Башинформ" 2022 йылда сараның бөтә рекордтарҙы уҙып китеп, 23 илдән, 35 төбәктән, 245 ҡаланан 5500 ҡатнашыусыны берләштереүе тураһында хәбәр иткәйне.

✓10 сентябрҙә Өфөнөң "Аҡбуҙат" ипподромында "Терра Башҡортостан" республика ат спорты турнирының финалы ойоштороласаҡ. Бынан алдағы этаптарҙа еңеүсе булған башҡорт тоҡомло иң етеҙ 16 ат турнир тарихында иң ҙур бүләк - 10 миллион һум һәм Чемпионат кубогы өсөн ярыша. Сараның махсус ҡунағы - танылған цирк артистары династияһы вәкиле Эдгард Запашный. Турнир кискә сәғәт 5-тә башлана. "Терра Башҡортостан" республика ат спорты турниры 2019 йылдан уҙғарыла.

✓Өфө мэры Ратмир Мәүлиев Республика көнөнә ҡарата ҡала өмәләре ойоштороулоуы тураһында хәбәр итте. "Баш ҡаланың бөтә райондарында ла Хөкүмәт саралары үткәрелә. Шәхси контролгә алыуыбыҙҙы, ҡаланы лайыҡлы күрһәтеү өсөн саралар ойоштороуыбыҙҙы һорайым", - тип мөрәжәғәт итте ул ҡала хакимиәте башлығының беренсе урынбаҫары Сергей Кожевниковҡа. Ул шулай уҡ барлыҡ теләге булғандарҙы, ҡала учреждениелары һәм предприятиелары етәкселәрен дә экологик сараларҙа әүҙемерәк ҡатнашырға саҡырҙы.

✓Хәҙер Башҡортостандың баш ҡалаһынан Аҡтауға ла самолеттар оса башлай. Аҡтау - Каспий диңгеҙ буйындағы ҙур сәнәғәт ҡалаһы. Уның махсус статусы ла бар. Бында Ҡаҙағстандағы берҙән-бер диңгеҙ порты урынлашҡан, ял итеү һәм күңел асыу индустрияһы, шулай уҡ курорт инфраструктураһы әүҙем үҫешә. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, август башында "Өфө" аэропортынан Ҡаҙағстандың төп иҡтисади үҙәктәренә - Нур-Султан һәм Алматы ҡалаларына бер юлы ике осош программаһы старт алды.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# РЕСПУБЛИКАНЫ...

## турист булып байҡайыҡ

**Киләһе йылда Өфөлә тағы ла 10 туристик мәғлүмәт үҙәге асыу, уларҙың бер өлөшөнөң мобиль булыуы күҙаллана. Башҡортостан Башлығының туриндустрия вәкилдәре менән осрашыуында Өфө мэры Ратмир Мәүлиев ошо хаҡта һөйләне.**

Уның һүҙҙәренсә, бының өсөн Ростуризмдан федераль аҡса бүленә. "Беҙ шулай уҡ туристар өсөн мәғлүмәт таҡталарына, 70 төрлө йәрминкә ҡорамалдарына 20 миллион һум алырға тейешбеҙ. Был беҙгә теләһә ниндәй ерҙә кәсепселәр йәрминкәһен ойошторорға мөмкинлек бирә. Шулай уҡ этноауыл өсөн 8 тирмә һатып алабыҙ", - тине Ратмир Мәүлиев. Республиканың туризмды үстереү үҙәге директоры урынбаҫары Артур Иҙелбаев билдәләүенсә, Өфөлә экскурсия автобусы бик популяр, баш ҡаланың тарихи урындары буйлап йәйәү йөрөү ойошторолған.

Хәҙер республика туриндустрияһының туристарҙы йәлеп итеү өсөн мөмкинлектәре күп, бының өсөн улар яңы продукттар тәҡдим итә белергә тейеш,




тип билдәләне Радий Хәбиров. Туркомпанияларҙың вәкилдәре "Башҡортостанда оҙон ғүмер" программаһын айырым билдәләне һәм республика етәксеһенә тармаҡҡа ярҙам иткәне өсөн рәхмәт белдерҙе. "Оло быуын вәкилдәре Башҡортостаныбыҙ менән таныша, күптәре хатта тәүге тапҡыр Өфөгә йәки Торатауға барып ҡайтты. Улар бик ҡәнәғәт", - тине туркомпаниялар етәкселәре.

Киләһе йылда "Башҡортостанда оҙон ғүмер" программаһы буйынса аҡса күләмен арттырыу планлаштырыла, был иһә өлкән йәштәге 20 мең ятташыбыҙға республиканың гүзәллеген һәм күркәм урындарын күреп ҡайтырға мөмкинлек бирергә тейеш, тине Радий Хәбиров. Быйыл ошо программа буйынса квота 10 мең кеше тәшкил итә. Ваҡиғалар туризмына күберәк иғтибар бүлергә һәм Стәрлетамаҡта "Саҙағәр 2.0", "Бөрө алмаһы" кеүек ҡунаҡсыллыҡ фестивалдәрен, Бүздәк районында "Бәлешфест" милли аш-һыу фестивален уҙғарырға кәрәк, тип иҫәпләй республика етәксеһе. Радий Хәбиров "Торатау" геопаркын этаплап үҫтереү хаҡында ла һөйләне, быйыл шиханға менеү өсөн эко-баҫҡыс төҙөлөп бөттө, тау итәгендә таш музейын ойоштороу күҙаллана. Өфө тирәләй йылға круиздарын үҫтереү ҙә мөһим маҡсаттарҙың береһе булып тора.

БАШ ҠАЛАМ

# ТҮҘЕМЛЕГӘ ТҮШ ТЕЙЕР



**Гәзиттә Өфө тураһындағы фекерҙәрҙе ҡыҙыҡһынып уҡып барам. Үҙем дә баш ҡалаға ҡағылышлы ҡайһы бер фекерҙәрем менән бүлешеп китергә булдым.**

Беренсе һүҙем юлдар төҙөлөшө тураһында. Өфөнөң әле был, әле теге урамдарын төҙөкләндереү эше барғанлығы тураһында бөтә республика хәбәрҙар. Яңыраҡ Ағиҙел аша яңы күпер төҙөп ҡуйҙылар. Шәп тә инде, йәмәғәт! Ә төҙөлөш башланғанда күпме әр һүҙе ишетте республика һәм ҡала етәкселеге. Яҡшыны күрер өсөн бер аҙ мәшәҡәтенә лә түҙеп торорға кәрәклеген онота шул йыш ҡына халыҡ. Ә хәҙер, ана, рәхәтләнеп яңы күпер аша әллә күпме машина елдерә. Бер таныш водителдең "Былдай төҙөлөштәр, төҙөкләндереүҙәр өсөн аҡса бүленә, уны ваҡытында үҙләштереп ҡалыуҙары кәрәк, сөнки тағы ла ошондай эшкә аҡса кәрәккәндә, бөтөнләй бирмәүҙәре лә бар", тиеүе менән тулыһынса килешәм. Тағы ла шуныһы ла бар, һәр нәмә иҫкерә, туҙа, эшлектән сыға. Йылға аша һалынған иҫке күпер ҙә күптән үҙенең "йәшәрен йәшәгән" бит инде.

Бөгөн иһә Пугачев урамында эштәр гөрләй. Шулай уҡ был эштең кәрәклеген аңлаусылар ҙа күп, "тығын", "урау юл" һәм башҡа сәбәп табып мыжыусылар ҙа етерлек. Үҙегеҙ уйлап ҡарағыҙ, күпмелер ваҡыттан һуң Пугачев урамы әллә нисә полосалы итеп киңәйтелеп, яңынан хәрәкәтте йәнләндерәсәк. Ул тарафта бихисап кеше йәшәгәнлеген күҙ уңында тотоп һәм әле булһа унда яңынан-яңы йорттар ҡалҡыуын, тотош ауылдар барлыҡҡа килеүен иҫәпкә алғанда, юлды киңәйтеү бик кәрәкле эш. Әлбиттә, тығындары ла булыр, мәшәҡәтерәк тә кеүек тойолор, ләкин яңы киң юлдан йөрөй башлағас, барлыҡ был михнәттәр онотолор. Ләкин бына төҙөлөш барған ерҙә күп кенә эшҡыуарҙар үҙ эшмәкәрлеген алып бара ине, хатта шәхси балалар баҡсаһы ла эшләй ине, буғай. Хәҙер ул эшҡыуарҙар ниндәй хәлдә ҡалды икән, белергә ине...

Әле бына баҡса биләмәләренә илткән юлдар төҙөкләндереләсәге тураһында хәбәр булды. Эшләйем, тигәндә, эшләп ҡалһындар ул, бер ҡалһа, башҡаса ҡулдары етмәҫкә лә мөмкин, шуға баҡсасыларҙы түҙемле булырға саҡырам. Түҙемлегә түш тейер

Шул уҡ йөй башҡарылған йылытыу, һыу һәм канализация системаларын йүнәтеү хаҡында ла ҡайһы берәүҙәрҙә кире фекерҙәр ишетелә. Эйе, эҫе һыуһыҙ ултырыу бәлә, әлбиттә, ләкин быларҙың барыһы ла ҡышҡы миҙгелде аварияһыҙ сығыу өсөн эшләнгәнлеген уйлап еткермәйҙәр улар. Әгәр ҙә йөй тикшерелмәгән, кәрәк ерендә алмаштырылып-төҙәтелмәгән системалар ҡышҡы зәһәр һыуыҡта эштән сыҡһа, ниндәй бәлә киләсәген күҙ алдына баҫтырһындар ине улар.

**Айбулат ШӘРИФУЛЛИН.**

ҠЫҪҠАСА

# ҮҪТЕРГӘНҺЕҢ ИКӘН...

**Баш ҡалала баҡсасылар өсөн ойошторолған 35 майҙансыҡта 576 сауҙа урыны бар, тип хәбәр иттеләр мэрияһан.** Баҡсасыларға уҙ участкаларында үҫтерелгән йәшелсә, емеш-еләкте һатыу өсөн урындар бушлай бирелә. "Башинформ" Башҡортостандың сауҙа министры Алексей Гусевҡа һылтанма менән хәбәр итеүенсә, республикала урам сауҙаһы өсөн 3,7 мең урын булдырылған. Ябыҡ кәштәләр баҡсасыларға бушлай бирелә. Ошондай сауҙа майҙансыҡтарының күбеһе баш ҡалала, шулай уҡ Стәрлетамаҡта һәм Бөрө районында. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, республика етәксеһе Радий Хәбиров баҡсасыларҙың беренсе форумында шәхси хужалыҡта үҫтерелгән йәшелсә, емеш-еләк һатыу өсөн уңайлы урындар булдырырға ҡушҡайны.

✔ **Баш ҡаланың 450 йыллығына Октябрь революцияһы урамын яңыртып эшләйәсәк подряд ойошмаһын асыҡлау өсөн конкурс процедураһы бара.** Эштәрҙең беренсе этабында Ленин урамынан Салауат Юлаев проспектына тиклем участканы яңыртыу, әҙерлек эштәре барышында ағастарҙы ҡырҡып, электр селтәрҙәрен алмаштырыу ҡаралған. Ағастар тикшереү үткән һәм, һөҙөмтәлә, олондарының сереүе асыҡланған. Яңы ағастар ултыртыу һәм йәшелләндереү юл эштәре тамамланғандан һуң, экологик акция сиктәрендә башҡарыласаҡ. 2023 йылдың яҙында газ торбаларын, электр сымдарын, йылылыҡ, һыу һәм канализация селтәрен һ.б. үҙгәртеп һалыу планлаштырыла. "Урамды капиталь реконструкциялау барлыҡ мәҙәни мираҫ объекттарын һаҡлауҙы, ике һыҙатлы хәрәкәтле юлды, йәйәүлеләр зонаһын киңәйтеүҙе, велосипедсылар юлдарын булдырыуҙы күҙаллай", - тиҙәр мэрияла.

✔ **Башҡортостанда уҡытыусылар мәктәптең стоматология кабинеттарында тештәрен бушлай дауалай ала.** Хөкүмәттең Республикаға идара итеү үҙәгендәге оператив кәңәшмәһендә Радий Хәбиров шундай йөкләмә бирҙе. "Кабинеттарға заманса шәп ҡорамалдар һатып алдыҡ. Айырыуса ауылдарҙа, уҡытыусыларҙың шунда дауаланыу мөмкинлеге булһын өсөн дә эшләнде был", - тине республика етәксеһе. Хәбәр итеүенсә, яңы уҡыу йылында Башҡортостан мәктәптәрендә 11 стоматология кабинеты эшләй башланы. Программа "Юғары ос" проекты сиктәрендә бойомға ашырыла. 2019 йылдан республиканың дөйөм белем биреү ойошмаларында 80 теш табибы кабинеты булдырылған.

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Тәңкәле блефарит

❖ Күҙ ҡабағы ҡабарып, ҡысытып һәм керпектәр араһында ҡауаҡҡа оҡшаш нәмә барлыҡҡа килһә, был тәңкәле блефарит (чешуйчатый блефарит) сире, йәғни керпектәрҙә күҙгә күренмәгән талпандар бар. Унан арыныу өсөн иртәнле-кисле күҙҙәрҙе кейәү үләне (чабрец) төнәтмәһе менән сайырға кәрәк. Бының өсөн 1 ҡалаҡ киптерелгән үләнгә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 1 сәғәт төнәтеп һөҙөргә. Төнәтмә йылымыс булырға тейеш. Кискеһен кейәү үләне төнәтмәһе менән дауаланғандан һуң, күҙ ҡабағының ситенә мамыҡлы таяҡсалар ярҙамында дегәнәк майы һөртөргә. Тиҙерәк һауығыу өсөн шулай уҡ календула төнәтмәһенән сылатҡыстар яһарға була: 1 ҡалаҡ календула сәскәһенә 200 мл ҡайнар һыу ҡойорға, 30 минут төнәтеп һөҙөргә. Йылы төнәтмәгә мамыҡ дискыларҙы сылатып, ҡабаҡтарға һалырға һәм 3-5 минут торорға. Тәңкәле блефариттан тулыһынса ҡотолоу өсөн иммунитетты нығытыу ҙа зарур һәм был осраҡта 1 ҡалаҡ киптерелгән гөлйемеште термосҡа һалып, 2 стакан ҡайнар һыу ҡойорға һәм 4 минут үткәс, ҡапҡасын ябып, төнгәләккә ҡалдырырға. Иртәнсәк һөҙөргә. Төнәтмәгә йүкә балы ҡушып көн дауамында бер нисәне уртлап эсеп бөтөргә. Был төнәтмәләрҙең барыһын да бер осорҙа ҡулланып дауаланыу яҡшы һөҙөмтә бирә.

## Нефрит

❖ Календуланың сәскәһен һәм кесерткән япрағын бер тигеҙ өлөштә ҡушырға. Шуның 1 ҡалағына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 2 сәғәт төнәтергә. Төнәтмәне көнөнә 3-4 тапҡыр, ашағандан һуң 1 сәғәт үткәс, ярты стакан эсергә.

## Эс ҡатыу

❖ Энәләренән таҙартылған алоэ һабағын ҡырҡҡылап, шунын 100 грамына ошо уҡ миҡдарҙа бал ҡушырға. Ышылап болғатырға, һыуытҡыста һаҡларға. Дауаны иртәнге аштан 1 сәғәт алда 1 десерт ҡалағы ашарға. Был ғына эсте йомшартырға ярҙам итмәгән осраҡта, йоҡлар алдынан тағы ла 1 десерт ҡалағы ҡабул итергә.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

✓ *Хәлем бөттө, йығылам, тигәндә, әлдә ҡанымдағы быуаттар төпкөлөнән урғылған ата-бабаларҙың көслө яугир рухы ҡалҡып сыға ла, таштай ныға, тағы алға ынтылдым.*

ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!



# АҒАС ҺАУЫТ-ҺАБА

Элек Түбәнге Ташбүкән ауылында (Ғафури районы) бер төрлө ижауҙар күп сығарылған. Улар күрше ауылдар һәм Ырымбур менән Өфө губерналары өйәҙҙәре буйлап таралған. 1960-1970 йылдарҙа ойошторолған экспедициялар ваҡытында был ижауҙарҙы беҙ Ғафури районы Түбәнге Ташбүкән, Сәйетбаба, Имәндәш, Ҡолҡан ауылдарында, Белорет районы Өмөтбай, Архангел районы Абҙан һәм Иҫке Тимербай, Әлшәй районы Түбәтәй, Күгәрсен районы Үрге Санъяп ауылдарында, Ырымбур өлкәһе Новосергиевский районы Яңы Ғүмәр ауылында осраттыҡ. Бүләккә йәки экспонат сифатында улар Уралдан ситтә ятҡан төбәктәргә лә барып эләккән. Бындай ижауҙар Ырымбур, Ҡаҙан, Санкт-Петербург, Алмата, Тбилиси, Будапешт музейҙарында һаҡлана. Нәҡ ошондай ижау Л.Н. Толстойҙың Ясная Поляналағы усадьбаһына барып эләгә.

Тәбиғи ағас төҫө һаҡланған Ташбүкән ижауҙары төрлө семәрле деталдәр ярҙамында биҙәлгән нескә тотҡаһы арҡаһында зауыҡлы күренгән. Уларҙы биҙәгәндә ишмә, бәләкәй пирамида рәүешендәге һырҙар, оҙонса һәм түңәрәк һыр ҡулланылған. Ижау тотҡаһының осонда ике яҡлап урынлашҡан уйымдарға сылбырҙар "кейҙереп" ҡуйылған. 1906 йылда С.И. Руденко тарафынан һатып алынған ижауҙарҙың береһе 31 оҙонсараҡ дүңгәләкле сылбырҙан торған, уның осона һырлы шөңгөр эшләнгән. Ижау тотош үҙе генә түгел, уны биҙәгән дүңгәләктәр һәм сылбырҙар ҙа бөтөн ағас киҫәгенән яһалған. Ижау башы тыш яҡтан штамп ярҙамында биҙәлгән. Төртөктәр хасил иткән һыҙаттар киҫелешеп ҡыя шаҡмаҡтар, ҡуш өсмөйөштәр, мөйөштәргә әүерелгән. Тотҡа төбөндәге бер нөктәнән таралып киткән нурҙар рәүешендә эшләнгән биҙәк ҡояш ҡалҡыуын һынландырған.



*Ҡымыҙ ижауҙары: 1, 2, 5, 6 - урыны билдәһеҙ; 3, 4 - Ғафури районы Түбәнге Ташбүкән ауылы (1, 2, 6 - Ырымбур төбәк музейынан; 4, 5 - РЭМ фондынан; 3 - 1970 йылғы экспедициянан). Рәссамы В.М. Шутова*

Был ижауҙарға хас төп һыҙат - йомрайып осланған һәм суҡыш рәүешендәге элгесле тотҡа - Ташбүкән ижауҙарында ҡатмарлы орнаменталь композицияға ҡушылып киткән. Уларҙа төп иғтибарҙы тотҡаның үҙәген ике яҡтан терәтеп торған бик үҙенсәлекле семәрле таяуҙар йәлеп иткән. Был семәрҙәр күп кенә көнсығыш Европа халыҡтарына билдәле һәм башҡорт һарауыстарында табылған өс өлөшлө тылсымлы һыҙманы хәтерләткән, уларҙа "тормош ағасы" тирәләй алышҡан заттар һынландырылған.

**Светлана ШИТОВА.**
**"Башҡорттарҙа ағас семәрләү һәм биҙәк төшөрөү" китабынан.**

ХӘТЕРКИТАП

# ИҢ АУЫР САҠТАРҘА...

## башҡорт ҡаны ярҙам итте



**Бөрйән районының балалар йортонан Өфөгә алып килгәс, бик ауырыу балаларҙы дауаханаға һалдылар. Әкренләп һауыға барған балалар берәм-берәм балалар йортона ҡайта торҙо. Бына мин дә һауығып ҡайттым. Тик тәүҙә бер-ике көн изоляторҙа ятырға кәрәк ине.**

Тәрбиәсе апайҙар ҡайтып киткәс, балалар изоляторҙың ишеген асып, "яңы" баланы ҡарарға килделәр. Минең бик бәләкәй, бик тә ябыҡ булыуымды күргәс, улар иҙәнгә одеял йәйеп, мине төрөп, күтәреп уйнанылар. Уларға күңелле булды. Икенсе көн шәфҡәт туташы Рита апай мине етәкләп төркөмгә алып китте. Зал аша үткәндә, бүлмә мөйөшөндә, бер бөҙрә сәсле малай туп тәгәрәтеп үҙүҙе менән уйнап ултыра ине. Ул йылмайып: "Фәүзиәне беҙгә алып киләләр", - тине. Минең исемемде ҡайҙан белә икән, тип аптыраным тәүҙә, шунан кисә изоляторға килгән балалар әйткәндер, тигән һығымта яһаным. Төркөмгә инһәк, бына ҡыҙыҡ, бөтә балалар ҙа минең кеүек тап-таҡыр башлы, тик бер генә ҡара бөҙрә сәсле Васёк, тубын тотоп, беҙҙең арттан килеп керҙе (уның матур сәсен киҫергә бер кемдең дә ҡулы күтәрелмәгәндер, ахыры, тип уйланым мин). Уның ҡыҙмы был, малаймы икәнен күлдәгенә ҡарап ҡына белеп була ине.

Бына хәҙер мин дә детдом балаһы. Уның яҙылмаған ҡағиҙәләренә күнегә башланым. Ашарға ултырғас, һәр бала тиҙ генә иң ҙур икмәк киҫәген эләктереп алырға ашыға. Иң тулы стаканды, хатта ҡалаҡтарҙы ла талашып тигәндәй алалар. Коридорҙа ла һуғышалар, йоҡо бүлмәһендә лә һуғышалар. Илай-илай күнегәм. Ниңәлер урамға йөрөргә сыҡҡанда ғына һуғышмайҙар. Беҙҙе бер малай, бер ҡыҙ ҡулға-ҡул тотоштороп теҙәләр ҙә, йә "Салауат баҡсаһы"на, йә "Матросов баҡсаһы"на алып киләләр, йә былай ғына ҡала ҡарап йөрөйбөҙ. Иң алда Әнүзә менән Риф, аҙаҡ Ғилминур менән Павлик, аҙаҡ - Васёк менән мин. Беҙҙең арттан кем кем менән тотоношоп атлағандыр, онотҡанмын. Васёк минең ҡулымды ныҡ тота, үҙе: "Фәүзиә, мин әле генә бала ул, ә элек оло кеше инем", - ти. Ҡала буйлап йөрөгәндә Васёктың атҡа атланып, үткер ҡылыс тотоп, дошмандарға ҡаршы Чапаев отрядында көрәшкән саҡтарын тыңлап йөрөнөм. Уның батырлыҡтарына һоҡланып, уның серен бер кемгә лә һөйләмәҫкә ант иттем. Ул мине: "Һин ҡайғырма, Фәүзиә, мин бит тағы ла үҫермен, ҙур булырмын. Минең ап-аҡ атым да, үткер ҡылысым да булыр, илемде дошмандарҙан һаҡлармын", - тип йыуата ине.

Шулай ысын күңелдән Васёк менән һоҡланып, хатта йоҡларға ятҡанда ла уға киләсәктә дошмандарҙы еңергә ярҙам итер өсөн төрлө хәйләләр ҡороп, йоҡоға тала инем. Ҡайһы саҡ урамдан ҡайтҡанда ҡараңғы төшә башлап, урамдарҙа ҡала уттары янһа, мин күҙҙәремде сытырлатып йомам, үҙем, йығылам, тип бөтөнләй ҡурҡмайым, сөнки мине бит Васёк етәкләп бара. Ә ҡаланың уттары, оҙон нурҙарын һуҙып, бер рәткә теҙелешеп атлай. Иң алда Васёк ап-аҡ атында, аҙаҡ мин һәм ҡала уттары, уттар ҙа беҙҙең яугирҙар. Оҙон нурҙары - уларҙың ҡылыстары. "Бер, ике! Бер, ике! Алға! Еңеүгә!" - тип ҡабатлайым мин эстән генә. Ҡайһы ваҡыт беҙҙең һәр бер аҙымды ныҡ баҫып атлауыбыҙға бөтә балалар ҙа ҡушыла. Үтеп барыусы кешеләр йылмая: "Кескәй генә яугирҙар", - тип әйтеп үтә улар (беҙҙең өҫтөбөҙҙәге пальтолар ҙа шинель туҡымаһынан тегелгән ине бит).

Һиҙелмәй генә ике-өс йыл үтеп тә китте. Беҙҙе мәктәпкә оҙатыр алдынан теҙҙеләр, һайланылар, һананылар, бүлделәр. Бәхетлеләрҙе, һуғыштан еңеп ҡайтҡан атайҙары эҙләп килеп табып, юғарыға сөйөп күтәреп алып ҡайтып киттеләр. Мәрйәм - Мария, Барый - Борис, Шәүрә Шура булып сыҡты. Береһе - белорус, береһе - рус, береһе украин балаһы икән, тик әле улар башҡортса һөйләшәләр. Беҙ мәктәп балалары йортона күстек, башҡорт мәктәбенә уҡырға индек, Ә Павлик менән Васёк рус мәктәбенә китте.

Тәүҙә аҡ алъяпҡысҡа, матур китаптарға һоҡланып, аҙаҡ ҡыҙыл галстукка, комсомолға, шиғырҙарға, хыялдарға күмелеп, гел юғарыға, гел алға ынтылдым. Донъя сәнғәтен өйрәнеп, үҙемде онотоп, гүзәлеккә сумып тигәндәй ғүмер үтте. Әлбиттә, ағастар ҙа ултырттым, баламды ла үҫтерҙем, ейәндәремде лә күтәрештем. Бына инде хаҡлы ялға туҡтаным. Ярты быуаттан артыҡ ғүмер йүгерҙем дә йүгерҙем. Үткән ғүмер юлына әйләнеп ҡарарға ла ваҡыт тапманым. Арыным, талдым, ялға туҡтаным. Тынлыҡ... Шул тынлыҡтың эсенән, хәтеремдең иң төпкөлөнән, ап-аҡ атҡа атланып, һәйкәл кеүек балҡып килеп сыҡты ул Васёк. "Васёк! Ҡайҙа һин, Васёк?" Зәңгәр күҙле, ҡара бөҙрә сәсле Васёк, мин һине онотманым. Ниндәй ышаныслы ине һинең ҡулдарың, ниндәй һоҡландырғыс ине һинең йөҙөң, ниндәй гүзәл ине һинең күңелең...

Мәктәпте уҡып бөткәс, бәләкәй генә сумаҙан тотоп, таныш булмаған ҙур донъя алдына сығып, бер үҙем генә ҡаушап баҫып торғанда, аҙаҡ йәш бала күтәреп яңғыҙ ҡалғанда, көнсөлдәр, хәйләкәр дошмандар күбәйеп, уларға ҡаршы торғанда, Васёк, һинең ышаныслы, тоғро ҡулдарың булманы минең янымда. Хәлем бөттө, йығылам, тигәндә, әлдә ҡанымдағы быуаттар төпкөлөнән урғылған ата-бабаларҙың көслө яугир рухы ҡалҡып сыға ла, таштай ныға, тағы алға ынтылдым. Ҡурай моңо мине әллә нисә быуаттар аша, йәйләүҙәргә алып китә лә, тирмәләр ҡоролған, усаҡтар яғылған йылдарҙан ҡайтып китә алмай аптырай инем бит. Эйе, бала саҡта ла ҡурай моңон ишетһәм, бутала инем. Миңә нисә йәш? Әллә ун йәшме? Әллә йөҙ йәшме? Боронғоларҙың хистәре күңелемә моң аша тула ла, ауыр ҙа, рәхәт тә. Арыйым да, рухланып, һоҡланам да. Минең дә шулай, Васектыҡы һымаҡ, теге ғүмеремдәге оло саҡтарым иҫемә төшкәндер ҙә, тик аңлай ғына алмағанмынмы икән?

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Был иҫтәлегемде 25 йыл элек, пенсияға сығыуымдың беренсе көнөндә яҙғайным. Тормош юлыңа байҡау яһаһаң, бала саҡтағы саф дуҫлыҡтан да һоҡланырлығы юҡтыр, тип тә ҡуяһың. Ниңә ул малай һине йоҙроҡтарҙан ҡурсалаған, иң матур уйынсыҡтарын һиңә тотторған, иң йәшерен серҙәре менән уртаҡлашҡан? Нәҡ беҙ кескәй саҡта экрандарға "Чапаев" кинофильмы сыҡҡайны бит. Ул фильм күп малайҙарҙың күңелен үҫтергәндер, шуға ла мине ул малай нескә күңелле саҡтағы етемлек хистәренән ҡурсалаған. Аҙаҡ ғүмерем юлын йәлләүсеһеҙ, ҡурсалаусыһыҙ үтһәм дә, башҡорт булыуым ярҙам итте, тигән фекерҙе яҙҙым был иҫтәлегемә.**

**Фәүзиә ЯХИНА.**

*ХӘҠИҠӘТИ ҺҮҘ*

# БОРОНҒО БАШҠОРТОСТАН

## Беренсе киҫәк. Боронғо дәүер.



### Беренсе бүлек. Таш быуаты.

Археолог Г. Н. Матюшин Урал тауҙарының көнсығыш тарафтарында һәм Ағиҙел йылғаһы бассейнында йәшәгән энеолит дәүере ҡәбиләләре үҙҙәренең мәҙәниәттәре яғынан бер-береһенән айырылып тороуын билдәләп, уларҙың ҡомартҡыларын ике үҙаллы - суртанды һәм ағиҙел археологик мәҙәниәттәренә бүлә. Был фекер, ҡомартҡыларҙың тейешле кимәлдә өйрәнелмәүе айҡанлы, яңы ғилми факттар менән раçлауҙы талап итә, әммә хәҙер ошо мәҙәниәттәрҙе тыуҙырыусыларҙың Көньяҡ Уралға йәнәш ятҡан Урта Волга буйы, Көньяҡ Себер һәм Ҡаҙағстан райондарында малсылыҡ менән шөғөлләнгән, ултыраҡ тормош алып барған халыҡтар менән үҙҙәренең этнографик үҙенсәлектәре (торлаҡ типтары, балсыҡ һауыт-һабаның формалары һәм орнаменты, йәшәү рәүеше һ.б.) яғынан бер ни тиклем яҡын булыуы бәхәсһеҙҙер.

Ошо райондарҙың энеолит ҡомартҡылары сағыштырмаса яҡшыраҡ өйрәнелгән һәм төбәктең энеолит дәүере халыҡтары хаҡындағы мәсьәләне асыҡлау өсөн күп кенә ҡыҙыҡлы материалдар бирә. Ошо йәһәттән Ишем йылғаһы бассейнында хәҙер ботай тип нарыҡланған мәҙәниәт тораларында (б.э. тиклем IV - III мең йыллыҡтар) күп йылдар буйына алып барылған ҡаҙыныу эштәре барышында мөһим һөҙөмтәләр эшләнде. Ошо мәҙәниәт кешеләре бер-береһе менән тәрән генә коридорҙар менән тоташтырылған яртылаш ергә ҡаҙып ҡоролған торлаҡтарҙа көн иткән. Тораларҙа бик бай материалдар (ҡорал, таштан эшләнгән хеҙмәт ҡоралдары, керамика) табылған, уларҙа, ғәҙәти булмағанса, йорт һәм ҡырағай хайуан һөйәктәренең күп булыуы иғтибарҙы йәлеп итә. Был ҡомартҡыларҙы тикшереү һөҙөмтәһендә бында йорт хайуандарынан бары тик аттар үрсетелеүе билдәле була. Уларҙың буйы мундаһына тиклем 136 - 144 сантиметрға етеп, урта буйлы аттар класына инә. Ботай кешеләренең аттары йыуан аяҡлы булыуҙары менән айырылып тора: быны уларҙың Көньяҡ Урал һәм Ҡаҙағстан далаларының ҡырҡа континенталь, ҡырыҫ шарттарына яҡшы яраҡлашыуы менән аңлатып була, сөнки бында аттарға ҡар аҫтында ҡалған ҡоро үләнде тибенеп ашай алыу астан үлмәҫ өсөн үтә мөһим була. Тикшеренеүселәр фекеренә ярашлы, ошо аттар тоҡомо ул замандарҙа был яҡтарҙа күп булған ҡырағай аттар популяцияһын эйәләштереү һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән. Ошондай уҡ тоҡомло аттар Көнсығыш Европа һәм Көнбайыш Себер халыҡтарында киң таралыу таба.

Шулай итеп, йорт хайуандары һөйәктәре составын тикшереү ботай мәҙәниәте кешеләренең, ултыраҡ тормошта йәшәп, башлыса ат үрсетеү менән шөғөлләнеүен бик асыҡ күрһәтә. Ошо уҡ хужалыҡ итеү системаһы Уралдың тау-урман һәм урманлы дала райондарында йәшәгән ҡәбиләләргә лә хас булыуын фараз итеп була. Ошондай һығымтаны ысынбарлыҡҡа ярашлы, тип ҡабул итергә кәрәк, сөнки ботай мәҙәниәте ҡәбиләләре сығыштары буйынса Көньяҡ Урал төбәге, айырып әйткәндә суртанды мәҙәниәте кешеләре менән тығыҙ бәйле була.

Көньяҡ Уралдың энеолит осоро ҡәбиләләре мәҙәниәте хаҡында тулыраҡ мәғлүмәттәрҙе Урта Волга буйы ҡомартҡылары, айырым һамар мәҙәниәте материалдарынан алып була. Ошо ҡомартҡылар араһында мәйеттәр һай ҡәберҙәргә ерләнгән, ям мәҙәниәтенә хас булған ҡурғандары булмаған ҡәберлектәр бар. Үлгәндәрҙең күбеһенең кәүҙәләре, бигерәк тә бала мәйеттәре, охра менән буялған. Ҡәбер өҫтәренә үлгәндәр хөрмәтенә ат баштарын һәм тиреләрен күмеү ритуалдары ла ойошторолған. Ҡәберлектәрҙә шулай уҡ аттарҙың һәм үгеҙҙәрҙең һөйәк фигуралары, гарпундар, төрлө биҙәүестәр, балсыҡ һауыт-һаба, баҡыр бысаҡтар, беҙҙәр табыла. Былар барыһы ла Көньяҡ Уралдағы һәм уға йәнәш территорияларҙа энеолит осоро кешеләре мәҙәниәтенең һәм йәшәү рәүешенең күп төрлө булыуына дәлил булып тора.

Һуңғы йылдарҙа Урал-Волга буйының урман-дала һәм урман зонаһында хасил булған энеолит осоро мәҙәниәттәренә дөйөм характеристика бирелгән ғилми хеҙмәттәрҙә уларҙың үҫеш кимәлен, мәҙәни үҙенсәлектәрен һәм уларға уртаҡ булған яҡынлыҡты баһалаған авторҙарҙың һығымталары, башлыса, әле бәйән ителгән положениеларға тап килә.

### Икенсе бүлек. Бронза быуаты.

Көньяҡ Уралдың боронғо тарихында бронза эпохаһы шулай уҡ мөһим урын биләй, ул б.э. тиклемге IV мең йыллыҡ аҙаҡтарынан II мең йыллыҡҡа тиклем арауыҡты үҙ эсенә ала. Был эпоханың иң мөһим ҡаҙаныштарының береһе - ҙур баҡыр мәғдәне ятҡылыҡтарын үҙләштереү. Алдараҡ телгә алынған Ташҡаҙған, Баҡырүҙәк рудниктары менән бер рәттән уларға яҡын урынлашҡан Никольский, Еленовский рудниктары файҙаланыла; Ҡарғалы баҡыр ҡомлоҡтары ла һәйбәт үҙләштерелә. Табылдыҡтарҙың һәм мәғдән составын тикшереү һәр бер ятҡылыҡта етештерелгән баҡырҙың үҙенсәлекле сифаттары булыуын күрһәтте. Мәҫәлән, Ҡарғалы баҡыр ҡомлоҡтарынан сағыштырмаса саф баҡыр етештерелһә, Ташҡаҙған мәғдәнендә ярайһы уҡ мышаяҡ, ә Никольскиҙа көмөш ҡатнашмаһы була. Был ятҡылыҡтар мәғдәненән иретеп алынған баҡырҙан яһалған әйберҙәр составына ла ошо үҙенсәлектәр хас була.

Урта Уралда икенсе бер ҙур металлургия үҙәгендә (Турбин ятҡылығында) көмөшлө баҡыр етештерелә (баҡыр һәм көмөш иретмәһе). Көньяҡ һәм Урта Урал үҙәктәре араһында тығыҙ мәҙәни бәйләнештәр булыуы, ә улар етештергән әйберҙәрҙең Урал төбәгенән сит өлкәләргә - Урта һәм Түбәнге Волганан Молдоваға тиклем киң таралыуы раçланды. Был Уралдың бронза быуатында Төньяҡ Евразияның иң эре мәҙәни үҙәктәренең береһенә әйләнеүенә дәлил булып тора.

Сағыштырмаса күп һанлы Көньяҡ Урал халҡы, этномәҙәни яҡтан ярайһы уҡ ҡатнаш төркөмдәрҙән хасил була. Меңәрләгән ҡомартҡылар материалдары нигеҙендә ошо территорияла үҙаллы археологик мәҙәниәттәре булған ҙур ҡәбиләләр союздары булғанлығы хаҡындағы фекерҙең хәҡикәткә ярашлы икәнлеге асыҡланды. Ошо мәҙәниәттәрҙең таралыу территорияһы Көньяҡ Себер, Ҡаҙағстан, Урта Волга һәм Кама буйын эсенә ала; Көньяҡ Урал уларҙың бер-береһе менән әүҙем бәйләнешкә инә торған контакт зонаһы ролен үтәй.




*Алтынсы һүрәт.*
*Бронза эпохаһында Көньяҡ Урал ҡәбиләләренең хеҙмәт ҡоралдары: 1,2 - балталар; 3-4 - ураҡтар.*

**Нияз МӘЖИТОВ.**
**Әлфиә СОЛТАНОВА.**

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ тәржемәһе.**
**(Дауамы. Башы 28-се һанда).**

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 77*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Шайморатовсылар - Чернигов-Припять операцияһында

**Иосиф Петлюк** (Төркмән ССР-ы, Ҡыҙыл-Арват ҡалаһынан). 62-се кавполк эскадронының медицина хеҙмәте гв. старшинаһы. Санинструктор, Снов йылғаһы аръяғында Клочково ауылы өсөн барған алышта, һуғыш яланынан яраланғандарҙы алып сыҡҡан саҡта, 20 кешегә яҡын немец һалдаттары төркөмөн шәйләп ҡала. Йәшеренеп барып, уларға автоматынан ут яуҙыра, гранаталар ташлай. Һөҙөмтәлә 16 немец автоматсыһын сафтан сығара. Көн дауамында һуғыш яланынан 35 яралы һалдат һәм офицерҙы алып сыға. 22 сентябргә ҡаршы төндә Ивашковка ауылына разведкаға бара, немец окоптары янына барып сығып, улар өҫтөнә гранаталар ташлай. Ошо ауылды азат иткәндә танкҡа ҡаршы ата торған мылтыҡтан дошмандың үҙйөрөшлө орудиеһын ҡыйрата. Тәүгеләрҙән булып, Днепр аша сыға, ҡаршы ярҙа беҙҙең яралыларға тейешле медицина ярҙамы күрһәтә.

**Сергей Подлузский** (Орлов өлкәһе, Богино ауылынан). Гв. өлкән сержанты, 60-сы атлы полктың 2-се эскадронында взвод командиры. 19 сентябрҙә район үҙәге Березна йүнәлешендәге һөжүм барышында алғы поход заставаһы менән дошмандың 50 ылауҙан торған обозын ҡулға төшөрә. 20 сентябрҙә Лопатино ауылы өсөн алышта, гранаталар ташлап, дошмандың пулемет расчетын юҡ итә. 28 сентябрҙә, взводы менән Днепр аша сығып, яр буйындағы ҡыуаҡлыҡтарҙан дошманды бәреп сығара.

**Григорий Тихонов** (Фрунзе ҡалаһынан), гв. өлкән лейтенанты, 62-се кавполктың 3-сө эскадроны командиры. Уның эскадроны 19 сентябрҙә, Снов йылғаһын кисеп сығып, Клочково ауылының төньяҡ ҡырыйын штурмлай, 40-лап дошман һалдатын сафтан сығара. 21 сентябрҙә эскадроны менән "1 Май" совхозына атака яһап, 100-гә яҡын дошман һалдатын һәм офицерын сафтан сығара. Ивашковка ауылы янында эскадронға немецтарҙың алты "тигр" танкыһы һәм пехотаһы ҡаршы сыға. Әммә был атака ла кире ҡағыла. Днепр аша сыҡҡас, эскадрон Нивки, Усохи, Галки ауылдарын азат итеүҙә ҡатнаша.

**Аблакул Узаков** (үзбәк, Сәмәрҡәнд өлкәһенән), гв. сержанты, 60-сы атлы полктың 1-се эскадронында отделение командиры. 1943 йылдың 19 сентябрендә Клочково ауылы янындағы бәрелештә немец һалдаттарына яҡын уҡ шыуышып килеп етеп, гранаталар ташлай, автоматынан да ут һибә. 16 немец автоматсыһы һәләк ителә, ә өсәүһе әсиргә алына. 20 сентябрҙә "1 Май" совхозы өсөн алышта дошман пулеметын, гранаталар ташлап, тонсоҡтора. Шул уҡ көндә Черныш ауылындағы бәрелештә Узаков дошмандың 35 автоматсыһын юҡ итә.

**Ҡотлоәхмәт Хәйбуллин** (Ейәнсура районы, Сөләймән ауылынан), гв. сержанты, 58-се гв. кавполкының ПТР отделениеһы командиры. Мена ҡалаһы һәм станцияһы өсөн барған һуғышта уның отделениеһы, беҙҙең яугирҙарыбыҙҙан алғараҡ сығып, дошман танкылары контратакаһын кире ҡаға. Днепр йылғаһы аша сыҡҡас, Галки ауылы янында дошмандың ике танкыһын ҡыйрата. 1943 йылдың 10 ноябрендә Белоруссия ерендә, Гомель өлкәһенең Лоев районында батырҙарса һәләк була.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

**Үҙ эшен асыусылар был өлкәгә төрлөсә килә, ләкин уларҙың барыһын да үҙ көсөнә ышаныс, маҡсатына ынтылыш алға әйҙәй. Бөгөнгө әңгәмәсем - Силәбе өлкәһе Усть-Ҡатау ҡалаһы егете, Өфөләге "Аҡ бульдог" ветеринар клиникаһы етәксеһе Илдар ХӘСӘНОВҡа ла үҙ эшен асыу еңел бирелмәй, ләкин маҡсатлы егет уңышҡа өлгәшә һәм бөгөнгө көндә уның клиникаһы йорт хайуандары булғандарға яҡшы таныш. Уға үҙҙәренең дүрт аяҡлы дуҫтарын күрһәтергә, дауаларға Өфөнән генә түгел, ә тирә-яҡ район һәм ҡалаларҙан да килеүҙәрен иҫәпкә алғанда, тырыш эшҡыуар бик кәрәкле эш төрө һайлаған, тип ышанып әйтеп була.**

**Илдар, һине, күрше өлкәлә тыуып үҫкән егетте, Башҡортостанға ниндәй юлдар алып килде?**

- Усть-Ҡатауҙа йәшәгән осорҙа бер нисә тапҡыр Өфөлә булырға тура килде. Ҡала минә үҙенең йәшеллеге, кешеләренең ихласлығы, заманса булыуы менән оҡшаны. Дыуан аграр техникумында ветеринар фельдшер һөнәрен үҙләштергәндән һуң Силәбе ҡалаһында алты йыл ошо йүнәлештә эшләнем, ә күңел һаман Өфөгә тартылды. Шуға күрә эшләп бер аҙ тәжрибә - Яҙмыш ҡушыуымы, әллә үҙемдең ныҡышмалылығымы, бәлки, икеһе бер юлы тура килгәндер, шулай ҙа үҙемдең һөнәрем буйынса эшкә урынлаштым. Бер мәл ветеринар табип кәрәклеге тураһында иғлан күҙемә эленде лә, юғары белемем булмау сәбәпле, мине алыуҙарына әллә ни өмөт итмәй генә шунда барҙым. Табип бик ныҡ кәрәк булғандыр инде уларға шул ваҡыт, тәжрибәм булыуын иҫәпкә алып, мине эшкә алдылар. Мин унда хирургик операциялар ҙа эшләнем, терапия йәһәтенән дә

**Ветеринария өлкәһендә эшләүселәр күп, ләкин уларҙың барыһы ла үҙ клиникаһын асырға йөрьәт итмәй. Һин был ҡарарға нисек килдең?**

- Бала саҡтан хайуандар менән эшләргә, уларға ярҙам итергә теләнем. Бигерәк тә минә ҡош, эт, бесәй һәм башҡа ошондай бәләкәй хайуандар оҡшай ине. Үҙемдә бер ҡасан да мөгөҙлө эре мал менән эшләйем, тип күҙ алдына килтермәнем дә. Силәбелә төрлө мал һәм хайуандарға медицина ярҙамы күрһәтергә тура килде. Әлбиттә, был тәжрибә эшем алға китте. Әлбиттә, үҙ клиникамды асыуға минең ветеринария өлкәһендә әҙмекүпме билдәле исемем бар ине, йылдар дауамында туплана барған клиенттар базаһы булыуы ла үҙенең ыңғай ролен үтәне.

Тәүге ваҡыттарҙа үҙемдең клиниканан тыш, тағы ла ошондай уҡ өс урында эшләнем. Йоҡо әләкмәне, айына ике көн ял итә инем, баш баҫып эшләнем дә эшләнем. 2,5 йыл ярым тирәһе ошондай темпта эшләнем. 9 ай клиникамда бер үҙем эшләгәндән һуң ярҙамсылар алдым, хәлем әҙерәк еңеләйеп ҡалды, ләкин үҙемә алған темптан төшмәнем. Сөнки минең алда ипотеканы тиҙерәк түләп бөтөргә, клиниканың эшен йәнләндерергә тигән мотив булды һәм мин ал-ял белмәйенсә үҙ маҡсатыма табан барҙым.

шелә потенциал күрәм икән - эшкә алам. Намыҫлы кешеләрҙе, үҙ эшенә яуаплы ҡарағандарҙы хөрмәт итәм.

**Барыһы ла хайуандарҙы яратмай. Ундай кешеләр ветеринария өлкәһендә эшләй аламы?**

- Ә башҡа өлкәлә бөтәһе лә үҙ эшен мөкиббән китеп яратып башҡарамы ни? Ҡайһы саҡта хеҙмәт урынын күрә алмайҙар, ә йылдар дауамында эшләүҙәрен дауам итәләр. Ветеринарияла ла шулай: уны ла бары эш итеп кенә ҡарарға кәрәк. Быны мин үҙемдә хайуандарҙы ныҡ яратам, тип әйтә алмайым, шул уҡ ваҡытта мин уларҙы күрә алмайым түгел - уртаса мөнәсәбәттәмен. Ләкин был минә ошо өлкәлә эшләргә ҡамасауламай. Әлбиттә, хайуандарҙы күрә алмағандар була, ундайҙарға ветеринар булыу ҡәтғи тыйыла, сөнки күңелдә

# ҮҘ ЭШЕҢДЕ БАШЛАҒАНДА...

## ҡурҡыу хисенә бирелмәҫкә!



йыйғас, Өфөгә килеп, Башҡорт дәүләт аграр университетына уҡырға индем.

**Өфө һине нисек ҡаршы алды?**

- Ҡунаҡҡа ғына килеп ҡайтыу - бер, ә уҡырға, йәғни даими йәшәргә килеү бөтөнләй икенсе нәмә. Имтихандар тапшырырға Усть-Ҡатауҙан ҡарағы төшкәс кенә килеп еттем. Мине үҙҙәрендә ҡабул итә алырҙай туғандар һәм таныштарҙың барыһы ла ҡапыл ғына бушамай булып сыҡты ла мин Өфө уртаһында яңғыҙым тороп ҡалдым. Документ тапшырып өлгөрмәгәс, ятаҡтан урын алып өлгөрмәнем, ҡунаҡханала ҡуныға аҡса яғы самалы, тимер юлы вокзалында ла хоҡуҡ һаҡлау хеҙмәткәрҙәре ҡарап ҡына тора. Аптырағас, ятаҡханала эшләүсе вахтер апайға мөрәжәғәт иттем. Әле булһа уға рәхмәтем ҙур, мине ҡыуып сығарманы, ятаҡхана коридорындағы эскәмйәлә бер төн йоҡларға рөхсәт итте. Икенсе көнөнә ятаҡтан урын бирҙеләр, мин имтихандар тапшырып, студент булып киттем. Ләкин бер уҡытыусы менән уртаҡ тел таба алмау һөҙөмтәһендә уҡыуҙы ташланым да Өфөлә ҡалып эшкә урынлаштым.

Юғары белемем булмау сәбәпле мине ветеринария өлкәһенә эшкә алманылар, шуға күрә төрлө урындарҙа эшләнем: элемтә салонында оператор, бармен һәм башҡа төрлө һөнәрҙәрҙе үҙләштерҙем. Тәүлегенә 18-әр сәғәт эшләргә тура килде, сөнки коммуналь фатирҙағы ҡуртымға алған бер бүлмә өсөн түләргә һәм ашарға-кейенергә лә кәрәк ине бит.

**Тормош һиңә үҙең яратҡан һөнәр буйынса эшләү мөмкинлеге биргән шулай ҙа...**

ҡабул итеүҙәр алып барҙым, хайуандарға уколын да ҡаҙаным һәм башҡа төрлө медицина хеҙмәте күрһәттем.

Ләкин барыбер юғары белем алыу мөһим ине, шуға күрә алты йылдан һуң Башҡорт дәүләт аграр университетының "Ветеренария" йүнәлеше буйынса яңынан уҡырға индем. Уҡыған саҡта ла, диплом алғас та шул шәхси ветеринар клиникала эшләүемде дауам иттем. Юғары белемем булмаһа ла, миңә ышанып эшкә алған клиника хужаһына, бергә эшләгән коллегаларыма рәхмәтем сикһеҙ.

менән байыта, үҙ-үҙеңә ышанысты арттыра һәм оҫталыҡты нығыта. Силәбелә эшләгән ваҡытта уҡ үҙемдең клиника тураһында хыялландым һәм, ниһайәт, 2018 йылда уны тормошҡа ашырҙым.

Иҡтисади көрсөк йылы, кеҫәлә 60 мең һум аҡса, елкәлә ипотека. Клиника өсөн бүлмәгә айлыҡ ҡуртым хаҡы 30 мең һум, етмәһә, ике айға бер юлы түләргә кәрәк ине. Күптәр эшен юғалтып, фатир өсөн түләй алмайынса, унан яҙып, бик ауыр хәлдәргә тарыған ваҡыт булыуына ҡарамайынса, тәүәккәлләнем һәм оттом,

Әлеге ваҡытта миндә тулы штат табиптар эшләй, мин берәйһен алмаштырыуға йәки шәхсән миңә яҙылғандар өсөн генә эшкә сығам. Шулай ҙа клиника балам һымаҡ, тип әйтәйемме, унан ситтә оҙаҡ була алмайым, фатирым да яҡын булғас, һәр ваҡыт килеп-китеп йөрөйөм.

**Үҙ эшеңде асыр алдынан иң ҡурҡытҡаны нимә булды?**

- Үҙ-үҙемдә эште алып барып сығара алмаҫмын, эшем алға китмәҫ һәм мин "яныр-мын", тигән тойғоға тәрәнәйергә, уға йөрәгемдә тамыр йәйеп, миңә аяҡ салыу ихтималлығына ҡаршы тороу булғандыр, тип уйлайым. Шикләнеү тойғоһо маҡсатты "баҫты" икән, эштең уңышһыҙ булыуына аҙым яһалды, тигән һүҙ.

**Ярҙам итеүселәрең булдымы?**

- Эшемдә башлағанда дуҫтарым ныҡ ярҙам итте - кемдер ремонт эшләште, икенселәре үҙ аҡсаларына клиника өсөн кәрәк-яраҡ алды һәм, иң мөһиме, улар тарафынан рухи ярҙам көслө булды. Әгәр ҙә һинең яныңда башланғыстарыңды хуплап, алға әйҙәп тороусылар булһа, эштәр бермәбер яҡшы бара. Ә киреһенсә, эштең барып сығырына шикләнеү белдереп, һәр ваҡыт нимәгәләр зарланып йөрөгәндәр менән дуҫ булһаң, ысынлап та, бер нәмә лә килеп сыҡмауы мөмкин. Шуға күрә ундай "дуҫтарҙан" йыраҡ торорға кәрәк.

**Хеҙмәткәрҙәрҙе нисек һайлап алаһың?**

- Бер кем дә, нисә уҡыу йорто тамамлаһа ла, эштең бөтә нескәлеген яҡшы белеп бөтмәй. Ысын профессионалды әҙәләү оҙайлы процесс. Шуға күрә, әгәр ҙә миңә килгән ке-

уларға ҡарата миһырбанлыҡ, шәфҡәт булмаһа, әллә ниндәй дарыуҙар ҙа йүнәлтергә ярҙам итмәйәсәк.

Беҙҙең эштә иң мөһиме - күңел матурлығы, дүрт аяҡлы дуҫтарыбыҙға, ҡоштарға ҡарата мәрхәмәтлек. Улар беҙҙең яҡлауға, һаҡлауға, ярҙамға мохтаж, шуға күрә, әгәр ҙә беҙ, кешеләр, ярҙам итмәһәк, улар нимә эшләр...

**Үҙ эшеңде асыу һиңә нимә бирҙе?**

- Рухи ҡәнәғәтлек, хыялымды тормошҡа ашыра алыуыма ғорурлыҡ, финанс именлек. Мин бер кемгә лә буйһонмайым, үҙемә үҙем хужа, карталағы аҡсамды тинләп һанамайым, теләгән илгә ял итергә бара алам. Быларҙың бөтәһе лә миңә үҙемдең тормошомдан ҙур ҡәнәғәтлек тойғоһо кисереп йәшәргә булышлыҡ итә.

**Илдар, интернет селтәрендәге баһаламаға ярашлы, Өфөләге 70-тән ашыу ветеринария клиникаһы араһында һеҙ тәүге баҫҡыста тораһығыҙ. Клиниканың баһаһын (маркаһын) нисек тотаһың?**

- Быны әллә ниндәй йәшерен һәм ҙур сере юҡ. Эшеңде яратырға һәм уны сифатлы башҡарырға, ихлас йөрәкле, кешелекле булырға.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Илдарҙы күптән беләм. Бер ҡасан да, ниндәй ауыр ваҡыттарында ла күңел төшөнкөлөгөнә бирелмәгән, ауыр уйҙарға батып, бойоғоп йөрөмәгән, һәр нәмәгә үҙенең төплө ҡарашы булған, үҙ фекерен әйтергә бер ҡасан да ҡурҡмаған башҡорт егете. Эшкә шәп, ярҙамсыл, юморға бай эшҡыуар ул. Артабан да уңыштар юлдаш булһын.**

**Гөлназ МАНАПОВА әңгәмәләште.**

✓ *Боронғо Ҡытайҙың ниндәйҙер бер дәүерендә үлем язаһына хөкөм ителгән тотҡондарға сәйер бер ысул ҡулланғандар. Уларҙы... һарыҡ ите менән һыйлағандар.*





# МИН НИ ӨСӨН СЫСҠАНДЫ ЙӘЛЛӘНЕМ,

## йәки Рәхимлелек хаҡында бер фәлсәфә

**Үткән яҙ, өйҙә үҫтергән помидор үҫентеләрен, ғәҙәтемсә, баҡсама алып барып, парник түтәленә ултырттым һәм өҫтөн ябып ҡуйҙым. Әммә иртәгәһен асып ҡараһам, әлеге үҫентеләремдең бер-икеһен олононоң төбөнән үк ниҙер ҡырҡып, ашап киткән. Унан артабанғы көндәрҙә лә шул уҡ хәл ҡабатланды. Ҡырҡылған помидорҙар унға яҡынлашты. Аптырағас, кәңәш һорап, күршетирәгә мөрәжәғәт иттем. Ғүмер буйы баҡса үҫтереп өйрәнгән мәрйә халҡы ошо өлкәлә унысыбыны күп белә бит инде...**



Шуларҙың береһе киләһе ысулды өйрәтте. Күпмелер алебастр (гипс) порошогы алып, уны онға ҡушып бутарға кәрәк. Әлеге парник түтәленә шуны ҡуйып, йәнәшәһенә икенсе һауытҡа һыу ултыртыу тейешле икән. Кимереүсе ана шул он ҡатыш порошокты ашап алғас, һыу эсә һәм, күпмелер ваҡыттан, үҙе үлә, тинеләр. Тап улар өйрәткән рецепт буйынса ҡатнашма әҙерләп алдым да, баҡсама киттем. "Дарыуҙы" парник эсенә ҡуя-ҡуя, уның буласаҡ тәьҫире һәм әлеге "бурҙың" нисек үләсәге хаҡында (табип күҙлегенән сығып) уйланам. Эйе, ысынлап та, бик уңай ысул. Сысҡандың аш эшкәртеү трактына килеп эләккән алебастр тиҙ генә ҡатып, эсәктә бөтөнләйгә аш үтмәҫлек хәл тыуа. Медицина теле менән әйткәндә, "острая кишечная непроходимость" тип аталған бик ауыр, үлемесле сир барлыҡҡа килә. Һөҙөмтәлә, был кескәй януарҙың ғүмере өҙөлә...

Эсәк сейәлеү йәки унда берәй шеш барлыҡҡа килеү сәбәпле ауыр хәлдә госпиталгә килеп эләккән бәғзе кешеләрҙе күргәнем бар. Шуларҙың ғүмерен ҡотҡарып алып ҡалыу маҡсатында ашығыс операцияларҙа ла ҡатнашырға тура килгеләне. Ашаған ашы үтмәгән сирле кешенең операциянан алда нисек ныҡ яфаланғанын бер күргәс тә, ғүмерлеккә иҫтә ҡала. Ҡаҫҡа ваҡытҡа ғына (бер-ике минутҡа) тына биреп, унан ғәйәт ныҡ көсәйә барып, ыңғырашырға, хатта ҡысҡырырға мәжбүр иткән эс ауыртыу өйәнәктәре ауырыуҙы "стенаға менергә" мәжбүр итер һымаҡ! Сирле кешеләр үҙҙәре ана шул ауыртыуҙы "адские боли" тип атай, икенселәре ҡатын-ҡыҙҙарҙың бала тыуҙырыр алдынан булған тулғаҡ тотоуға тиңләй... Быуылып, ғәйәт ныҡ күбеп торған эсәктең шартлап китеүе лә ихтимал. Ваҡытында операция яһап, эсәктең үтеүен юлға һалмаған хәлдә, был сирҙән кеше мотлаҡ үлә...

Боронғо Ҡытайҙың ниндәйҙер бер дәүерендә үлем язаһына хөкөм ителгән тотҡондарға сәйер бер ысул ҡулланғандар. Уларҙы... һарыҡ ите менән һыйлағандар. Әйе! Фәҡәт бешкән ит кенә ашатҡандар һәм һыу эсергәндәр. Әммә, эсәкте эшләтеү (перистальтика кишечника) өсөн мотлаҡ кәрәк, үҫемлек күҙәнәклеге (растительная клетчатка) күп булған икмәк, йәшелсә һәм башҡа төр аҙыҡ бирмәгәндәр. Бер нисә аҙнанан кешенең эсәге буйындағы аш тороҡланып, әлеге ҡаты сир башланған. Үлем язаһына хөкөм ителгән әсир, ғәйәт көслө ғазаптар кисереп, "үҙ үлеме менән" үлеп киткән...

Бәлки, кемгәлер сәйер ҙә тойолор, әммә бына ошо ауырыуҙың нисек барлыҡҡа килеүен, йәғни уның "механизмын" яҡшы күҙ алдына килтергән кеше булараҡ, әлеге сысҡан меҫкенде йәлләп киттем. Кескәй генә булһа ла, был йән эйәһенең дә нәҡ әҙәм балаһы һымаҡ ыҙа сигәсәген күҙалланым һәм... ышанаһығыҙмы-юҡмы: әлеге үҙем әҙерләп, парникка ултыртҡан дарыуҙы ҡабат ала һалдым!.. Урынына, магазиндан һатып алып, сысҡан ҡапҡаны (уға икмәк киҫәге бәйләп) ҡороп ҡуйҙым. Эләккән хәлдә лә, был йәнлек ғазапланмай, еңел генә үлһен тип уйланым (асыҡ түтәлгә ҡапҡан ҡуйыу ярамай, сөнки сәпсек-маҙар килеп эләгеүе ихтимал). Парникты ҡабаттан япҡас, "Түтәлдәге үҫемлектәрҙе сысҡандың зыянынан имен ҡыл" тип, Аллаһ Тәғәләгә доға ҡылдым...

Ә бит, ысынлап та, ошо көндән алып әлеге кимереүсе түтәлдәремә башҡаса яҡынламаны, шулай уҡ ҡороп ҡуйған ҡапҡаныма ла эләкмәне... Раббым минең доғаны ҡабул итеп, әлеге сысҡанға бесәй ебәргәндер, тип фаразланым. Сөнки ошонан һуң нәҡ тә юлбарыҫ һымаҡ хужаларса, әкрен генә баҫып, бер дәү бесәйҙең баҡса аша үтеп киткәнен күргеләй башланым. Кимереүсене бесәй тотоп ашауы - тәбиғи хәл һәм һис кенә лә үкенесһеҙ. Шуның өсөн Аллаһҡа шөкөр иттем. Ә быйыл ултыртҡан үҫентеләремә сысҡан бөтөнләйгә килмәне. Һирәк-һаяҡ әлеге "етди йөҙлө" ата бесәй баҡсамдан арҡыры үтеп киткеләй. Кешегә лә әллә ни яҡынлашып бармай, бер аҙ ҡырағайланған "мыраубай" булды ул, ахырыһы. Башҡа берәҙәк бесәйҙәр һымаҡ йонсоу ҙа түгел, киреһенсә, көр генә күренә. Ҡала баҡсалығында йылдар буйы йәшәп, сысҡан-маҙар менән туҡланырға ҡулайланған, тип фаразланым.

Аллаһ илсеһе "Мәй йәрхәм - йүрхәм" тип әйткән бер хәҙис бар (урыҫ теленә уны "помиловавший будет помилован" тип тәржемәләгәндәр). Кем дә кем Аллаһ Тәғәләнең берәй мәхлүген йәлләп, уны үлтермәй ҡалдыра, ул үҙе лә Раббыбыҙ тарафынан ҡотолоу күрер, тигән мәғәнәлә ул. Кем нисектер, әммә мин кескәй ейән-ейәнсәрҙәрем менән баҡсала йә ҡала аллеяларында йөрөһәм, уларға ҡырмыҫҡа (беҙҙең яҡта "ҡымыртҡа" тиҙәр), "ҡояшапай" ("божья коровка"), "һалҡынағай" ("солдатик") һәм башҡа бөжәктәрҙе йәлләп, тапамай, урап үтергә ҡушам. Үҙемә ҡан эсергә килгән серәкәйҙе лә үлтермәй, ҡыуып ҡына ебәрергә тырышам. Баҡсала торған һыу мискәһенә йығылып төшкән ҡуңыҙ-маҙарҙы ла алып, осороп ебәрәм. Балаларыма, ейән-ейәнсәрҙәремә әлеге хәҙисте һәр саҡ һөйләйем.

Ҡулын сапсығаны өсөн генә бесәйен бикләп, ас тотоусы бер ҡатындың Йәһәннәмдә янасағы хаҡында ла Бәйғәмбәребеҙҙән с.ғ.с. сахих хәҙис бар. Шулай уҡ, эҫе сүллектә ныҡ һыуһауҙан әлһерәп, әммә тәрән ҡоҙоҡҡа үрелеп, буйы етмәгән эткә һыу алып эсергән икенсе бер кеше тураһындағы риүәйәтте белеү ҙә кәрәк. Ҡылған шул мәрхәмәтлеге өсөн был әҙәм балаһына Аллаһ Тәғәләнән ниндәй ҙур әжер (вознаграждение) буласағы һөйләнелә унда.

Кемдер берәүҙең: "Ә һуғымға йә ҡорбанға китә торған хайуанды йәлләмәй нисек салаһың?" - тип һораясаған да күҙаллайым. Бала сағымда, атайым мал салыр булһа, ысынлап та, хайуанды йәлләп, йүгереп өйгә инеп киткәнемде хәтерләйем. Әммә әсәйем мәрхүмә һуғымлыҡ малды йәлләргә ярамауы хаҡында гел генә әйтә торғайны. "...Беҙгә Аллаһ Тәғәлә тарафынан аҙыҡ итеп бирелгән бит ул", тиер ине. Хәҙер инде үҙем "бисмилләһ" әйтеп, уларҙы һис кенә лә йәлләмәй, ифрат тыныс күңел менән боғаҙлайым. Балыҡҡа барғанда ла тотолған балыҡты кире һыуға ебәрә торған мәлдәрем булғыланы. Әммә үҙеңә аҙыҡ була торған был хәләл йән эйәһен дә йәлләү ярамай. Ә ниндәй генә хайуан булмаһын, уларҙы туҡмау, ғазаплау - ҡәтғи тыйыла. Малды ла алдан ныҡ үткерләп ҡуйылған бысаҡ менән салырға ҡушыла. Аяҡтарын бәйләп һалғандан һуң, уның янында бысаҡ ҡайрап тороу насар...

Һуңғы осорҙар ҡыр һәм йорт хайуандарына ҡарата мәрхәмәтлек мәсьәләһе хөкүмәтебеҙ тарафынан да йыш ҡына ҡуҙғатыла. Был хаҡта хатта законлаштырылған талаптар ҙа бар. Әлбиттә, әйтәйек, кешегә ташлана торған берәҙәк эттәр мәсьәләһен хәл итеү кәрәк. Бәләкәй балаларға һөжүм итеп, талап үлтергән осраҡтар ҙа булды бит. Ундай хайуандарҙың барыһын да тотоп, приют-фәләнгә бикләүҙәрҙең файҙалы нәтижәгә алып килеү-килмәүе хаҡында ниҙер әйтергә ҡыймайым. Әммә был мәхлүктәрҙе ғазапламай ғына зарарһыҙландырыу ысулын табыу кәрәктер, тип улайым.

Әҙәм балаларына зыян килтергән йәнлекте үлтереү ҡәтғи тыйылмай, әлбиттә. Мәҫәлән, ағыуына ҡаршы бер ниндәй ҙә антидот булмаған, кеше өсөн үлемесле кобраны (очкастая змея) Аллаһ илсеһе үлтерергә ҡушҡан хәҙис бар. Шулай уҡ чума, туляремия, тиф кеүек хәүефле сирҙәрҙе таратыусы йән эйәләренә лә ҡағылышлылыр ул, моғайын. Уларҙы ағыулау, йә ҡапҡан ярҙамында үлтереү - ғазаплау түгел бит инде, барыбер...

Ҡайһы берҙә артыҡ үрсеп китеп, ауыл малдарына һөжүм иткән бүреләр хаҡында ла ишетелеп ҡалғылай. Быныһы инде ауылдарҙа һунарсыларҙың һирәгәйеүенәндер, тип уйлайым. Икенсенән, һунар менән шөғөлләнгән ир-атты ҡыҙыҡтырыу ысулы ла юҡтыр. Атайым мәрхүм йәш сағында һунарсылыҡ менән шөғөлләнгән. "Элек һәр бер тотолған ата бүре өсөн фәләнсә, ә инәһе өсөн тағы ла күберәк премия бирелә торғайны", тип һөйләгәне хәтеремдә. Ауыл малына зыян иткән быndaй кейектәрҙе аулау һис кенә лә насар түгелдер, тигән уйҙамын. Тик һәр нәмәлә сама белеү кәрәк. Мәҫәлән, ҡыҙыҡ өсөн йә дан ҡаҙаныу ниәте менән уларҙы күпләп юҡ итеү дөрөҫ түгел, минеңсә.

Гәзиттәрҙең береһендә бер ауыл тракторсыһы өңөндә йоҡлап ятҡан инә айыуҙы тракторы менән нисек иҙгеләгәне, хатта ана шул мәлдә айыубикәнең ауыры төшөүе (выкидыш) хаҡында уҡып тетрәнгәйнем. Ә телетапшырыуҙарҙың береһендә тайгала камаз водителенең бер айыуҙы ҡабат-ҡабат, унда-бында йөрөп тапатҡанын күрһәткәйнеләр. Айыуҙы йәлләп илар хәлгә еттем. Йыртҡыстарға ҡарата кешеләр тарафынан ҡылынған йыртҡыслыҡ - барыбер башҡа һыймаҫлыҡ шул...

Әлеге баҡса мәсьәләһенә килгәндә, әлбиттә, колорадо ҡуңыҙын, зыянлы күбәләктәрҙе ағыулауҙың насар нәмәһе юҡтыр. Бындай ысул уларҙы язалап үлтереүгә тиң түгел бит инде... Бәлки, икенселәр башҡа төрлө фекерләйҙер?

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ,**
**отставкалағы хәрби табип.**

ЯҘЫУСЫҒА ӨС ҺОРАУ

**Әбйәлил районы Ҡырҙас ауылында йәшәп ятыусы, ғүмере буйы ауыл хужалығында баш агроном булып эшләп, бер үк ваҡытта Башҡортостан Яҙыусылар берлеге ағзаһы булараҡ әүҙем ижад итеүсе, бер нисә китап авторы Иҙрис МӨҘӘРИС-НОҒМАНОВҡа өс һорау бирҙек. Әңгәмәлә өсәүгә генә түгел, күп һорауҙарға яуап алынғандай булды.**

# ӨЙТӨБӘКТӘРҘЕҢ ДӘ ӨЙТӨБӘГЕ МИН...

➔ **Нимә ул һеҙҙең өсөн тыуған ер, тыуған төйәк?**

- Башҡорт борон-борондан, ғәзиз илкәйемә ҡайтыр инем, аяҡтарым талһа имгәкләп, тип тиккә генә йырламағандыр. Тыуған ер, тыуған тупраҡ, тыуған төйәк - милләтем кешеһе өсөн барыһы ла. Шулай булған, шулай булып ҡаласаҡ. Ожмахҡа тиң Урал тип аталған Ватаны хаҡына башҡорт иразаматтары үҙен аямай ҡан ҡойған, баштарын һалған, йәнен фиҙа ҡылған. Ер-һыуына, иленә, төйәгенә шул ҡәҙәре тоғро, хыянатһыҙ милләт башҡа урында юҡтыр ул.

Кем нисектер, әммә үҙем тыуған төйәктән айырылып йәшәүҙе күҙ алдына ла килтерә алмайым. Ундайҙарҙы, гәҙәттә, өйтөбәк тип атайҙар. Мин ана шул өйтөбәктәрҙең дә өйтөбәге. Әбйәлилем, Һаҡмарым, Әхмәтем (тыуған ауылым), тип телем асылды, һәр әҫәрем тиерлек улар исеме менән башлана. Сит яҡтарҙа, хатта Европаның үҙәгендә йөрөгән саҡтарҙа ла уларҙы һағынып бөтә инем. Һуңынан ҙурыраҡ, мәртәбәлерәк урындарға саҡырылырға күп булды - Кеше иткән еремде ташлап китә алманым. Ташлап киткән хәлдә, бөгөн Иҙрис Мөҙәрис-Ноғманов тигән яҙыусы булыр инеме, юҡмы, һис әйтә алмайым (мине бит иҫ белгәндән Нөғәмәнов Ринат Мөҙәрис улы тип атайҙар). Әле булһа тыуған ауылым, бергә уйнап үҫкән баласаҡ дуҫтарым, йәшел хәтфә урамым, йәйрәп ятҡан урмандарым-ҡырҙарым тип йәшәйем. Һәм ғүмер ахырынаса шулай дауам итәсәк. Тыуған яғым минең йөрәгемдә. Йөрәгем тибеүҙән туҡталмайынса, уға ҡарата һөйөүем дә һүрелмәҫ. Киреһенсә, миҙгелдәр, йылдар үткән һайын һөйөү хисе көсәйә генә бара һымаҡ. Инде балаларыма, ейән-ейәнсәрҙәремә аҡыл өйрәтеп ултырырлыҡ шөйлә ололғайған көнөмдә үткәндәргә ҡағылышлы иҫтәлектәр, хәтирәләр яңыра барғандай, улар, әленән-әле дәртдарман өҫтәп, йәшәү көсө биреп тора. Бигерәк тә бала сағым тураһында берәй әҫәр яҙһам, үҙемде шул мәлдәргә ҡайтып урағандай хис итәм. Һәр әҫәремдә тиерлек уларҙы телгә алырға тырышам.

Бер нәмә үкенесле: мәрхүмә Фәүзиә өләсәйем (атайымдың әсәһе), уҡытыусы атайым мәрхүм Мөҙәрис Хәйривара улы, әсәйем Миндинур Мәғәсәм ҡыҙы яҡын-тирәләге ер-һыу, тау-таш, урман-ҡыр атамалары хаҡында һөйләп ултырырҙар ине, шуларҙы ҡағыҙға теркәп барырға форсат табылмаған (бәләкәй булынғандыр инде). Ә хәтер тигәненә артыҡ күпте һеңдереп булмай, онотола. Мәҫәлән, Һаҡмар йылғаһын башлап ебәргән 15 эреле-ваҡлы инештең хәҙерге көндә икәүһенең генә атамаһы хәтерҙә һаҡланып ҡалған, башҡалары зым-зыя онотолған. (Әйткәндәй, ул инештәр бөгөн үҙҙәре лә ҡороп юҡҡа сыҡҡан). Мәңгелеккә тинһең дә хата булмаҫ. Сөнки бөгөн уларҙы иҫләүсе оло быуын кешеләре юҡ.

Йәштәргә кәңәшем шул: өлкән быуын кешеләренән ишеткән-күргәндәрегеҙҙе мотлаҡ ҡағыҙға теркәй барығыҙ. Аҙаҡ бына минең кеүек үкенеп ултырмаҫ өсөн. Теркәгәндәрегеҙ бер бөгөнгөләргә генә түгел, киләсәк быуындар өсөн дә кәрәк буласаҡ. Шул рәүешле тарих тыуа.



➔ **Йәнлектәр темаһына килгәндә, иң тәүге әҫәрегеҙ ниндәй булды, уны яҙырға этәргән сәбәп барҙыр бит?**

- Ҡыр йәнлектәре, ҡош-ҡорттары менән бала саҡтан ҡыҙыҡһындым. Әле башланғыс синыфтарҙа уҡығанда ҡыш етеп, һыуыҡтар башланыу менән, бер кем әйтеп тормаһа ла, тағараҡтар эшләп ҡуя инем. Уларға йыйылған ҡошсоҡтарҙы тәҙрә аша ҡарап ултырырға яраттым. Ҡантүш (ҡыҙылтүш) турғайҙар айырата оҡшай торғайны. Рәсем дәрестәрендә, ирекле темаға мотлаҡ уларҙы төшөрөр булдым һәм гелән "5"-ле алдым. Урман ҡоштарынан ҡорҙо, ағуналарҙы "үҙ" иттем. Көрт аҫтынан ҡар борхотоп осҡан иҫәпһеҙ-хисапһыҙ ҡорҙарҙы иҫем китеп ҡарап тора торғайным. Үкенескә күрә, ҡор тигәнең хәҙер һирәк-һаяҡ ҡына күренгеләп ҡалһа, ағуна беҙҙең яҡтарҙа бөтөнләй юҡҡа сыҡты.

Ҡуян ифрат күп булды, тоҙаҡ ҡороп, уларҙы эләктергеләй торғайным. Ошоға бәйле бер ваҡиға һаман иҫтән сыҡмай...

Ул көндө ҡуян һуҡмаҡтары буйлап ниндәйҙер эре кейек йөрөгән ине. Тоҙаҡҡа эләккән ҡуянды яртылаш ашаған, ҡалған тоҙаҡтарҙы өҙгөләп бөткән. Бөтә бәләне төлкө иҫәбенә сығарып ҡуйҙым да уның эҙен юллап киттем. Күп тә үтмәнем, теге ерән ята бит ҡарҙа аунап. Ҡысҡырған булдым, әйләнеп ҡараны ла тештәрен шаҡылдатып ырҗайтты. Ҡулымда таяҡтан башҡа ҡорал юҡ. Ташлана ҡалһа, эш харап. Ташланманы. Теләр-теләмәҫ кенә торҙо ла шырлыҡ араһына инеп китте был. Бик күп ваҡыт үткәс кенә төшөндөм: төлкө тигәнем яңғыҙ бүре булған икән. Шулай итеп, нисектер бәләнән ҡотолодом. Ҡуянды ашап алған йыртҡыс туҡ булғандыр, тип уйлайым хәҙер.

7-се синыфта уҡығанымда атайым 20-се калибрлы һыңар көбәк иҫке генә немец мылтығы бүләк иткәндән аҙаҡ кейектәр мөхите менән ихлас аралашыу башланды. Мылтыҡ тотһам да, әҙер ит артынан ҡыуып, үлтереүсе булып йөрөмәнем. Күберәген урман-ҡырҙар гиҙеп, ҡышҡы тәбиғәттә күҙәтеп йөрөр өсөн сыға инем. Һәм ошо күҙәтеүҙәрем тора-бара мауығыуға әйләнде. Йылдар үтеү менән хәтеремә һеңеп ҡалған хәл-ваҡиғалар хәтирә булып, ҡағыҙ биттәренә төшә торҙо. Шулай итеп, әле уҡыусыларым яратып өлгөргән "Һунарсы яҙмалары" серияһы яҙылды. Яҙмаларымдың бер өлөшө "Әсәйгә бүләк"тә, байтағы "Аждаһа эҙенән" йыйынтығында баҫылды.

Тәүге ҡулъяҙмаларымды, шағир Фәрит Хәсәнов кәңәше буйынса, Стәрлетамаҡ ҡалаһында уҙған йәш һәм башлап яҙыусылар семинарына тәҡдим иттем. Өҫтәүенә һуңлап барҙым. Проза секцияһы етәксеһе, билдәле яҙыусы Сабир ағай Шәрипов уҡып сыҡҡас балалар ише ҡыуанды. "Бына бит, арабыҙҙа икенсе Василий Песков йөрөгән! Был беҙҙең өсөн ҙур асыш", - тине ул. Семинар етәксеһе Әмир Әминев та йылы һүҙҙәрен әйтте. Был минең өсөн оло мәртәбә ине. Семинарҙың һөҙөмтәһе булып, "Әсәйгә бүләк" китабы донъя күрҙе. Ә бит: "Куй, ыҙалап йөрөмә, барыбер үткәрмәйҙәр унда", - тип кире ҡайырып маташыусылар ҙа табылды. Дөрөҫ, конкуренция көслө, талаптар үтә ҡаты ине. Иллеләп авторҙың 4-һе генә "Китап"ҡа тәҡдим ителәүе тап ошо хаҡта һөйләй. "Тәүәккәлләгән таш ярған" кеүегерәк килеп сыҡты инде. "Әсәйгә бүләк"тең презентацияһына ул саҡтағы Яҙыусылар берлеге рәйесе Р.Т. Бикбаевтың шәхсән үҙе килеүе күп нәмә тураһында һөйләйҙер.

Оло матбуғатта ("Йәншишмә" гәзите) баҫылған иң тәүге әҫәрҙәрем һеүәндән балыҡ сәлдереүсе шәшке - "Әҙертамаҡ" менән яңғыҙым бесән сапҡанда эргәмдә генә йырлап ултырған бүҙәнә - "Сыбарҡай" булды. Әҙертамаҡтың яҙмышы фажиғәле тамамланды (кемдендер мурҙаһы эсенә инеп кире сыға алмайса тонсоҡто). Бала-бала инде, шуның өсөн яҡын туғанымды юғалтҡандай ҡайғырған булдым. Йәнем әсеп иланым.

➔ **Телдең ярлылана барыуы, йәки һүҙҙәрҙе урынлы ҡулланмауҙары тураһында ла борсоулы фекерҙәр ишетергә тура килә. Бөгөнгө йәш ижадсыларға ниндәй теләктәрегеҙ бар?**

- Телдең ярлылана барыуы, һүҙҙәрҙе урынлы ҡуллана белмәү тураһында фекерҙәр ишетелеп кенә ҡалмай, ә ысынында шулай. Әбйәлил районының "Йәйғор" әҙәби ойошмаһы етәксеһе булараҡ, бындай күренеш менән йыш ҡына осрашырға тура килә. Хатта бәғзе бер тел, әҙәбиәт уҡытыусыларының ҡулъяҙмаларына ла төҙәтмәләр индерергә тура килә. Был бигерәк тә башҡорт телендәге яҙмаларға кәрәккән-кәрәкмәгәнгә урыҫ һүҙҙәре ҡыҫтырып ебәреүгә һәм, айырата, урынһыҙ ҡулланылған йүнһеҙ тавтологик алымдарға ҡағыла. Мин тел белгесе түгел, әммә ижадыбыҙҙы, телебеҙҙе биҙәмәгән йәмһеҙ, йәнһеҙ һүҙҙәр ауыл хужалығы белгесенә лә ап-асыҡ күренеп тора.

Тағы ла: тәбиғәтебеҙҙә, унда көн күргән кейек-ҡоштарҙы яҡшылап, ентекләп өйрәнмәйенсә-белмәйенсә ошо хаҡта яҙып маташыусылар күбәйә бара. Мәҫәлән, "ғаиләнен" һаҡлап йөрөгән ата айыу, ҡыҙыл көҙлә ҡуян һ.б. тураһында уҡырға тура килде. Тәүгеһендә ата айыуҙың бар вазифаһы инәһе менән бер тапҡыр ғына осрашыуға ҡайтып ҡалһа (ата айыу үҙенән булмаған көсөктәрҙе тотоп ашауҙан да баш тартмай), икенсеһендә авторҙың йорт ҡуянынан башҡаһын күргәне юҡ икәнлеге ярылып ята. Ә инде билдәле натуралист К.Ф. Йыһаншиндың "Возвращение росомахи" повесын башҡортсаға ауҙарыусының эшен бөтөнләй аңларлыҡ түгел. Шундай матур әҫәр боҙолоп юҡҡа сыҡҡан, тинһең дә хата булмаҫ. Тәржемәсе хатта росомаханың башҡорт телендә яңғырашын да әйтә алмаған. Диңгеҙ бөркөтөн (орлан-белохвост) башҡортсаға "арлан" тип ауҙарған һ.б. Росомаханы бер йыллыҡ мәрҙәсә бөткән өләсәйем "ҡоно" тип атай торғайны (ҡоно, тимәк ҡомһоҙ, туймаҫ тамаҡ). Камил ағай повесының тәржемәһен уҡый алдымы икән, уҡыһа ни тигәндер инде...

Һанай китһәң ошолар ише етешһеҙлектәр әҙәбиәтебеҙҙә тулып ята. Уларҙы баҫҡан гәзит-журнал хеҙмәткәрҙәренә иғтибарлыраҡ, талапсанырак булыу кәрәк тигән фекерҙәмен.

Үрҙәгеләрҙән сығып, йәш һәм башлап ҡәләм тибрәтеүселәргә шул теләктәремде еткергем килә: башыңдағын аҡ ҡағыҙға төшөрөр алдынан нимә, кем тураһында яҙырға теләгәнеңде тәүҙә үҙеңә ныҡлап уйларға, төшөнөргә, белмәгәнеңде һорашырға, белешергә, өйрәнергә кәрәк. Бының бер хилафлығын да күрмәйем. Белмәүҙең оята юҡ, белергә теләмәү оят, тиҙәр. Хаҡ һүҙҙәр. Ә белмәйенсә торон башҡаларҙың башын бутау, яңылыштырыу ысынлап та оят ғәмәл. Үҙең белмәгәнде яҙып алдашырға, уйҙырма менән уҡыусының башын бутарға ярамай. Бигерәк тә тәбиғәт тураһында ижад иткәндә. Бушҡамы ни тәбиғәтте өйрәнеүселәрҙе натуралист тиҙәр. Тимәк, был тәңгәлдә уйҙырмаға урын юҡ, яһалмалыҡ булырға тейеш түгел. Ҡырағай мөхит, унда йәшәгән кейектәр тормошон бик яҡшы өйрәнгән һунарсылар, белгестәр күп бит ул беҙҙә. Мәҫәлән, "Шүлгәнташ" ҡурсаулығы белгестәре. Уларға мөрәжәғәт итергә була. Әҫәрҙәрегеҙҙе яҙғанда иғтибарлы, үҙ-үҙегеҙгә талапсан булығыҙ. Аҙаҡ кеше алдында йөҙөгөҙ ҡыҙарып тормаһын өсөн. Бөгөнгө уҡыусы белемле, уҡымышлы, аҙ ғына ялғанды ла тойоп, тотоп ала. Уҡыусыларыбыҙҙы, проза, шиғриәт һөйөүселәребеҙҙе әҙәбиәттән биҙҙермәйек. Ижади уңыштар һеҙгә!

**Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА**
**һорауҙар бирҙе.**

***✓ Рәхәт икән еҙнәйле булыуы. Ә ул миңә, ҡәйнешенә, нисегерәк ҡарай икән? Әллә апайымды ҡулға төшөргәнсе генә шулай йылмандарғамы иҫәбе? Юҡтыр, һис ундайға оҡшамаған Мәхмүт - минең буласаҡ еҙнәйем.***



Иҙрис МӨҘӘРИС-НОҒМАНОВ

# БЕҘҘӘ ЛӘ ТУЙ

Хикәйә-хәтирә

Миңә үткән көҙ биш йәш тулды. Ҙурайып барам инде. Өр-яңы йылдың иң беренсе көнөндә йылы кейенеп тышҡа сыҡтым. Урам ғәҙәти булмағанса шау-гөр килә ине. Көтмәгәндә кемдер һөрән һалды:

- Һебә килә! Һебә-ә! Китегеҙ юлдан!

Юлға яҡын торғандар барыһы бер булып ситкә һибелде. Мин шунда ғына үрге остан беҙгә ҡарай йән аямай сабышып килгән ылауҙарҙы шәйләнем. Ахыр сиккә етеп ярһыған арғымаҡтарҙың тояҡтары ергә теймәй кеүек, арттарынан өйөрмә күтәрелә, өлпәрәм ҡар саң-томан ише борхоп ҡала. Шаңҡытҡыс тамашанан мине ҡурҡыу солғап алды: берәйһе сананан яңылыш йығылып ҡалмағайы. Туй үткәрәм тип имгәнеп-фәлән ҡуйыуы бар. Әммә бер кем дә йығылманы ла, имгәнмәне лә. Тәртә менән дуғаларында сәскәле тауарҙар елберләгән ылауҙар шарран асыҡ ҡапҡалы ихатаға инеп юғалғас ҡына иркен тын алдым. Башымдан: "Их, шулар ише арғымаҡтарҙа бер сабып уҙаһы ине!" - тигән уй үтте. Әлеге уй теләк кеүек ҡабул ителде, ахыры...

Өләсәйемдең ишек алдында уйнап йөрөгәнемдә сана табандарын күңелле йырлата-йырлата ҡапҡабыҙ алдына егеүле ат килеп туҡтаны. Мин таҡта ярығынан йәһәт кенә урамға ҡарай һалдым. Берәй нәмә үтеп барһамы, йәиһә тауыш ишетелеп ҡалһамы, гелән шулай итәм. Ярай әле олатайымдан ҡалған иҫке ҡапҡабыҙҙың ярыҡтары күп.

Ығып бөткән терәкле, ябай эш санаһына күпертеп һалынған мул ғына бесән өҫтөндә икәү күренә. Аттың башы ҡапҡаға килеп терәлгәс:

- Тр-р, Ҡара ҡашҡа! - тине лә уларҙың береһе, еңел генә ҡуҙғалып, ергә төштө, толобон сисеп санаға ырғытты. Ҡыҙыҡ, инде туҡталған атҡа ни өсөн "тр-р" тиҙер? Ә-ә, төшөндөм, үҙҙәренең килгәнен белдерер өсөн шулай итә ул. Үҙем дә бит берәйһенә йомошҡа барһам, ихатаға инмәҫ элек йә ҡысҡырып ебәргән булам, йә ниндәйҙер көй һыҙғырам. Шунда уҡ тәҙрәнән хужаның башы күренә. Эте бар икән - ҡаршы сыға, булмаһа - көтөп кенә ултыра. Алдан йәүкә һалып килеүең - яҡшыға ғына. Тауыш-тынһыҙ барып инеп, кешене уңайһыҙ хәлгә ҡалдырыуың бар, юғиһә.

Еңелсә кейемдә ҡалған йәш ағай, йәһәтләп, ҡапҡаны асып ебәреүгә ылау, шағыр-шоғор һыҙланып, ихатаға үтте. Сананан ниҙер һөйләнә-һөйләнә, көр тауышлы ир төштө. Быныһы ауыр тунын сисеп тә тормаҫтан, туйтанлап, миңә ҡаршы атланы.

- Һаумы, улым! Шәп йөрөшмө, фулиган? - тип ҡоласын йәйеп ебәрҙе. Иҫемде йыйып өлгөргәнсе, ике ҡуллап күтәреп үк алды. Бәй, Ишҡол ауылында йәшәгән Ғәле апам икән дә! Танымай ҙа торамсы.

Фулиган, тип ул мине насарлап әйтмәй. Бының үҙ сәбәбе бар. Ул сәбәп былайыраҡ: йәй көндәре апам - Зәбирә инәйемдең ире - беҙгә мотоциклда килә. Ул көндө лә бытырҙап килеп туҡтаны ла, тимер атын тәҙрә алдына һөйәп, өйгә үтте. Мин, әлеге шул тик тормағанлыҡ инде, йомшаҡ ултырғысты самалап ҡарайым, тип матайҙы өҫтөмә ҡолаттым. Ҡыҫылған көйө күпме ятҡанмындыр, күҙ алдарым ҡараңғылана башлағанда төн эсенән Ғәле апамдың һиҫкәндергес тауышынан һушыма килдем:

- Ну, фулиган малай! Кем ҡушты һиңә мотоциклға тейергә, ә? - Яңынан көн тыуып, ҡояш нурҙарына күҙҙәрем сағылып китте. Әлеге хәлдән һуң өс көн аяҡтарыма баҫа алмайынса быуынһыҙ яттым. Ошо арала карауат эргәһенән китешмәгән өләсәйем "Ҡыуығына зарар килмәһә ярар ине", тип хафаланһа, "Нимә бар ине, йә, шул бысраҡ матай эргәһендә?" тип әсәйем орошто. Ярай әле атайым - ир кеше - ҡаты һуғылманы. Ул ғына аңланы мине. Аңланы һәм хәлемә керҙе:

- Шулай абына-һөрөнә, бәрелә-һуғыла, яңылыша-хаталана өйрәнәһең инде, улым, йәшәргә, - тип башымдан һыйпауы булды күҙ йәштәремде көскә тотоп торған быуа йырылды ла китте. Бер талай илағандан һуң нисектер еңел булып ҡалды. Кәрәк сағында күҙ йәштәренә ирек биреү, уларҙы көсләп тыйып тотмауҙың да шифаһы бар икән. Башымдан үткәс үҙем беләм. Өлкәндәр ҙә белмәй түгелдер. Ни өсөн тигәндә, мин илаған саҡта тыйыусы ла, әүрәткән дә кеше булманы.

Ана шул көндән мин "әфисәр" Ғәле апам өсөн "фулиган малай".

- Йә, "фулиган" улым, хәлдәр нисек? Кем бар өйҙә? Ништәп күренмәйҙәр? Өләсәң ҡайҙа? - Апам һорауҙарының береһенә лә яуап ҡайтарырға ирек бирмәйенсә, күңелле шаулап, болдор яғына ыңғайланы. Шөйлә тәрәнәйгән ҡарҙа янбашынан зәғиф уң аяғын ул һөйрәберәк, һылтыҡлап, ауырлыҡ менән атлай. Һуғышта әфисәр булған - капитан. Ауыр яра һөҙөмтәһендә бер аяғы икенсеһенән ҡыҫҡараҡ та булып ҡалған, етмәһә.

- Бөтәһе лә өйҙә, - тинем мин албырғап, - юҡ, өләсәйем өйҙә бер үҙе. Һеҙҙең килгәнде белмәй ултыралыр.

- Белә ул, белә. - Апам быны ышаныслы әйтте. - Мәхмүт, атты туғарып, түбәлек аҫтына бәйҙә. Ҡара уны, мин әйтмәйенсә һуғарма, - тип бойорҙо ла ишеккә инеп юғалды. Мин теге егеттең исеме Мәхмүт икәнлеген белә алдым, унын янына килдем. Ул тәртәләрҙе күтәреп бәйләп маташа ине. Аяҡ аҫтында ҡамасаулап ятмаһындар өсөндөр инде.

- Мәхмүт ағай, ә һин беҙгә кем булаң? - Унын һоро күҙҙәренә текәлдем. Мәхмүт күҙен ҡыҫып йылмайғандай итте:

- Көймәһәң, үҙеңә еҙнәй булмаҡсымын.

Минең "еҙнәй" тигән һүҙҙе ошоғаса ишеткәнем юҡ, унын нисегерәк туған икәнлеген дә әйтә алмайым. Ә йылмайып торған Мәхмүт быны шунда уҡ һиҙеп алды (зирәк икән):

- Фәриҙә апайыңды кәләш итеп алырға килгәйнем, - тип тураһын әйтте. - Өйҙәме апайың?

- Юҡ, ҡасан ҡайтырын да белмәйем... Алыҫта ул.

- Һин белмәһәң, мин беләм, ҡәйнеш, кискә ҡайта ул. - Мәхмүт йәнә серле итеп көләмһөрәне. Был юлы хатта күҙҙәренән нур сәселеп китте. Бына һиңә: ошоғаса белмәгән-күрмәгән берәү оҡшай ҙа башланы түгелме?

Эңер ҡуйырғанда ҡыш башынан ҡайтып күренмәгән Фәриҙә апайым, ысынлап та, килеп инде. Ҡайҙан белде икән был? Мин һоҡланып Мәхмүткә ҡарап алдым. Ул да миңә күҙ һирпеп ҡуйҙы. Шуның менән беҙ бер-беребеҙҙе аңлап та алабыҙ. Рәхәт икән еҙнәйле булыуы. Шәп икән еҙнәй тигәндәре. Ә ул миңә, ҡәйнешенә, нисегерәк ҡарай икән? Әллә апайымды ҡулға төшөргәнсе генә шулай йылмандарғамы иҫәбе? Юҡтыр, һис ундайға оҡшамаған Мәхмүт - минең буласаҡ еҙнәйем.

Йылҡылдағансы йышылған еҙ самауыр артында эсен "йылыта" һалып алған Ғәле апамдың теле асыла төштө. Хәҙер унын күк күкрәгәндәй тауышынан бәләкәй өйөбөҙ һелкенеп тора.

- Шулай, ҡәйнәм, - ти ул урындыҡ ситендә сәй яһап ултырған өләсәйемә, - бына бажа әпкилдем. Үҙемә оҡшағанын һайлап. Көйһәң - көй, көлә икәнең - миңә ҡарап көл. Үҙем димдәнем, үҙем яусылайым. Ҡалғаны, ҡәйнәм, һеҙҙән тора, биғәйбә.

- Ярай инде, кейәү, хәйерлегә булһын, - тип ҡуя өләсәйем, яулыҡ мөйөшө менән ауыҙын баҫа биреп, бер аҙ фекер туплағандай ултырғас. - Ҡыҙ кешенең ни, уаҡытында эйәле-башлы булып ҡалғаны һәйбәт инде унын.

Миңә ҡалһа, был һүҙҙәр апайым менән еҙнәмә фатиха булып яңғырай. Хәйер, бер миңә генә түгел икән, ана, ишек төбөнә инеп баҫҡан Мәхмүттең йөҙө уғата балҡый башланы, ә апам шашынып уҡ китте:

- Һай, хаҡты һөйләйһең! Тураһын әйттең! - тип унын эсенә һыймаған шатлығы тышҡа бәреп сыҡты. Әллә ихлас күңелдән, әллә ярамһаҡланып, ҡәйнәһенең арҡаһынан һөйөп ала. - Алтын бит ул минең ҡәйнәм!

- Ниндәйерәк заттан һуң ул... егет? - Өләсәйем ҡыҙыҡһына ҡуя.

- Алтын-көмөштән тип әйтә алмайым затын, шулай ҙа, хур булмаҫ балдыҙ Мәхмүткә барһа. Шәп егет ул.

Мәхмүт инде был һөйләшеүҙе ишетмәй. Ул тышта эш бөтмәгән һылтауы менән сыға һалып китте. Тәрбиәле лә икән. Бер аҙҙан уны ла мул ғына табынлы сәйгә саҡырҙылар.

Ҡараңғы төшөп, инде күҙ бәйләнә башлағанда, Ғәле апам төпкө өйгә инеп боҫҡан Фәриҙә апайым менән Мәхмүтте, ай-вайҙарына ҡарамай, этә-төртә тигәндәй, сығарып ебәрҙе.

- Һәйбәттәп һөйҙәшһендәр, - тине, тегеләр артынан ишек ябылғас, - һөйҙәшеп-килешеп йәшәүгә ни етә! Дөрөҫ әйттемме, ҡәйнәм?

- Раҫ әйтәһең, кейәү, шыпа томана килеш йәрәшкәнсе, былай аҙ-маҙ булһа ла берен-бере белерҙәр, - Өләсәйем кейәүен ҡәнәғәт йөпләп ҡуйҙы.

Тыштағылар минең өсөн дә ҡыҙыҡһыныу уята: нимә тип һөйләшәләр икән? Шуны һәләк белгем килә. Тик улар янына сығырға һылтауы кәрәк. Түрбашта ҡашығаяҡ шалтыратып, аш-һыу менән булашҡан өләсәйем тирәһендә бутала башланым. Юрый ғына. Үҙе әйтмәксе - оронсоҡ яһайым. Хәйләмде һиҙмәй буламы инде өләсәйем, әлбиттә, һиҙҙе. Эйелә биреп ҡолағыма ғына:

- Бар, ана, апайыңдар ни серләшә икән, иплән кенә тыңдап тор, - тип шыбырланы. Нәҡ ошоно көткән мин, көпөмдө кейеп тә тормаҫтан, арҡама ғына ябып, тышҡа, тегеләр янына атылдым. Байтаҡ тороп, күҙ ҡараңғыға күнеккәс кенә шәйләнем: апайым лапаҫҡа күтәрелә торған баҫҡыс баҫмаһына менеп ҡунаҡлаған, Мәхмүт унын йәнәшәһенә, ҡоймаға һөйәлгән. Өйҙә саҡта әллә кем булып батырайһам да, әле килеп баҙап ҡалдым, яҡын барырға тартынып, ситтән генә тауыштарға ҡолаҡ һалып тора башланым. Ситтәрҙең серләшкәнен йәшерен тыңлап тороуы ярамаған эш икәнлеген беләм, әммә былар ситме? Миңә теге икәүҙең айырым һүҙҙәре, апайымдың сырҡ-сырҡ көлгәне генә ишетелеп ҡала, һөйләшеүҙәренең мәғәнәһенә төшөнөрлөк түгел, тимәк, яҙығы ла юҡ. Үҙемде үҙем шулай тынысландырып маташам.

Байтаҡ сөкөрләшкәндән һуң, мин инде өшөй башлағанда, Мәхмүт менән апайым инеү яғына ыңғайланылар. Күҙе үткер икән Мәхмүттең, өй мөйөшөндә боҫоп торһам да шәйләп алды.

- Әһә, ҡәйнеш разведкаға сыҡҡан, - тине ул ҡыуанып киткәндәй.

- Булмайыраҡ торһон әле ҡәйнеш. - Апайым ҡаршылашҡан булды. Юрый ғына инде, һиҙеп торам. Юрый икәнлеген белһәм дә күңелемә шик инеп оялай һалды: кире ҡағып ҡуймағайы.

Самаһыҙ эҫеп киткән өйҙә, усаҡ янында, ҡыҙара-бүрткән өләсәйем тәмле еҫтәр бөркөп, боҫорап торған эре-эре ит киҫәктәрен ҡаҙандан оло ҡоштабаҡҡа бушата. Ҡунаҡ саҡырғанда, йәиһә ҙур мәжлескә була ғына шулай мул итеп һала ул итте. Тимәк, беҙҙе алда йә мәжлес, йә мин әлегә белмәгән башҡа байрам көтә. Ошо уйымдан нимәләр эсемде ҡытыҡлай ҙа башланы.

Фәриҙә апайым өләсәйемдең ҡолағына ниҙер шыбыр-шыбыр итте лә сығып китте. Ә еҙнәм (әллә нишләп шул һүҙҙе әйткем килеп тик тораһы) баҙнатһыҙ ғына төпкө бүлмәгә үтмәксе ине, шунда уҡ Ғәле апамдың ҡыжылдаҡ-ҡырыҫ тауышы ишетелде:

- Бажа, һин был яҡҡа үтмәйерәк тор, ситке бүлмәлә генә ултыр.

Кешеләр ҙә ҡыҙыҡ инде: әллә ниндәй мәҙәк ғөрөф-ғәҙәттәр уйлап сығарғандар ҙа үҙҙәре шуларға ышаналар. Ана, апамды ғына ал, уҡытыусы кеше, үҙе бажа ла бажа, тип өҙөлөп тора, үҙе еҙнәмде түргә үткәрмәй. Йәнәһе уға, йәш кейәүгә, беренсе өрлөктән уҙырға ярамай.

Еҙнәм, оло гонаһ ҡылғанмы ни, йәһәт кенә ситке өйгә сыға һалды ла, йомошҡа ингән малай һымаҡ, урындыҡ ситенә терәлде. Ярай әле ошо мәл Сәкинә апайым ҡайтып инде. Ул урындыҡтың төп яғына шаршау тартып, ҡорған ҡорҙо. Еҙнәмде шунда индереп ултырттылар. Миңә үтә ҡыҙыҡ күренде был эш. Башымды тығып шаршау эсенә ҡарағым килә - батырсылығым етмәй. Шул тирәлә ураңғыланып йөрөнөм дә, түҙмәнем, шаршау ситен ҡалҡытып, эскә күҙ ташланым. Мәхмүт, минең буласаҡ еҙнәм, шәм яҡтыһында ниҙер уҡып маташа. Күҙ ҡыры менән мине күрҙе, буғай, бармағы ишара яһаны: кил бында, йәнәһе. Миңә ни, шул ғына кәрәк: йылп итеп шаршау эсенә сумдым.

Мәхмүт, ҡытыҡлап, ҡабырғама төрткән була. Шаярта инде. Аулаҡта оҙаҡ ҡына сер һөйләшеп ултырҙыҡ. Ул мине оҡшатты шикелле, усымды тултырып, зыңлап торған көмөш тәңкәләр йомдорҙо. Ысынлап та шәп икән еҙнәйле булыуы! Әллә нисә киноға етерлек бит миңә был байлыҡ! Хатта дуҫыма ла биреп торорға була. Үтескә.

**(Дауамы бар).**

ИНТЕРНЕТТАН

# СӘТЛӘҮЕК АША!

■ Сәтләүектәр ярҙамында стрестың кире тәьҫирен түбәнәйтергә була. Бының өсөн көн һайын бер ус фисташка ашағыҙ. Бындай һығымтаға АҠШ-тың Пенсильвания университеты ғалимдары килгән. Тикшеренеүҙәр өсөн дислипидемия менән ауырыған 28 кеше сағылырған. Уларҙы ике төркөмгә бүлгәндәр, ике аҙна дауамында тәүге төркөм ғәҙәттәгесә туҡланған. Икенсе төркөмгә антиоксиданттарға бай булған фисташка сәтләүеге лә ингән махсус диета тәҡдим ителгән. Һөҙөмтәләр күрһәтеүенсә, икенсе төркөмдә ҡан баҫымы күрһәткесе яҡшырған һәм стресс кимәле түбәнәйгән.

■ Әгәр ҙә ризыҡты бәләкәй генә киҫәктәргә бүлгеләһәң, ауырлығыңды контролдә тотоу еңелерәк, тип иҫәпләй Аризона университеты ғалимдары. Алдығыҙҙа юғары калориялы бәлеш киҫәге ята икән, уны тағы ла күп өлөштәргә бүлгеләгеҙ һәм күп итеп ашағы килеү теләге шунда уҡ һүрелəсәк. Ғалимдарҙы был ҡыҙыҡлы феномен тураһында уйланырға йәнлектәр этәрә. Мәҫәлән, 1989 йылда ғалимдар ҡомаҡтар менән лабиринтта тәжрибә үткәрә. Улар өсөн аҙыҡты ике өлөшкә бүләләр, лабиринттың бер осона 300 грамлыҡ аҙыҡ, икенсе осонда 75 грамлыҡ 4 өлөш аҙыҡ һалына. Кимереүселәр вағыраҡ аҙыҡҡа өҫтөнлөк бирә, ситлектә лә улар гранулалы ризыкты йышыраҡ ашай һәм шул уҡ ваҡытта дөйөм ҡулланылған ризыҡ күләме сағыштырмаса аҙ була. Ошо һәм башҡа тикшеренеүҙәргә таянып, Аризона психологтары был ҡағиҙәнең башҡа тере организмдар, шул иҫәптән, кеше өсөн дә дөйөм булыуын фаразлай. Шуға ла тәжрибә өсөн студенттар сағырыла. Уларҙың һәр береһенә тотош йәки дүрт өлөшкә бүленгән керәндил бирәләр. 20 минуттан һуң булған төшкө аш ваҡытында керәндиле дүрт өлөшкә бүленгән студент аҙыраҡ ашай. Ә ҡалғандар үҙҙәренең аппетитын контролдә тота алмай.

■ Әгәр ҙә кешенең ултырып үткәргән ваҡытын өс сәғәткә ҡыҫҡартһаң, уның ғүмерен аҙ тигәндә ике йылға оҙайтып була, тип белдерә British Medical Journal баҫмаһы. Ғалимдар сәләмәтлек һәм аҙыҡ ҡулланыу милли отчеттарын һәм төрлө мәғлүмәттәрҙе, шул иҫәптән ултыраҡ тормош алып барыу һәм үлем тураһындағы мәғлүмәттәрҙе туплаған фәнни хеҙмәттәрҙе өйрәнеп, сәләмәтлеккә хәүеф килтереүсе шартлы кодекс уйлап тапҡан. Уның буйынса, аҙ хәрәкәтләнеү һәм ултыраҡ тормош алып барыу сәбәпле үлем индексы 27 процентты тәшкил итһән. Ғалимдар төҙөгән ғүмер оҙайлығы графигына ярашлы, телевизор йәки компьютер алданда өс сәғәттән күп ултырмаған кешеләр уртаса 1,3-2 йылға оҙағыраҡ йәшәй, тимәк, физик әүҙемлек - оҙон һәм сәләмәт ғүмерҙең нигеҙе.

■ Ворвик университеты ғалимдары ер еләгенең тағы бер файҙалы яғын асыҡлаған. Баҡтиһәң, был тәмле емеш йөрәккә һәм ҡан тамырҙарын һаҡлауҫы үҙенсәлекле аҡһымды әүҙемләштереү һәләтенә эйә икән. Nrf2 аҡһымы организмдың антиоксидант әүҙемлеген көсәйтә. Ул кұҙәнәктәрҙе зарарланыуҙан һаҡлай, ҡандағы йөрәк эшмәкәрлегенә насар тәьҫир итеүсе липид һәм холестерин кимәлен түбәнәйтә. Ер еләге шулай уҡ глюкоза менән "насар" холестеринды кәметә, тимәк, диабет һәм йөрәк ауырыуҙарын булдырмай.

ЙӘНӘШӘБЕҘҘӘ...

# АҒИНӘЙҘӘРҘЕҢ АҠ НУРЫНДА



**Күңел йылылығы менән үҙенә тартып торған Гөлсирә Ғәкил ҡыҙын Учалы районында белмәгән кеше юҡтыр ҙа. Бик күп быуын балаларының беренсе уҡытыусыһы булһа, икенселәренә ауыл советы етәксеһе, кемгәләр яҡын туған, изге күңелле кәңәшсе, йәмәғәт эштәрен йөкмәгән абруйлы ауылдаш, хөрмәтле Ағинәйҙәр ҡоро етәксеһе булараҡ та танылған шәхес.**

Аҡыллы һүҙе, эске күңел йылылығы менән үҙенә тартып торған оло йәштәге ил инәһенең башҡарған эштәрен һанап та бөтөрлөк түгел. Абруйлы уҡытыусылар династияһын лайыҡлы дауам итеп, 40 йылдан ашыу нисәмә быуын балаларына белем биреүе менән хөрмәт ҡаҙанған ветеран уҡытыусы бөгөн дә алғы сафта, үҙенең әүҙемлеге менән башҡаларға өлгө булып та тора. Тормош иптәше Рәсүл Аллабирҙе улы менән өс балаға тәрбиә биреп, бәхетле өләсәй-олатай булып көн иткән йорт та Көсөк ауылында "Өлгөлө йорт" исемен юҡҡа ғына йөрөтмәй. "Ауылым уңғандары" республика конкурсында Гран-приға лайыҡ булған Ғариповтар йорто ысын мәғәнәһендә эшһөйәрлек үрнәге булып тора. Яҙын сәскәләргә күмелгән ихатала тынғыһыҙ хужаларҙың бар булмышы сағыла: ауылға нур сәсеп, күңел йылылығын ихлас бүлешеп көн иткән йорт үҙенә тартып, балҡып тора.

Ауылдың күркәмлеген арттырып, манараһы нур сәсеп, төҙәлеп бөтөп килгән яңы мәсет Рәсүл Аллабирҙе улының тыуған йорто. Ғаилә менән кәңәш ҡороп, Көсөк ауылында ла иман йортон булдырыу өсөн төп йортто мәсет өсөн яңынан тергеҙә Ғариповтар. Балалары менән бергә тынғыһыҙ хужалар күркәм иман йортон эшләп бөтөрөүгә бөтә көстәрен бирә, ауыл халҡы ла, ҡулдан килгәнсә, һәр кем үҙ өлөшөн индерергә тырыша. Иман барҙа - әҙәп бар, тип юҡҡа ғына әйтелмәгәндер. Рухи ҡиммәттәрҙең баһаһын белеп, күңел түрендә иманды үҙ иткәндәр көн итә Көсөк ауылында.

Гөлсирә Ғәкил ҡыҙы етәкләгән Көсөк ауылы Ағинәйҙәр ҡоро ағзалары - улар ысын мәғәнәһендә ауылдың ағинәйҙәре. Ауылдың көндәлек йәшәйешендә уларҙың башҡарған эштәре ауылдаштары менән тығыҙ аралашып, ҡәҙимге тормошта ҡайнап йәшәүҙәре менән ҡиммәтле. Ауылға йәш килен төшөргәндәме, егеттәр ил һағына киткәндәме, кире ҡылыҡтары менән донъя биҙҙереп яңылышҡандармы, ауылдағы әҙәп, иплелек, таҙалыҡмы - барыһына ла өлгөрә тынғыһыҙ ағинәйҙәр. Абруй ҡаҙанған ағинәйҙәр һүҙе лә ауылда үтемле, уларға барыһы ла оло хөрмәт менән баға.

Тамырҙарын барлап, бөгөнгөһөнә хөрмәт менән ҡарағандарҙың ғына киләсәге яҡты, өмөтлө, тиҙәр. Был йәһәттән ағинәйҙәрҙең бигерәк тә тыуған ере өсөн ҡорбан булған батырҙар хаҡында хәтирәләрҙе йәш быуын күңеленә еткереү, оло шәхестәребеҙ өлгөһөндә үҫтереү, бөгөнгө йәш быуында рухи ҡиммәттәргә хөрмәт тәрбиәләү йүнәлешендәге эштәре баһалап бөткөһөҙ. Улар Көсөк ауылында данлыҡлы яҡташыбыҙ Муса Лут улы Мортазиндың йорт музейында ойошторолған барлыҡ сараларҙы мауыҡтырғыс, тәрән йөкмәткеле, ҡатнашыусыларҙың береһен дә битараф ҡалдырмаҫлыҡ итеп үткәрә белә. Башҡорт халҡының арҙаҡлы улы, комбриг Мортазин ғаиләһенең яҙмышы хаҡында улар көйләгән бәйет юлдары һәр кемдең күңеленә үтеп, шанлы йылдарға алып китә.

Үҙ шәхестәрен ҙурлаған халыҡ ҡына оло хөрмәткә лайыҡ. Әлбиттә, баһалап бөткөһөҙ эш алып барған ағинәйҙәр үҙҙәре лә, ошо халыҡ вәкилдәре булараҡ, оло хөрмәткә лайыҡ. Ниндәйҙер дан өсөн, йәки хаҡ өсөн түгел улар башҡарған эштәр, күңел талабы, йөрәк ҡушыуы буйынса барыһы ла һәм ҡиммәте киләсәк быуындар алдында баһалап бөткөһөҙ. Ҡуптән түгел Башҡортостан Республикаһы Мәғарифты үҫтереү институтының ресурс үҙәге хеҙмәткәрҙәре "Туған тел илселәре" акцияһы сиктәрендә халҡыбыҙҙың арҙаҡлы шәхестәре, батыр улдары хаҡында мәғлүмәтте киңерәк таратыу маҡсатында виртуаль музей булдырыу өсөн Көсөк ауылының Муса Мортазин музейында уның яҙмышы хаҡында фильм төшөрҙө. Фильм өсөн материалдар әҙерләүгә, ойоштороу эшенә лә Гөлсирә Ғәкил ҡыҙы һәр ваҡыттағыса ижади һәләте менән күп көсөн бирҙе. Ағинәйҙәре менән берҙәм булып күркәм сығыш яһанылар. Виртуаль музейға сәйәхәт итеп, башҡорт халҡының данлы улы Мортазин хаҡында мәғлүмәт алыу өсөн төшөрөлгән фильмдың йөкмәткеһен батырҙың туғандары сығышы, Озерный урта мәктәбе уҡыусылары, журналист, ҡаһарман ил батыры хаҡындағы "Муса Мортазин - халҡымдың улы" китабы авторы Рәүеф Шәһиевтың сығыштары ла байытты.

**Күңелдәрендәге яҡшылыҡ нурҙарын иман нуры аша тирә-яҡҡа йомарт өләшкән пак күңелле, уңғанлығы менән республикала дан алған, хеҙмәтенә күрә хөрмәтен күреп, изгелек орлоктары һибеп йәшәгән Гөлсирә Ғәкил ҡыҙы һәм Рәсүл Аллабирҙе улы рухи ҡиммәттәрҙең ни тиклем баһалы икәнен иҫбат итеп көн итә. Кешелеклелек нуры ағинәйҙәр һүҙе аша күркәм ғаиләләр өлгөһө булып тирә-йүнгә тарала икән, ошондайябай кешеләрҙең оло хеҙмәте менән рухи ҡиммәттәрҙең мәңгелек икәнен тормош үҙе уҡ күрһәтеп тора.**

**Зилә ШӘРӘФЕТДИНОВА,**
**Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы.**
**Учалы районы.**

УҠЫУСЫНАН - ХАТ

# ИНӘЙЕМДЕҢ ҺҮҘЕ - АҠЫЛДЫҢ ҮҘЕ

**1998 йылдың февраль айы. Мин күршелә генә йәшәгән Разия инәйемә хәл белергә ингәнмен. Бер саҡ инәйем миңә: "Ҡыҙым, әйҙә, яҙ, һаҡлаһаң, һин генә һаҡларһың", - тип ейәнсәре Рәлиәнән дәфтәр, ручка алдырып, мәҡәл-әйтем, бәйеттәрен яҙыра ла башлаға. Яҙып ҡына өлгөр! Мәктәптә уҡыған сағымда унан ауылдың ер-һыу атамалары тарихын яҙып ала инем. Студент йылдарында ла был ҡомартҡының кәрәге тейҙе.**

Разия Йыһаншина 1922 йылда Хәйбулла районының Иҫәнгилде ауылында Зәйнәп һәм Низамитдин Иҫәнгилдиндар ғаиләһендә ағаһы Ҡыямитдиндан һуң тәүге ҡыҙ бала булып донъяға килә. Өләсәйем Зәйнәп (ҡәртәсәйемдең дә әсәһе): "Разия ҡаты йот йылында тыуҙы, шуға ла бәхете булманы. Бигерәк сос, зирәк булды", - тип әйтер булған. Ысынлап та тормош уны бик күп һынай. Бала сағы аслыҡ йылдарына тура килеп, ауыр колхозлашыу осорон, Бөйөк Ватан һуғышы михнәттәрен үҙ иңендә татый. Утыҙ туғыҙ йәшендә биш балаһы менән тол ҡала, кинйәһе иһә өс кенә көнлөк була. Бала юғалтыу ҡайғыһын да кисерә. Ауырлыҡтарға сыныҡҡан тыл ветераны балаларын етем итмәй, атай ҙа, әсәй ҙә урынында ҡалып, кешеләргә мейесен дә сығара, балаҫын да, тиҙәген дә һуға, кейеҙен дә баҫа, утынын да яра. Ҡыҙҙарына ғына түгел, ейәнсәрҙәренә бирнә итеп ҡорама юрған, түшәктәр эшләй. Шул уҡ ваҡытта намаҙ, ураҙаһын да ҡалдырмай. Кәртә тултырып мал, ҡош-ҡорт аҫрай. Бына шундай тынғыһыҙ, эш тип янып-көйөп йәшәгән кеше 2000 йылдың апрелендә баҡыйлыҡҡа күсте.

**Разия Низамитдин ҡыҙының күңел түренән сыҡҡан халыҡ ижады өлгөләренең бер аҙын гәзит уҡыусыларға ла тәҡдим итергә булдым:**

- Ололарҙы ҡәҙер итһәң, үҙең ҡәҙер табырһың.
- Фатихалы ҡул арымаҫ, фатихаһыҙ ҡул йөрөмәҫ.
- Алтын алма, доға ал, доға алтын булалмаҫ.
- Апһын-әзе татыу булһа, аш етер.
- Ҡайғың күп булһа - ашың күп булһын.
- Йылы-йылы һөйләһәң, йылан өңөнән сыға, ҡаты-ҡаты һөйләһәң, мосолман диненән сыға.
- Етем ҡатындың тышы хуп булһа ла эсе ут.
- Бишек ҡайҙа - ел унда, етем ҡайҙа - һүҙ шунда.

**Розалия ТЕҮӘЛБАЕВА.**
**Сибай ҡалаһы.**

*ИҪКӘРТӘБЕҘ!*

# ҺАМАН ШАША...

## сысҡандар һәм...



Республикала сысҡан биҙгәге (ГЛПС) менән сирләү осрағы 8,5 тапҡырға артҡан. Бөгөнгә Башҡортостандағы геморрагик биҙгәк сығанаҡтары донъялағы иң ҙур һәм әүҙем тип һанала. Был вирусты төп таратыусы - ҡыр сысҡанының (рыжая полевка) күп булыуына бәйле.

Йылдың тәүге 7 айында муниципалитеттарҙың күпселегендә 720 сирләү осрағы теркәлгән. 7 административ территорияла, шул иҫәптән Өфөлә уртаса республика күрһәткесе - ике, былтырғы менән сағыштырғанда 8,5 тапҡырға артҡан. Йышыраҡ эшселәр, уҡыусылар, студенттар, ауыл хужалығы сәнәғәте комплексы эшселәре ауырый, бигерәк тә ихә көнкүрештә (64,2 процент), урманда (25 процент) зарарланыу осрағы артҡан.

Белгестәр билдәләүенсә, "Бөгөнгә сысҡан биҙгәгенә ҡаршы вакцина юҡ, шуға күрә төп һаҡланыу сараһы - санитар-гигиена саралары үткәреү, үләнде сабыу, ҡаты көнкүреш ҡалдыҡтарын ваҡытында утилләштереү, сүп-сар өйөмдәрен бөтөрөү, шулай уҡ сысҡандарҙың торлаҡҡа үтеп инеүенә юл ҡуймау. Асыҡ территорияларҙа дератизация үткәреү кәрәк. Бөгөн - ул тотош Башҡортостан территорияһы. Эпизоотологик фараз имен түгел, яҙғыһын кимереүселәр әүҙем үрсене, дератизация етерлек кимәлдә үткәрелмәне, ике йыл тажзәхмәт ҡоторған осорҙа медиктарҙың һәм халыҡтың сысҡан биҙгәгенә иғтибары кәмене. Беҙ сирҙең тәбиғи сығанаҡтарын бөтөрә алмайбыҙ, әммә хәлебеҙҙән килгән барлыҡ сараларҙы ҡулланып, уның таралыуын туҡтата алабыҙ".

## ...талпандар

Ете айҙа Башҡортостанда 9428 кеше медицина учреждениеларына талпан ҡаҙалыуына зарланып мөрәжәғәт итә, был күп йыллыҡ күрһәткестәрҙән 9,8 процентҡа күберәк.

Бөгөнгә республика территорияһында акарицид эшкәртеү үткәрелә, барлығы 4184,6 гектар, шул иҫәптән 1809,1 гектар - балаларҙың ял һәм сәләмәтлектәрен нығытыу урындары - эшкәртелгән.

Роспотребнадзорҙа белдереүҙәренсә, талпан энцефалиты вирусына ҡаршы иң һөҙөмтәле һаҡланыу - вакцина. Халыҡты иммунизациялау кампанияһы йыл башынан алып дауам итә һәм барлығы 30 меңдән ашыу кеше (пландың 86 проценты) прививка эшләткән. "Айҙар буйынса талпандың әүҙемлеге төрлөсә, күп йыллыҡ тәжрибә күрһәтеүенсә, августың икенсе декадаһында уларҙың әүҙемлегенең икенсе тулҡыны күҙәтелә. Шуға бәйле хужалыҡ-көнкүреш сәбәптәре йәки ял итеү өсөн урманға барғанда хәүефһеҙлек саралары тураһында оноторға ярамай. Талпан ҡаҙалмаһын өсөн даими рәүештә үҙеңде йәки бер-беренде тикшереп торорға, тәнде ҡаплаған кейем кейергә, шулай уҡ талпандан һаҡлаусы махсус химик саралар ҡулланырға кәрәк", - тип иҫкәртә Роспотребнадзорҙың төбәк идаралығы.

**Эдуард ҠУСҠАРБӘКОВ.**

*БЫЛ - ҠЫҘЫҠ!*

# ИҢ ЙӘШ УЙЛАП ТАБЫУСЫЛАР



**Балалар донъяны үҙҙәренсә аса һәм уға үҙҙәренең яңылыҡтарын индерә. Күп балалар өлкәндәргә ҡарағанда зирәклеге, уйлап эш итеүе менән ғәжәпкә ҡалдыра. Нимәнелер уйлап сығарыу һәләте, фекерҙәренең ҡалыплашып, ҡатып ҡалмауы бала кешене асыштарға алып килә, тормошобоҙҙо яҡшыртыуға, камиллаштырыуға хеҙмәт итә. Күптәр файҙалана уларҙың асышы менән, бала кеше уйлап тапҡан икән, тигән уй хатта башҡа ла килмәй. Ҡайһы берҙәре менән таныштырыу бөгөн маҡсатыбыҙ. Бәлки, беҙҙән арала ла йәмғиәт үҫешен яҡшыртыуға өлөш индереүсе шундай балалар йәшәп ятаһыр?**

### Иң йәш миллиардер

Остен Рассел - Америка Ҡушма Штаттарының иң йәш миллиардеры. Forbes тикшереүенсә, ул үҙаллы табыш эшләгән ун бай кеше исемлегенә индерелгән.

Буласаҡ эшҡыуар ярлы ғаиләлә донъяға килә. Остенға атаһы хатта телефон һатып ала алмай, шуға күрә алтынсы класта уҡып йөрөгән сағында ул үҙенә телефон эшләп алырға уйлай. Бәхетенә, Остендың уйын консоле була, баш вата торғас, уйынсығынан телефон этмәләй. Тәүге уңышынан ҡыуанған малай йәнә лә йорт эштәрен еңеләштерерлек ҡулайлама уйлап сығармаҡсы була, һәм бер йылдан Остен һыу таҙартыу системаһын уйлап таба. Ун өс йәшендә үҙенең асышын патентлай. Үҙе яһаған асыштарҙан мул ғына килем алып булғанын аңлаған үҫмер ун биш йәшендә тубыҡҡа һалып эшләй торған голографик клавиатура уйлап сығара. Ун ете йәшендә Рассел бурысҡа 100 000 доллар алып тора һәм пилотһыҙ автомобилдәргә датчиктар етештереү компанияһын аса. Бөгөн ул иң үтемле тауар. Алда әйткәнебеҙсә, Остен Рассел тиҙ арала Америка Ҡушма Штаттарында иң йәш миллиардер булып китә.

### Иң йәш осоусы

Биш йәшлек Ҡытай малайы Хэ Ид Гиннестың рекордтар китабына иң йәш осоусы булараҡ индерелгән. Был ҡыйыу бала самолет менән идара итеп, Пекиндағы тәбиғәт ҡурсаулығы өҫтөнән осоп йөрөй һәм тимер осҡосто уҙаллы ергә төшөрөп ултырта. Дөрөҫ, эргәһендәге креслола инструктор ҙа була, ләкин ул осоусының эшенә ҡыҫылмай, бары күҙәтеп кенә ултыра, малай үҙе лә унан ярҙам һорамай. Шулай итеп, Хэ Ид 35 минут буйы үҙаллы осоусы ролен үтәй. Ҡайҙан биш йәшлек балала бындай оҫталыҡ, тип һорауҫылар булыр. Эш шунда, пилот оҫталығына уны атаһы өйрәтә. Өлкән Идты Ҡытайҙа микроблогер булараҡ яҡшы беләләр, ул шулай уҡ талапсан булыуы менән дә айырылып тора. Шуға ла Хэ Идҡа осоусы һөнәрен үҙләштерер өсөн көн һайын иртәнге бишенсе яртыла торорға, ҡышҡыһын ун өс градус һыуыҡта йүгерергә тура килә. Сертификат алыр өсөн биш йәшлек малай математиканы ла өйрәнә. Бынан тыш, ул Фудзияма тауына ла үрләп, тейешле бейеклекте яуларға өлгәшә. Йәнә лә Хэ Ид яхтаны яҡшы йөрөтөүселәр иҫәбенә индерелгән.

### Оҫта футболсы

Голландияның "Венло" футбол клубы 18 айлыҡ ҡына Берке ван дер Мейем менән контракт төҙөй. 10 йылға төҙөлгән килешеү баланың тыуған көнөнә иң шәп бүләк түгелме ни?

Тарих шулай башлана. Уйынсыҡтар һалынған ҡумтаға футбол тубы тибеп индергән сабыйҙың видеоһын Youtube каналында бер миллиондан ашыу кеше ҡарай. Быға "Венло" етәкселеге лә иғтибар итмәй ҡалмай. Сабый ғына көйөнсә тәү типкәндән үк маҡсатҡа өлгәшеүе клуб вәкилдәрен хайран ҡалдыра. Бына ошо хәлдән һуң, ике йәше лә тулмаған оҫта футболсы менән контракт төҙөлә лә инде.

### Уға биш йәш

Донъялағы иң йәш археологҡа биш йәш. Эмили Болдриҙы биш йәшендә ер аҫты серҙәрен өйрәнеүселәр, археологтар үҙҙәре менән ҡаҙылма эштәренә алалар. Һәм ҡыҙыҡай 160 миллион йыл элек йәшәгән, инде ташҡа әйләнгән һөйәк ҡалдыҡтарын ҡаҙып сығара.

Ул тапҡан ҡускар Юр дәүерендә океан төбөндә йәшәгән. Археологтар етәксеһе Невилл Холлингворт: "Был аммонит, археологтар өсөн ҙур табыш булды, сөнки ул бик һирәк осрай. Әлегә тиклем бындай ҡусҡарҙың айырым өлөштәрен генә таба торғайныҡ, Эмили тапҡан организм беҙгә шул дәүерҙе яҡшыраҡ өйрәнергә, күп һорауҙарға асыҡлыҡ индерергә ярҙам итте", тип белдерә. Эмили Болдри иһә археологтарҙың ҡаҙыныу эштәрендә әле лә ҡатнаша. "Коллекциямда ташҡа әйләнгән һөлдәләр байтаҡ йыйылды, шуға ла, тикшеренеү эштәрен түҙемһеҙлек менән көтөп алам. Археология - минең яратҡан һөнәрем", ти ғорурлыҡ менән Эмили Болдри.

**(Дауамы бар).**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

### Күҙгә күренмәгән терәк

"Һеҙ - үҙегеҙҙең тәнегеҙ түгел, һеҙ - үҙегеҙҙең тәнегеҙ түгел, һеҙ- үҙегеҙҙең тәнегеҙ түгел..." (Һиндостандан Свами Амараның әйткәненән). Бына бер нисә тиҫтә йыл инде Көнсығыш фекере менән ҡыҙыҡһынам һәм һиндтарҙың уҡыған һәр лекцияһында ошо һүҙҙәрҙең ҡабатланғанын ишетәм.

Әгәр беҙ үҙебеҙҙең тәнебеҙ түгел икән, кем һуң беҙ? Ғүмер буйы беҙ тәнебеҙҙе ашатабыҙ, уны йылыла тотабыҙ, өйҙә һаҡлайбыҙ, енси яҡтан ҡәнәғәтләндерәбеҙ һәм уны ылыҡтырыусан итеп тәрбиәләйбеҙ. Әгәр беҙ үҙебеҙҙең тәнебеҙ түгел икән, нинә уның тураһында шундай хәстәрлек күрәбеҙ һуң?

Тәнде камиллаштырыу тураһындағы китаптарға тотонор алдынан мин торлаҡты камиллаштырыу тураһында күп яҙҙым. Һуңынан - аңды камиллаштырыу тураһында, аҙаҡ ҡына рухи камиллыҡ тураһында яҙыуға күстем. Кеше йәшәгән торлаҡтан кешенең тәненә күсеү тәбиғи ине. Тән - ул беҙҙең йортобоҙ. Ул һеҙ түгел, ә һеҙҙең йортоғоҙ. Кем генә булһағыҙ ҙа, үҙ тәнегеҙҙә үҙегеҙҙе өйҙә кеүек тояһығыҙ.

Аң һәм күңел тураһында фекер йөрөтөп, беҙ һеҙҙең ысынбарлыҡта кем икәнлегегеҙҙе беләбеҙ. Беҙ матди түгел. Беҙ - аң һәм күңел, шуға күрә "Беҙ кем?" тигән һорау бер ни тиклем фекер алышыуҙы талап итә.

Тормошобоҙҙо мөхәббәт, аҡса, ышаныслылыҡ, сәләмәтлек һәм эске торош күҙлегенән ҡарап, беҙ өйөбөҙҙөң нигеҙе - тәнебеҙ тураһында фекер алыштыҡ. Был нигеҙ беҙҙең күҙгә күренеп торған терәкте тәшкил итә. Был бик мөһим, әммә беҙҙең ысын "мин"ебеҙҙе тотоп торған нигеҙҙәр мөһимерәк. Һәм был нигеҙ - күҙгә күренмәҫ терәк.

### Көнбайыш һәм Көнсығыш: матдилыҡ рухиәткә ҡаршы

Ер ике ҡотобо булған ҙур компас кеүек. Көнбайыш менән Көнсығыш араһында, ысынлап та, ниндәйҙер полярлыҡ бар. Ул мейенең уң һәм һул ярымшарҙарына оҡшаш. Уларҙың береһе матдилеккә, икенсеһе хистәргә, идеяларға, интуицияға, ижади һәләткә йүнәлеш алған.

Ҡитғаның Көнбайыш ярымшарында Ҡушма Штаттар алдынғы урынды биләй, цивилизация матди үҫештең иң бейек нөктәһендә тора. Көнсығыш ярымшарҙа төп урынды Һиндостан биләй. Унда рухи донъя менән бәйләнеш шундай кимәлгә еткән, һул яҡ ярымшар менән фекерләүселәр Көнсығыш ғалимдарын "мистик"тар тип атай.

Шундай мистиктарҙың береһе булып Свами Амара тора. Һиндостанда "Свами" - маҡтаулы исем, "амара" - үлемһеҙ тигәнде аңлата. Свамиҙар оккульт ғөрөф-ғәҙәттәр өлкәһендәге белемдәре һәм Көнбайыштың матдилыҡҡа йүнәлеш алған халҡына мөғжизә һәм серлелек тойорға ярҙам итеүсе ғәмәлгә эйә. Әммә һеҙ быға икенсе төрлө ҡараясаҡһығыҙ, сөнки әҙерлек үттегеҙ, мейегеҙҙең уң яҡ ярымшары менән файҙаланырға өйрәндегеҙ һәм ижад донъяһына яҡшыраҡ көйләндегеҙ.

Свами Амара XIX быуат һуңында йәшәгән бөйөк аҡыл эйәһе Рамакришнаның уҡыусыһы була. Свами Амара үҙе бер нисә көн ҡәбергә күмелгәндән һуң да тере ҡалыу һәләте менән дан ала. Ул күҙгә күренмәҫ терәк менән нисек файҙаланыуҙы белә лә инде. Алда яҙылған әҙерлекте үткәс, бәлки, үҙегеҙ ҙә "Свами" исеменә лайыҡ булырһығыҙ.

**Роберт СТОУН.**

**(Дауамы бар).**



**12 СЕНТЯБРЯ**
**ПОНЕДЕЛЬНИК**
**РОССИЯ 1**

5.00, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10 "Утро России".
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
21.20 Т/с "Елизавета". [16+]
22.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.00, 2.00 Т/с "Морозова". [16+]
2.50 Т/с "Срочно в номер!" [16+]

**БСТ**

7.00 "Сәләм".
10.00, 16.30 Т/с "Ланцет". [12+]
11.00 Новости недели (на рус.яз).
11.45 Специальный репортаж. [12+]
12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]
13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).
13.30, 1.45 Бәхетнамә. [12+]
14.30 "Бай". [12+]
15.00, 18.15 Интервью. [12+]
15.15 Әлләсе... [12+]
16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).
16.15 "Гора новостей". [6+]
17.30 Автограф. [12+]
18.00 Пофутболим? [12+]
18.45 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Спартак" (Москва). КХЛ.
22.00 Тайм-аут. [12+]
23.00 Күстәнәс. [12+]
23.30 Х/ф "Королева". [12+]
2.30 Спектакль "Последнее море Чингизхана". [12+]
4.15 История одного села. [12+]
4.45 Честно говоря. [12+]

**13 СЕНТЯБРЯ**
**ВТОРНИК**
**РОССИЯ 1**

5.00, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10 "Утро России".
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
21.20 Т/с "Елизавета". [16+]
22.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.00, 2.00 Т/с "Морозова". [16+]
2.50 Т/с "Срочно в номер-2". [16+]

**БСТ**

7.00 "Сәләм".
10.00, 16.30 Т/с "Ланцет". [12+]
11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).
11.15 Республика LIVE #дома. [12+]
11.45 Дознание. [16+]
12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]
13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).
13.30, 2.00 Бәхетнамә. [12+]
14.30 Хазина. [0+]
15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]
15.15 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]
16.15 "Гора новостей". [6+]
17.30 "Криминальный спектр". [16+]
17.45 "Дорога к храму". [0+]
19.00 Вечерний телецентр.
20.00 Полезные новости. [12+]
20.15 "Сәңгелдәк". [0+]
20.45 История одного села. [12+]
21.00 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]
22.00 "Это моя профессия". [12+]
23.00, 4.30 Колесо времени. [12+]
0.00 Х/ф "Каждому свое". [12+]
2.45 Спектакль "Любовь на троих". [12+]

**14 СЕНТЯБРЯ**
**СРЕДА**
**РОССИЯ 1**

5.00, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10 "Утро России".
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
21.20 Т/с "Елизавета". [16+]
22.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.00, 2.00 Т/с "Морозова". [16+]
2.50 Т/с "Срочно в номер-2". [16+]

**БСТ**

7.00 "Сәләм".
10.00, 16.30 Т/с "Ланцет". [12+]
11.00, 16.00, 21.30 Новости (на рус. яз).
11.15 Республика LIVE #дома. [12+]
11.45, 17.30 Д/ф "Археостан". [12+]
12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]
13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).
13.30, 2.00 Бәхетнамә. [12+]
14.30 Тормош. [12+]
15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]
15.15 "МузКәрәҙ". [0+]
15.30 "Апчхи". [0+]
15.45 "Сулпылар". [6+]
16.15 "Гора новостей". [6+]
17.45 Тайм-аут. [12+]
19.00 Вечерний телецентр.
20.00 Полезные новости. [12+]
20.15 "Сәңгелдәк". [0+]
20.45 "Честно говоря". [12+]
22.00 Историческая среда. [12+]
23.00 "Байык" представляет... [12+]
0.00 Т/с "Другая жизнь". [12+]
2.45 Спектакль "Наследство". [12+]
4.30 Әлләсе... [12+]
5.15 История одного села. [12+]
6.30 Новости (на рус. яз). [0+]

**15 СЕНТЯБРЯ**
**ЧЕТВЕРГ**
**РОССИЯ 1**

5.00, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10 "Утро России".
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
21.20 Т/с "Елизавета". [16+]
22.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.00, 2.00 Т/с "Морозова". [16+]
2.50 Т/с "Срочно в номер-2". [16+]

**БСТ**

7.00 "Сәләм".
10.00 Т/с "Ланцет". [12+]
11.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).
11.15 "Честно говоря". [12+]
12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]
13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).
13.30, 2.00 Бәхетнамә. [12+]
14.20 Хоккей. "Адмирал" (Владивосток) - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ.
17.00 "Это моя профессия". [12+]
17.30 "Криминальный спектр". [16+]
17.45 Моя планета Башкортостан. [12+]
18.15, 20.30 Интервью. [12+]
19.00 Вечерний телецентр.
20.00 Полезные новости. [12+]
20.15 "Сәңгелдәк". [0+]
20.45, 23.45, 5.15 История одного села. [12+]
21.00 Башкорттар. [6+]
22.00 Республика LIVE #дома. [12+]
23.00 Ап-асык.
0.00 Х/ф "Клинч". [16+]
2.45 Спектакль "Одолжи мне жеребца". [12+]
4.45 Автограф. [12+]

**16 СЕНТЯБРЯ**
**ПЯТНИЦА**
**РОССИЯ 1**

5.00, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10 "Утро России".
9.00, 14.30, 21.15 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
21.30 Ну-ка, все вместе! [12+]
23.50 Улыбка на ночь. [16+]
0.55 Х/ф "Сухарь". [12+]
4.10 Т/с "Срочно в номер-2". [16+]

**БСТ**

7.00 "Сәләм".
10.00, 16.30 "Легенды космоса". [12+]
11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).
11.15, 21.00 "Йома". [0+]
11.45 Территория женского счастья. [12+]
12.00 Республика LIVE #дома. [12+]
12.30 Үткән гүмер. [12+]
13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).
13.30, 23.00 Автограф. [12+]
14.00 БашГост. [6+]
14.30 Моя планета Башкортостан. [12+]
15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]
15.15 "Алтын тирмә". [12+]
16.15 "Гора новостей". [6+]
17.15 История признания. [12+]
17.30 "Аль-Фатиха". [12+]
18.00 "Курай даны". [12+]
19.00 "Башкорт йыры". [12+]
19.45 Специальный репортаж. [12+]
20.00 Полезные новости. [12+]
20.15 "Сәңгелдәк". [0+]
20.45, 23.30, 5.30 История одного села. [12+]
22.00 БашГост. [12+]
23.45, 3.45 Х/ф "Не пытайтесь понять женщину". [16+]
2.00 Спектакль "Бәндәбикә һәм Ерәнсә Сәсән". [12+]
5.45 "Млечный путь". [12+]

**17 СЕНТЯБРЯ**
**СУББОТА**
**РОССИЯ 1**

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 По секрету всему свету.
9.00 Формула еды. [12+]
9.25 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Доктор Мясников. [12+]
12.35 Т/с "Родительское право". [12+]
18.00 Привет, Андрей! [12+]
21.00 Х/ф "Южный циклон". [16+]
0.55 Х/ф "Девушка с глазами цвета неба". [12+]
4.00 Х/ф "Жена Штирлица". [16+]

**БСТ**

7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]
8.00, 18.30 Новости (на баш. яз).
8.15 Автограф. [12+]
9.00 "Это моя профессия". [12+]
9.30 М/ф "Мультфильмы". [0+]
10.00 "Елкән". [6+]
10.30 "Гора новостей". [6+]
10.45 "КультУра". [6+]
11.00 "МузКәрәҙ". [6+]
11.30 Нык бул. [6+]
11.50 Хоккей. "Адмирал" (Владивосток) - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ.
14.30 Башкорттар. [6+]
15.00 "Дарю песню". [12+]
16.30 Колесо времени. [12+]
17.30 Все песни о прекрасном... [12+]
19.00 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]
19.45 Д/ф "Археостан". [12+]
20.00 Полезные новости. [12+]
20.15 "Сәңгелдәк". [0+]
20.30 "Байык" представляет... [12+]
21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).
22.00 "100 имен Башкортостана". [12+]
22.30, 1.00 Новости недели (на баш. яз).
23.15 Т/с "Клиника". [16+]
1.45 Спектакль "Башкирская свадьба". [12+]
4.00 Әлләсе... [12+]
4.45 "Бай". [12+]
5.15 История одного села. [12+]
5.30 "Млечный путь". [12+]
5.35 Х/ф "Нелегкое счастье". [12+]

**18 СЕНТЯБРЯ**
**ВОСКРЕСЕНЬЕ**
**РОССИЯ 1**

5.35, 3.15 Х/ф "Любовь, которой не было". [12+]
7.15 Устами младенца.
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 Когда все дома с Тимуром Кизяковым.
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00 Вести.
11.30 Большие перемены.
12.35 Т/с "Родительское право". [12+]
18.00 Песни от всей души. [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.30 Х/ф "Шепот". [12+]

**БСТ**

7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]
8.00 Новости (на баш. яз).
8.15 "Йома". [0+]
8.45 "Бай". [12+]
9.15 "Курай даны". [12+]
9.30 Тормош. [12+]
10.00 "Книга сказок". [0+]
10.15 "Городок АЮЯ". [6+]
10.30 "Гора новостей". [6+]
10.45 "Сулпылар". [0+]
11.00 М/с "Нурбостан". [0+]
11.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]
11.30 "Кош юлы. Балалар". [6+]
11.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]
12.30 Новости недели (на баш. яз). [12+]
13.15 "Алтын тирмә". [0+]
14.00 "Дарю песню". [12+]
15.00 "Дорога к храму". [0+]
15.30, 4.30 Историческая среда. [12+]
16.00 Концерт Загира Исянчурина. [12+]
18.15 Спектакль "Счастье". [12+]
20.00 Әлләсе... [12+]
20.45 Дознание. [16+]
21.00, 22.30 Республика LIVE #дома. [12+]
21.30 Новости недели (на рус.яз).
22.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]
23.00, 2.45 Х/ф "Двойная фамилия". [16+]
0.45 Спектакль "Касатка". [12+]
5.00 "Млечный путь". [12+]
6.00 Итоги недели (на рус. яз). [0+]

## СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**14 сентябрь Премьера! "Һинһеҙ килгән яҙҙар"** (З. Ҡадирова), мелодрама. 16+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**13 сентябрь "У ковчега в восемь"** (У. Хуб), ғаилә өсөн спектакль. 12.00 6+
**14 сентябрь "Ғашиҡтар көнө"** (Н. Ғәйетбай), музыкаль комедия. 16+
**15 сентябрь "Чиполлино"** (Дж. Родари), мажара. 11.00 6+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

Башҡорт опера һәм балет театрының Бәләкәй сәхнәһендә:
**17 сентябрь "Приключения доктора Айболита и его друзей"** (К. Чуковский). 12.00, 14.00 0+
**18 сентябрь "Муха-Цокотуха"** (И. Романов). 12.00, 14.00 0+

### А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**13 сентябрь "Өлкән улым"** (А. Вампилов), комедияһы менән Баймаҡ ҡалаһында. 19.00 12+
**14 сентябрь** Белорет ҡалаһында гастролдәр: **"День рождения кота Леопольда"** (А. Хайт, Б. Савельев), әкиәт. 11.00 6+
**"Шахтер"** (Б. Ҡаһарманова), драма. 19.00 12+

## НАМАҨ ВАҠЫТТАРЫ

*1444 һижри йыл.*

| Сентябрь (Сәфәр) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 12 (16) дүшәмбе | 5:14 | 6:44 | 13:30 | 17:34 | 19:39 | 21:09 |
| 13 (17) шишәмбе | 5:16 | 6:46 | 13:30 | 17:32 | 19:36 | 21:06 |
| 14 (18) шаршамбы | 5:18 | 6:48 | 13:30 | 17:30 | 19:34 | 21:04 |
| 15 (19) кесе йома | 5:19 | 6:49 | 13:30 | 17:28 | 19:31 | 21:01 |
| 16 (20) йома | 5:21 | 6:51 | 13:30 | 17:26 | 19:28 | 20:58 |
| 17 (21) шәмбе | 5:23 | 6:53 | 13:30 | 17:23 | 19:26 | 20:56 |
| 18 (22) йәкшәмбе | 5:25 | 6:55 | 13:30 | 17:21 | 19:23 | 20:53 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# СӘСКӘ ЕҪЕ БАЛДА БУЛЫР




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**35-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Амеба. Хәмитов. Карантин. Диплом. Ғәрәп. Әтәс. Лупа. Әсмә. Ир. Тауис. Ил. Әй. Хужа. Атташе. Витте. Бәрҙе. Тана. Шама. Алама. Март. Ритм.

**Вертикаль буйынса:** Ғарипова. Көрәк. Хат. Пайтәхет. Хата. Ашлама. Ниәт. Мамонт. Абаға. Әсә. Литр. Насос. Рота. Алоха. Мәрт. Дәүләтбаев. Иптәш. Лава. Мырҙабаева.

## ҠОТЛАЙБЫҘ!



Яҡыныбыҙ, Әбйәлил районы Дәүләт ауылында тыуған, хәҙерге көндә Баймаҡ районы Алғаҙы ауылында йәшәүсе апайыбыҙ, һеңлебеҙ **Ҡунсбаева Рима Таштимер ҡыҙын** күркәм юбилейы, **60 йәше** менән ихлас күңелдән ҡотлайбыҙ.

Туғаныбыҙ 1962 йылдың 12 сентябрендә яҡты донъяларға ауаҙ һала, урта мәктәпте Бөрйән районы Байназар ауылында тамамлап, уҡыуын Белорет педколледжында дауам итә. Уҡыуҙы тамамлағас, йүнәлеш буйынса Баймаҡ районы Әбделкәрим ауылына балалар баҡсаһына тәрбиәсе булып эшкә ебәрелә. Тап шунда ул үҙенең тормош иптәшен, беҙҙең яратҡан еҙнәбеҙ, кейәүебеҙ Кәбирҙе осратып, донъя ҡора. Бергә-бергә өс малай үҫтереп, бер-берсеһенә терәк булып, беҙгә өлгө булып, ел-ямғырҙарға бирешмәй ғүмер итәләр. Килен булып төшкәндән алып, хаҡлы ялға киткәнсе, Рима туғаныбыҙ Алғаҙы ауылында башланғыс кластар уҡытыусыһы булып эшләне, гөрләп торған ауыл тормошонда беренсе рәттәрҙә ҡатнашып, "Миләш" фольклор ансамблендә сығыш яһап, дәртләнеп ғүмер кисерә.

Уңған, тынғыһыҙ, хәстәрлекле, сабыр йөрәкле туғаныбыҙға һаулыҡтың иң ныҡлыһын, бәхеттең иң олоһон, ғүмерҙең иң оҙонон теләйбеҙ. Балаларының изгелеген, шатлыҡ-ҡыуаныстарын күреп, бәрәкәтле, имен тормошта оҙон бәхетле ғүмер кисереүен теләйбеҙ. Иртәләрең - ҡояшлы, килер көндәрең - көләс, кистәрең - айлы, уйҙарың -яҡты, күңелең тыныс булһын, мәрхәмәтле йөрәгең арыу-талыу белмәһен. Киләсәктә лә бөгөнгө кеүек оло йөрәкле, киң күңелле терәгебеҙ булып, балаларыңдың, яҡындарыңдың изгелектәрен күреп, оҙон-оҙаҡ йәшәргә насип булһын!

*Аҡ бәхеттәр менән атһын таңың,*
*Ҡояш көлһөн мәңге йөҙөңдә.*
*Теләктәрҙең ихлас, изгеләрен*
*Беҙ теләйбеҙ тыуған көнөңдә.*

**Иң изге теләктәр менән апайҙары Зөлфиә, Фатима, һеңлеләре Әнисә, Айгөл, еҙнәләре Иҙелбай, Ришат һәм кейәүҙәре Фуат, Рәфис.**

ҮӘТ, ШУЛАЙ!



# БЕҘҘЕҢ ҺЫЛЫУҘАР...

**Урман хужалығы министрлығы хеҙмәткәре халыҡ-ара матурлыҡ конкурсында Башҡортостан данын яҡлаясаҡ.**

19-18 сентябрҙә Малайзияла "Мисс Азия - 2022" халыҡ-ара матурлыҡ конкурсы ойошторола. Конкурста төрлө илдәрҙән 45 ҡыҙ ҡатнаша. Уларҙы фотосессиялар, экскурсиялар, ярыш һынауҙары, репетициялар, илдәре менән таныштырыу һәм финал шоуы көтә. Сарала Башҡортостан Республикаһынан "MissBash Models" агентлығы моделе Гөлфинә Вәлиева сығыш яһай. Ҡыҙға 25 йәш, ул Урман хужалығы министрлығында эшләй. Сығышы менән Бөрйән районынан. "Был конкурста Башҡортостан өсөнсө тапҡыр сығыш яһай һәм яҡшы һөҙөмтәләр күрһәтә. 2017 йылда MissBashModels моделе Регина Мөхәмәҙиева ул конкурста 1-се Вице-мисс Азия исемен алды, ә 2018 йылда Рената Нәҙершина тәүге унау иҫәбенә инде", - тип хәбәр итте модель агентлығы етәксеһе Луиза Закирйәнова.

АФАРИН!

# ГЕРОЙҘАР ИҪТӘЛЕГЕНӘ...



**Уҙған шәмбелә Иглин районы Оло Тәләк ауылында Советтар Союзы Геройы, генерал-майор Таһир Кусимовҡа бюст асылды. Ул Бөйөк Ватан һуғышының туғандаш халыҡтары геройҙары аллеяһында урынлаштырылды.**

Был аллеяла тыныс күк йөҙөн һаҡлау өсөн йәнентәнен аямай алышҡан төрлө милләт геройҙарына 21 һәйкәл ҡуйылған. Бюст асыу тантанаһында Иглин районы хакимиәте башлығы Гүзәл Насирова, крәстиәнфермер хужалығы етәксеһе Хәсән Иҙиәтуллин, Геройҙың туғаны Айһылыу Усманова, Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай рәйесе урынбаҫары Рөстәм Әхмәҙинуров, мәҙәниәт министры урынбаҫары Илнур Мөхәйәнов, Таһир Кусимов музейы мөдире Фәнилә Билалова ҡатнашты. Сараға Ҡырмыҫҡалы һәм Әбйәлил райондарынан эҙәрмән отрядтары ла килгәйне. "Бөйөк Ватан һуғышының туғандаш халыҡтары геройҙары аллеяһы - беҙҙең хәтер, бөйөк батырлыҡ алдында баш эйеү билдәһе ул. Беҙ ошо хәтерҙе балаларыбыҙға һәм ейәндәребеҙгә тапшырырбыҙ. Бер кем дә тарихты һәм донъяны фашизмдан ҡотҡарған ысын геройҙарҙың исемдәрен үҙгәртергә ҡыймаһын өсөн", - тип яҙҙы Хөкүмәт вице-премьеры Ирек Сәғитов социаль селтәрҙәге сәхифәһендә.

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Бөйөк Ватан һуғышының туғандаш халыҡтары геройҙары аллеяһы быйыл июль айында асылғайны. Донъя тарихында был - ошондай беренсе объект.

*Рәсәйҙә бихисап академик тынлы музыка ҡоралдарын үҫтереүгә иғтибар ҙур. Ә беҙ донъя халыҡтарының тынлы уйын ҡоралдары ла иғтибар үҙәгендә булһын өсөн ҡулыбыҙҙан килгән тиклем эшләйбеҙ.*

ҠЫҪҠА ӘҢГӘМӘ

# ЕЛ ТЫУҘЫРҒАН МОҢ

**Сентябрь етеп, көндәр ҡапыл һыуытып ебәрһә лә, күңелдәрҙе йылытыр мәл был: Башҡортостандың сәнғәт донъяһы йәнләнә, театр-филармониялар оҙайлы ялдан һуң үҙ ишектәрен аса. Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы ла ошо дөйөм шау-шыуға ҡушылып, тамашасыларын төрлө матур саралары менән көтөп тора. Шуларҙың береһе 29-30 сентябрь көндәрендә уҙғарыласаҡ "Ел тыуҙырған моң" II Халыҡ-ара этник музыка ҡоралдары фестивале. Уның тураһында Башҡортостандың Халыҡ музыка ҡоралдары милли оркестрының баш дирижеры һәм художество етәксеһе Линар Дәүләтбаев менән филармонияның Реклама һәм йәмәғәтселек менән бәйләнеш бүлеге етәксеһе Ирина Захарованан һораштыҡ.**




**Был фестиваль башҡаларынан нимәһе менән айырылып тора?**

**И. Захарова:** Беҙ "Ел тыуҙырған моң" II Халыҡ-ара этник музыка ҡоралдары фестивален үҙ-ара "Ҡурай дуҫтарын йыя" тип атаныҡ. Сөнки был фестивалдең төп символы - ҡурай. Уның эмблемаһында ла төрлө тынлы музыка ҡоралдары ярҙамында ҡурай һынландырылған. Тәүге фестивалдә лә, быныһында ла Халыҡ музыка ҡоралдары милли оркестры флагманы булып тора, бөтә ҡатнашыусылар ҙа оркестр менән берлектә уйнаясаҡ. Фестивалдең программаһына килгәндә, тәүге көндә Башҡортостан артистары сығыш яһаясаҡ. Улар араһында Марат Фәйзуллин - Taturas, "Zainetdin" этно проекты, "Uzoritsa" этно төркөмө, Башҡортостандың атҡаҙанған артистары Илнур Хәйруллин һәм Азат Биксурин, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Артур Ғайсаров һәм филармониябыҙҙың башҡа солистары бар. Ә 30 сентябрь көнө сәхнә тулыһынса ҡунаҡтар ҡарамағына тапшырыла: Мәскәү һорнайсылар оркестры етәксеһе Артемий Воробьев, Санкт-Петербургтан беҙҙең тамашасыларға күптән таныш Аргишти (дудук), Ҡалмыҡ Республикаһынан Баир (лимба), Ирандан күп төрлө музыка ҡоралдарында уйнаусы оҫта Хамид Реза Даду киләсәк.

Был фестиваль беренсе тапҡыр биш йыл элек ойошторолғайны. Ул Халыҡ музыка ҡоралдары милли оркестры 2016-2017 йылдарҙа Рәсәй буйлап ҙур концерт туры менән йөрөп ҡайтҡандан һуң барлыҡҡа килгән сара. Тынлы этник музыка ҡоралдарын һаҡлау һәм үҫтереү, тәжрибә уртаҡлашыу, оҫталыҡ арттырыу, бәйләнештәр булдырыу йәһәтенән бик әһәмиәтле ул. Ләкин коронавирус пандемияһына бәйле бер нисә йыл фекерҙәштәрҙе бергә туплай алмай торҙоҡ, ниһәйәт, тиҙҙән осрашасаҡбыҙ.

**Бөгөн Башҡортостанда тынлы халыҡ музыка ҡоралдары өлкәһендә үҫеш нисек бара?**

**Л. Дәүләтбаев:** Үҙебеҙҙең музыка ҡоралдарын үҫтереү өсөн барлыҡ көсөбөҙҙө һалып эшкә тотонһаҡ, үҫешәсәкбеҙ. Әлбиттә, Рәсәйҙә тынлы музыка ҡоралдарында уйнаусы оҫталарға ҙур ҡытлыҡ һиҙелә. Был мәсьәләне дүрт йыл элек үк ил кимәлендә күтәреп сығыусылар булды. Рәсәйҙә флейта, тромбон, гобой, жалейка һәм башҡа бихисап академик тынлы музыка ҡоралдарын үҫтереүгә иғтибар ҙур. Ә беҙ донъя халыҡтарының тынлы уйын ҡоралдары ла иғтибар үҙәгендә булһын, кешеләр улар менән күберәк ҡыҙыҡһынһын өсөн ҡулыбыҙҙан килгән тиклем эшләйбеҙ. "Ел тыуҙырған моң" халыҡ-ара фестивале шуның өсөн дә әһәмиәтле проекттарыбыҙҙың береһе һәм ул илебеҙҙәге этник тынлы уйын ҡоралдарына арналған берҙән-бер шундай сара. Тәүге тапҡыр үткәргәндә Монголия, Ҡаҙағстан, Ҡырғыҙ һәм Молдова республикаларынан, Норвегиянан, Рәсәйҙең төрлө төбәктәренән ҡатнашыусылар йыйылғайны. Киләсәктә лә был проект республика Хөкүмәте һәм Мәҙәниәт министрлығы тарафынан хуплау табыр һәм географияһын киңәйтер, тигән өмөттә ҡалабыҙ.

Әйткәндәй, быйыл фестиваль ни бары ике көн генә дауам итеүенә ҡарамаҫтан, сит тарафтарҙан килгән музыканттар оҫталыҡ дәрестәре үткәрергә ризалыҡ бирҙе. Уларҙы теләгән һәр кем килеп тыңлай ала, аҙаҡтан инде ҡатнашыу тураһында сертификат та тапшырыласаҡ. Һәр оҫтаға бер сәғәт тирәһе ваҡыт биреләсәк, улар Башҡорт дәүләт филармонияһының Орган залында тәжрибә уртаҡлаша. Артабан профессионалдар тынлы этник уйын ҡоралдарына ҡағылышлы көнүҙәк мәсьәләләр буйынса фекер алышыу ниәтендә түңәрәк ҡорға йыйыласаҡ. Фестивалдең теүәл программаһы менән филармонияның рәсми сайты, социаль селтәрҙәрҙәге төркөмө аша танышырға мөмкин. Билеттар әле үк кассаларҙа һатыла, "Пушкин карта"һына ла алырға була. Бик үҙенсәлекле һәм ҡыҙыҡлы сара килеп сыҡмаҡсы, унда ҡатнашмай ҡалмағыҙ!

**Сәриә ҒАРИПОВА яҙып алды.**

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

## АҠМУЛЛА СЫҒА СӘХНӘГӘ



**Милли йәштәр театры Башҡорт теле көнөнә Аҡмулла тураһында спектакль әҙерләй.**

Ошо көндәрҙә "Аҡмулла" спектакленең ижади төркөмө - башҡорт труппаһының баш режиссеры Рөстәм Хәкимов, театрҙың әҙәби-драма бүлеге мөдире Рәзилә Рысҡужина, музыкаль бүлек мөдире Вәсил Ғафаров, рәссам Рөстәм Баймөхәмәтов һәм сценарий авторы Зөһрә Бураҡаева башҡорт шағиры һәм мәғрифәтсеһе, башҡорт шиғриәте классигының тыуған төйәгендә - Миәкә районы Туҡһанбай ауылында, Мифтахетдин Аҡмулла музейында булды. "Беҙҙең төркөм Аҡмулла биографияһындағы иң мөһим факттар аша уның тормошо һәм ижады менән таныштырыу бурысын ҡуйҙы. Ул мәғрифәтсе булған, хәҙер инде беҙ балаларға һәм үҫмерҙәргә, йәштәргә, башҡорт әҙәбиәте һәм мәҙәниәте менән ҡыҙыҡһынғандарҙың барыһына ла Мифтахетдин Аҡмулланың кем булыуы тураһында һөйләргә тейешбеҙ", - ти Зөһрә Бураҡаева. Театрҙың матбуғат хеҙмәте хәбәр итеүенсә, спектаклдең премьераһы 14 декабргә, Башҡорт теле көнөнә билдәләнгән.

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

## ИРЕК БАРҘА...

### ирлек бар

Бар булһаң, биргәneнде әйтмә, ир булһаң, еңелгәнеңде әйтмә.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Ысын даһиҙар һирәк осрай ғына түгел, улар тәғәйенләнеше буйынса һирәк файҙаланыла ла.

**(Эдмунд Берк).**

Был донъяла бер ниндәй хәүефһеҙ нимә юҡ, хәүефтән ҡотолор ысулдар ғына бар.

**(МакАртур).**

Әйҙәгеҙ, алға барайыҡ. Хаталарға һәм ҡайғы-хәсрәттәргә йәбешеп ни өсөн ятырға? Өмөткә һәм мөхәббәткә кәртә булып торған нәмәләрҙән ниңә ысҡынып китмәҫкә?

**(Будда).**

Бергә йәшәгәндәрҙең дуҫлығына өлгәшәм тиһәң, үҙеңде улар менән өс айға бер күрешкәндәге кеүек тоторға өйрән.

**(Жюль Ренар).**

Булған фирҡәлә вазифалы урын яулап маташҡансы, яңы фирҡә төҙөүең яҡшыраҡ.

**(Люк де Вовенарг).**

Фекер йөрөтөү - белеү түгел, ҡарап тороу - күреү түгел.

**(Аноним).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Корабль һәләкәткә осрай. Барыһы ла һәләк була, әммә бер генә кеше ҡотолоп ҡала. Уны океан тулҡыны бер йән эйәһе лә булмаған утрауға алып барып ташлай. Кеше туҡтауһыҙ доғалар уҡый, Аллаға ялбара, ҡотҡарыусылар килмәҫме, тип, океан өҫтөнән күҙен алмай. Бына бер саҡ һыу өҫтөндә йөҙөп йөрөгән корабль ярсыҡтары, төрлө бүрәнә-ағастар күҙенә салына. Кеше уларҙы һыуҙан сығарып, яр буйында бәләкәй генә бер ҡыуыш төҙөп ала. Икенсе көнөнә иһә утрау буйлап үҙенә ашарлыҡ ризыҡ эҙләп сығып китә. Кире әйләнеп килһә, ҡыуышын йәшен атыуҙан ут ялҡыны солғап алған. Кеше ҡайғыға ҡала, асыуланып, илап, күккә ҡарап ҡысҡыра: "Йә, Аллам, ниңә мине былай яҙаларға булдың, ниндәй гонаһтарым өсөн?"**

**Иртән кеше ярға яҡынлашып килеүсе корабль тауышына уянып китә. "Һеҙ мине нисек эҙләп таптығыҙ?" тип, шатланып ҡысҡыра кеше. "Беҙ һинең ут яғып, сигнал биреүеңде шәйләп ҡалдыҡ", - ти ҡотҡарыусылар...**

**Әйләнә-тирәлә барыһы ла насар саҡта күңел төшөнкөлөгөнә биреләүе бик еңел ул. Ләкин нисек кенә ауыр булғанда ла Хоҙай беҙҙең менән, тип ышанырға кәрәк. Шуны бел: әгәр ҙә бәләкәй генә ҡыуышың янып китә икән, был Хоҙай мәрхәмәтен саҡырыусы сигнал булыуы ла ихтимал бит..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.
1 582218 911006 22036

Баш мөхәррир: **Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:** Сәриә ҒАРИПОВА, Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ, Зәйтүнә ӘЙЛЕ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы: **450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ООО "СПУТНИК-ЮГ" нәшриәтендә баҫылды (453400, Башҡортостан Республикаһы, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури урамы, 4, офис 203).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99
**Матбуғат таратыу** 252-39-99

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -** 9 сентябрь 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3540
Заказ - 1138